ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

16-22 август (урағай) 2024

№32 (1125)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Атта бар, ә тәртәләсе?



2-3

Бер осорҙа ла үҙгәрмәй торған...



фольклор тигән ҡиммәттәребеҙ бар

8-9

Аттарымды...



борҕо ҡысҡыртып саҡырам

11

Ямғыр һәм йәй ташы



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*"Һинән бәхетһеҙерәк кешеләр ҙә бар был донъяла". Әлбиттә, был һүҙҙәр һине һыйындырыр ҡыйыҡ түгел, әммә улар ниндәйҙер дауылдан йәшеренергә етеп тора.*

*(Г. Лихтенберг).*

КӨН ТЕМАҺЫ

# МӘҒАРИФ: БӨГӨН ҺӘМ ИРТӘГӘ

**Август - уҡыусыларҙың йәйге каникулдарының, педагогтарҙың отпускыларының аҙағы. Быйылғы йәй нисек кенә ямғырлы булмаһын, ул барыбер сыуаҡ сентябрь көндәрен иҫкә төшөрә. Йәғни, август сентябрь менән аңҡый: "Яҙ кеүек күңелдә йылы саҡ, ҡояштай иркәләй бала саҡ. Бөтәһе йылмая бик алсаҡ, хәтерҙә мәктәбем ҡаласаҡ", - тип ихлас йырлай традицион сентябрь байрамында - Белем көнөндә Өфө ҡалаһының М.Ғ. Иҫҡужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейы уҡыусылары. Уларҙы алдағы уҡыу йылында ошо белем биреү үҙәген тамамлап, маһир эшҡыуар булып танылған Муса Мәзитовтың хәйриә ярҙамы менән асылған ике үтә шәп һөнәри йүнәлеш биреү объекты көтә: медиа- һәм һынлы сәнғәт студиялары улар. Шул саҡта эстән генә уйлап ҡуяһың: и-и-х, күберәк тыуһындар ине шундай Мәзитовтар!**



Әйе, власть әһелдәре, мәғариф органдары етәкселәре, уҡыу йортттарының ректор-директорҙары, уҡытыусы-тәрбиәселәр өсөн август - киләсәк уҡытыу-тәрбиә биреү йылын өр-яңынан күҙаллау айы. Август кәңәшмәләре - шуға инеш. Быйыл республикабыҙ педагогтарының Стәрлетамаҡта ойошторолаҫаҡ дөйөм август "педсоветы" алдынан мәғариф системаһының төбәк кәңәшмәләре уҙғарыла, тип хәбәр итә киң матбуғат саралары. Шулар-ҙың тәүгеһе Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев рәйеслегендә республикабыҙҙың көньяҡ-көнсығыш зонаһына ҡараған Сибай ҡалаһында уҙғарылды. Унда телгә алынған иң мөһим мәсьәләләрҙең береһе - мәктәптәрҙең заманса матди-техник базаһын булдырыу, уларҙы яңы, цифрлы технологиялар нигеҙендә эш алып барырлыҡ йыһаздар менән тәьмин итеү. Һүҙ юҡ, ошо йәһәттән күҙгә күренерлек эштәр байтаҡ башҡарылған: "Мәғарифтың мәктәп системаларын модернизациялау" тигән федераль программа сиктәрендә 2022 йылдан бирле 140 мәктәп бинаһы ремонтланған, әле 31 урта белем биреү учреждениеһында ремонт эштәре дауам итә, уларҙың 6-һы әлеге йылдың 1 сентябрендә уҡыусыларҙы ҡабул итәсәк. Проект, башлыса, федераль бюджеттан финанслана, унан 1,48 млрд һум аҡса бүленгән. Ошондай күләмдә финанслау бу-йынса республикабыҙ Рәсәйҙә өсөнсө урынға сыҡҡан. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров әйтеүенсә, һуңғы 5 йыл эсендә 22 004 уҡыусыға иҫәпләнгән 44 өр-яңы мәктәп һәм 9 173 урынлыҡ 65 балалар баҡсаһы төҙөлгән.

Үрҙә әйтелгәндәр менән, һис һүҙһеҙ, маҡтанып була. Тик уҡытыу-тәрбиә эше һөҙөмтәле булһын тиһәк, үтә шәп биналар һәм әүәл хыялда ғына булған йыһаздар менән генә сикләнеү етмәй. Һәр мәктәптең асылы - уҡыусылар, ата-әсәләр һәм педагогик коллектив берлегендә. Һәр йыл һайын йөҙәрләгән бала мәктәпкә уҡырға төшә, ә улар 11 йылдан һуң ниндәйерәк шәхес буласаҡ - интеллекты һәм рухи кимәле, тәртибе, әхлаҡи тәрбиәлелеге, ижади мөмкинлектәре, һөнәри ынтылыштары һ.б. - былар барыһы ла бала шәхесен үҫтерә алыусы педагогик кадрҙарҙан, мәктәп етәкселәренән тора. Педагогик коллектив балаларҙы ғына түгел, йәш ата-әсәләрҙе лә тәрбиәләүсе ул, сөнки һәр баланың тәбиғи һәләттәрен асыуҙа һәм үҫтереүҙә уҡытыусы-тәрбиәселәрҙең һәм ата-әсәләрҙең бер төптән егелеп эш итеүе мотлаҡ. Ошолай булғанда матди етешһеҙлек замандарында ла ярлы мәктәп стеналарынан иҫ киткес гүзәл шәхестәр үҫеп сыҡҡаны барыбыҙға ла билдәле.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

ШАҒИР ҺҮҘЕ

# БАШҠОРТ ҺӘМ АТ

*Башҡорт менән аттың йәне игеҙ,*
*Эйәр өҫтәрендә яралған.*
*Башҡорт менән аттың тоғролого*
*Ҙур яуҙарҙа ҡат-ҡат һыналған.*

*Башҡорт менән аттың йәне игеҙ,*
*Даға сыңдарында яралған.*
*Даға эҙе Париж урамына*
*Шанлы тарих булып яҙылған.*

*Башҡорт менән аттың йәне игеҙ,*
*Ҡурай моңдарында яралған.*
*Башҡорт аты үткән данлы юлдан*
*Башҡорт ҡына аңлар йыр ҡалған.*

*Башҡорт аты - тоғролоҡҡа һәйкәл,*
*Башҡорт аты - рухы башҡорттоң.*
*Башҡорт һәм ат - ике ҡанаты ул*
*Ирек һөйгән яугир халҡымдың.*

Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНА.



12+

✓ *"Телебеҙҙе бөтөрәләр!" тип һөрәнләү менән генә туған телебеҙҙе һаҡлап ҡалып булырмы? Ошо һорауыма яуап эҙләп, бер нисә танышымдың милли гәзит-журналдарға яҙылыуы менән ҡыҙыҡһындым.*



УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ



# БЫЛ ГӘЗИТКӘ ЫШАНАМ!

**Гәзит һәм журналдарҙың төп маҡсаты, минеңсә, кешенең аңын төрлө ауыр уйҙарҙан аҙ булһа ла арындырыуға ҡайтып ҡала. Ә бының өсөн ул берҙәй ҡыҙыҡлы ла, уҡымлы ла, теле лә ябай, аңлайышлы булырға тейеш. Шул уҡ ваҡытта гәзиттәге мәҡәләләрҙең уҡыусының мейеһендә ҡайнаған әллә күпме төрлө ҡатмарлы һорауҙарға яуап бирерлек, буталсыҡ фекерҙәр төйөнөнән арындырырлыҡ та булыуы мөһим.**

Беләһегеҙме, гәзит менән интернеттың айырмаһы нимәлә? Нин-дәй генә гәзит булмаһын, уның һуңғы уҡыу нөктәһе - әйтеп бөтөр-гәнлек һәм мәғлүмәтте тулыһынса асып биреү ул. Йәғни, гәзиттәге һәр бер мәҡәләне уҡып бөтәһең, авторы менән дә танышаһың һәм вәссәләм, күңелдә әйтелмәгәнлек тойғоһо ҡалмай. Бер мәҡәлә бөттө - тамам. Ә интернет киңлегенә бер мәғлүмәт ҡарайым йәки мәҡәлә уҡыйым тип инеп китһәң, башҡөллә сумаһың, күргәнде лә, кәрәк-мәгәненде лә уҡыйһың, айырыла алмайынса тик ултыраһың. Йән кө-йөгө, әйтәгүр! Әлбиттә, бөгөнгө көндә һәр бер гәзит йәки журналдың электрон версияһы ла донъя күреп килә, ләкин баҫмаһың мәртәбә-һе, баһаһы, ғөмүмән, баҫма тураһында фекер уның яҙма варианты-нан сығып билдәләнә.

Алда яҙыуымса, "әйтелмәгәнлек" тойғоһона килгәндә, "Киске Өфө" уны айырыуса отошло итеп бирә. Авторҙарҙың мәҡәләләрен "Шулай итеп..." тип, фекерҙе бер епкә төйнәп ҡуйыуҙары айырыуса яҡын миңә. Сөнки ҡайны бер баҫмаларҙа зур-зур мәҡәләләрҙе уҡый барып, аҙағына еткәнсе тәүге фекерҙе юғалтып та ҡуяһың, ә автор тарафынан яҙғандарының тос ҡына ҡыҫҡа фекере булыуы был мәсьәләне еңел хәл итә. "Киске Өфө"гә был йәһәттән "Афарин!"дан башҡа баһа юҡ.

Гәзит, ғөмүмән, ваҡытлы матбуғат баҫмалары - быға тиклем йәшә-гән һәм бынан һуң да оҙаҡ йылдар дауамында йәшәйәсәк классика. Уларҙың һәр ҡайһыһында аҡыл, белем, уҡыусыларының тормошо-на ыңғай йоғонто яһаған уй-фекерҙәр, авторҙарҙың үҙенсәлекле, үҙенә генә хас яҙыу стиле. Былар бер ҡасан да үҙ актуаллеген юғалт-маясаҡ. Һәм, әлбиттә, быларҙың барыһы ла "Киске Өфө" гәзитенә лә хас.

Хәҙерге ваҡытта мәғлүмәт артыҡ, ифрат күп. Уларҙың дөрөҫтәре булған һымаҡ, тикшерелмәгән, иләнмәгән-һуғылмағандары ла етер-лек. Мәҫәлән, халыҡ дауаһы бөгөнгө көндә бик актуаль булып кит-те. Кем теләй, шул үҙенсә яҙа ла киң йәмәғәтселек иғтибарына сыға-ра. Был төптө дөрөҫ түгел, сөнки дауаланам тип, киреһенсә, зыян килтерергә мөмкин. Ә бына "Киске Өфө"лә баҫылған халыҡ дауала-рына ышанам, сөнки баҫманың ысынлап та файҙалы һәм, иң мөһи-ме, зарарһыҙ ысулдар тураһында яҙыуына шигем юҡ.

"Киске Өфө"нө тағы нимә өсөн яратам? Уны уҡыған һайын нин-дәйҙер яңы фекерҙәр тыуа, нимәгәлер ынтылыш уяна, күңелдә пози-тив тойғолар барлыҡҡа килә.

Гәзиттәрҙә баҫылған мәғлүмәт, бәлки, бер аҙ һуңлап та киләләр, ләкин ул ысынбарлыҡты тулы кимәлдә аңларға мөмкинлек биреүсе сығанаҡ. Интернетта теге йәки был хәбәрҙе уҡыйһың да, артабан китәһең, ҡайһы саҡта 5 минут элек нимә уҡығанлығың да иҫләмәйһе-ң. Ә гәзиттә ошо уҡ хәбәрҙе уҡыу, уны тәрән анализлап, бөтә яҡлап аңлап, тирә-яҡтағы хәлдәргә ниндәй йоғонто яһауын күреп-белергә булышлыҡ итә.

Йәмәғәт, әйҙәгеҙ, гәзит-журналдарҙы алдырайыҡ, уҡыйыҡ, тәрән мәғлүмәтле булайыҡ!

**Рәсимә ШАҺЫБАЛОВА.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

**Редакциянан: Икенсе ярты йыллыҡҡа гәзитебеҙгә яҙылып, "Кем алыҡ?" акцияһында еңеүселәр исемлеген 15-се биттә уҡығыҙ.**

УЙЛЫҒА - УЙ

**Халҡыбыҙҙың ошо тапҡыр һүҙҙәренең әтнәкәһенең төбөндә ниндәй ғилләә ята икән, һеҙ ошо турала уйланғанығыҙ бармы, хөрмәтле гәзит уҡыусы дуҫтарым? Үҙемә ҡалһа, эсемде бошороп, хатта ҡайсаҡ төн йоҡоларымды алған проблемаларҙы "хәл итә-итә": "Атта бар ҙа ул, ә бына тәртәләсе?"- тигән һорауҙа туктап ҡалам йыш ҡына. Ни өсөн тиһегеҙме? Һуңғы осорҙа интернетты асыу менән ҡайсаҡ үҙеңде быҫраҡҡа килеп эләккән һымаҡ тояһың: кемдер аҡса юҡ тип зарлана, кемеһелер беҙҙе талайҙар, алдайҙар, телебеҙҙе бөтөрәләр, ти һәм башҡалар. Һәм бер-берендән быҫраҡ эҙләү, күрмәгән-белмәгән кешеләрҙе быҫраҡҡа батырыу йышайғандан-йышая. Ошондай саҡта халҡыбыҙҙың юғарылағы ишара-һүҙҙәрен нисек иҫкә төшөрөп уйланмайһың да, нисек итеп әйтер һүҙеңде әйтмәй, тыныс ҡына боҫоп ятаһың инде?..**

# АТТА БАР, Ә ТӘРТӘЛӘСЕ?




Халҡыма еткерер һүҙем-дең тәүгеһе шул: туған телде һаҡлау темаһының хәл ителешендә үҙем индергән өлөшөм ниндәй һуң? "Теле-беҙҙе бөтөрәләр!" тип һөрән-ләү менән генә туған телебеҙ-ҙе һаҡлап ҡалып булырмы? Ошо һорауыма яуап эҙләп, бер нисә танышымдың мил-ли гәзит-журналдарға яҙылы-уы менән ҡыҙыҡһындым. Хәйер, был һорауға яуап асыҡтан-асыҡ инде. Уның өсөн һорашып-белешеп йө-рөү ҙә кәрәкмәй - почта йәш-нигенә күҙ һалыу ҙа етә. Ва-ҡыты-ваҡыты менән почта йәшниктәренең һәр төрлө реклама ҡағыҙҙары менән, йә булмаһа, коммуналь түләү ҡағыҙҙары менән тулы булы-уын иҫәпкә алмағанда, бө-гөнгө көндә бындай йәшник-тәрҙең кәрәге лә юҡтыр, мо-ғайын. **Ил буйлап "Башҡорт телен бөтөрәләр!" тигән хәбәр таратып, халҡыбыҙҙы үҙ яғы-на ауҙарырға тырышыусы псевдопатриоттарҙың күңелен генә үҫтерәбеҙ түгелме? Һорау: ғәйеп аттамы, әллә тәртәләме?**

Юғарылағы фекеремде да-уам итеп, тағы ла шуны әйт-мәксемен: "Мин - башҡорт!" тип күкрәк һуғып та, ейән-ейәнсәрҙәрең менән үҙең үк урыҫса аралашып, башҡорт-мон тип күкрәк киреүеңдән ни файҙа? Балалар майҙансы-ғында бергәләп уйнап йө-рөгән бәләкәстәрҙең үҙем ке-үек өләсәй-картәсәйҙәре ме-нән аралашыуына иғтибар иткәйнем бер заман. Уйнап йөрөүсе ун өс баланың берәү-һе генә урыҫ милләтенән, ҡалғандарыбыҙ - башҡорт-тар. **Шулар араһынан ейәнсә-рем менән мин генә үҙ теле-беҙҙә һөйләшәбеҙ, ә ҡалғандар - урыҫса. Һорау: телдә кем бө-төрә? Ғәйеп аттамы, әллә тәр-тәләме?**

Минең яҙғандарыма ҡар-шы сығып, ҡайһы берәүҙәр: "Мәктәптә башҡорт теле дә-рестәре һанын ҡыҫҡартты-лар", - тип, бөтә ғәйепте мәк-тәпкә йүнәлтеүселәр ҙә табы-лыр, бәлки. Республикабыҙ-ҙың урыҫ мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыуға бәйле барлыҡ мәсьәләләрҙең уртаһында ҡайнаған кеше бу-лараҡ, был йүнәлештәге хата-ларҙы ла әйтмәй үтеү, минең-сә, дөрөҫ булмаҫтыр.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Стәрлета-маҡты урап үткән юлды киңәйтеү эштәре башланыуы хаҡында белдерҙе. "Был аҙ-нала "Росавтодор" етәксеһе Роман Нови-ков менән Стәрлетамаҡты урап үткән юлды киңәйтеүгә старт бирәбеҙ. Халыҡ уны күптән көтә ине. Ергәнгә тиклем һу-ҙасаҡбыҙ", - тине Радий Хәбиров Баш-ҡортостан Хөкүмәтенең оператив кә-ңәшмәһендә. Төбәк етәксеһе әйтеүенсә, иҫке юл авария хәлендә.

✓Башҡортостан зыян күргән Курск өлкәһе халҡын ҡабул итергә әҙер. Был турала Хөкүмәттең оператив кәңәшмә-һендә республика Башлығы Радий Хәби-ров белдерҙе. "Беҙ Курск өлкәһе етәксе-леге менән бәйләнешкә сыҡтыҡ. Мин балаларҙы ҡабул итергә әҙер булыуыбыҙ-ҙы белдерҙем. Зыян күргәндәргә ярҙам итергә кәрәк", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Радий Хәбиров.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хә-биров муниципалитет башлыҡтарын ау-ыл биләмәләрен комплекслы үҫтереү программаһында әүҙемерәк ҡатнашырға саҡырҙы. Был программаның мөмкин-лектәрен киң файҙаланыуға һәм унан шаҡтай аҡса алыуға ҡарамаҫтан, ике ра-йондың тотҡарланыуы сәбәпле, респуб-лика яңы объекттар алыу мөмкинлегенән ҡулдан ысҡындырған (балалар баҡсаһы һәм һыу менән тәьмин итеү өлөшө систе-маһы). Радий Хәбиров Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫа-ры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахмановҡа был "хата"ны төҙәтергә ҡушты.

✓Башҡортостан Хөкүмәтенең опера-тив кәңәшмәһендә Радий Хәбиров мәш-ғүллек системаһын тулыһынса реформа-лау хаҡында һөйләне. Был йәһәттән төбәк Башлығы мәшғүллектең бигерәк тә урта махсус уҡыу йорттарында кадрҙар әҙерләүгә бәйле булыуын билдәләне, Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-ми-нистрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаевҡа урта махсус уҡыу йортта-рында тағы ла 2 мең урын булдырыу бу-рысын ҡуйҙы һәм мәғариф буйынса ав-густ кәңәшмәһенә әҙер ҡарар менән сы-ғырға ҡушты.

✓Башҡортостан буйынса Россельхоз-надзор идаралығы Мәләүез районы пред-приятиеһында Конго Демократик Рес-публикаһына оҙатыу өсөн әҙерләнгән 27 тонналыҡ ит ярымфабрикаттары парти-яһын тикшерҙе. Бөгөнгә Африкаға оҙа-тылған ит йәмғеһе 54 тонна тәшкил итә. Алдан хәбәр ителеүенсә, Башҡортостан-да май экстракцияһы предприятиелары 2024 йылдың ете айында 5,5 мең тонна рапс майы экспортлаған.

✓ *Һуңғы осорҙа халҡыбыҙ эмоциялар менән генә йәшәүҙе, "ура" ҡысҡырып еңеү яулауҙы бер ғәҙәткә әйләндереп, шуның менән билдәлелек яулауҙы модаға керетеү өҫтөндә эшләгәнгә оҡшап киткән кеүек тойола башланы.*



Барлыҡ башҡорт балалары ла үҙ телен мәктәптәрҙә өйрәнергә тейеш, тигән Хөкүмәт ҡарарына ярашлы эш башлап ебәргәйнек үткән быуаттың 70-се йылдар аҙағында. Урыҫлашҡан балалар өсөн дәреслектәрҙең әҫәре лә, программалар ҙа юҡ, күргәҙмә әсбаптар тураһында һүҙ ҙә булыуы мөмкин түгел. Бары тик "Уҡыт!" Ошондай шарттарҙа эш башлап, телде һаҡлау өлкәһендә бар хәлебеҙсә үҙ өлөшөбөҙҙө индерергә тырышып йөрөгән заманда урыҫ балаларының ата-әсәләре лә беҙҙең телебеҙҙе өйрәнеү теләген белдермәһенме! Башҡорт теле уҡытыусылары өсөн яңы һынауҙар башланды: программаны үҙең төҙө, дәреслектәр төҙө, сөнки саф башҡорт мәктәп-тәре өсөн төҙөлгән дәреслектәр урыҫ балаларында ла, урыҫлашып бөткән балаларҙа ла телгә ҡарата тик нәфрәт кенә уятырға мөмкин икәнен белгән уҡытыусылар өсөн был дәреслектәр ярҙамсы түгел ине. Башҡорт теле уҡытыусыларына һүҙ юҡ, кемеһе нисек булдыра алды, шулай эшләне. Тик мәғариф өлкәһендәге етәкселәр "уҡыт"тан башҡа ме-нән ярҙамға ашыҡманы. Өҫтәүенә, тикшереүселәр бер генә урыҫ балаһына ла сиреккә "ике"-ле ҡуйылырға тейеш түгеллеген иҫкәртеп кенә торҙо. Ниндәйҙер мәктәпте тамамлаусы бер егеттең: "По-башкирски знаю всего одно слово "азык-тулек", зато в аттестате у меня "5" - тип яҙғанын уҡып ғәрләнгәйнем бер заман. Унан һуң, Сибай ҡалаһы мәктәптәренең береһендә эшләгән осорҙа урыҫ балаларын уҡытҡан дүрт уҡытыусыбыҙҙың өсәүһе башҡорт - татар милләтенән булып, телмәрҙәре лә тик урыҫса булыуын да әйтеп үтмәксемен. **Һорау: Кадрҙар мәсьәләһен хәл итмәй тороп, телде һаҡлау проблемаһын уңышлы хәл итеп буламы? Ғәйеп аттамы, әллә тәртәләме?**

Күптән түгел республикабыҙ райондарының береһендә йәшәгән бер атайҙың үҙ балаһына башҡорт теле дәресенән бер күнегеүҙә ярҙам һорап мөрәжәғәт итеүенең әтнәкәһен дә әйтеп үтәйем. 8-се класс уҡыусыһы өсөн башҡорт телен белеү мотлаҡ ошондай һорауҙарҙы белеүгә бәйле булдымы икән, тигән һорау борсомаҫмы икән гәзит уҡыусыларҙы? "Килалманы, икалған, баралмай" һүҙҙәре кеүек әйтелгән һүҙҙәрҙә ниндәй тел күренеше күҙәтелә? Яуаптар:1. Эпентеза. 2. Протеза. 3. Элизия. 4 Метатеза. **Һорау: дәреслектәр башҡорт теленең байлығын, матурлығын күрһәтеп, тел байлығын балаларыбыҙға һеңдереү маҡсатында төҙөләме, әллә филологтар әҙерләү мөһимерәкме? Уҡыусылар ни өсөн башҡорт кластарына барыуҙан ҡурҡалар, йәиһә бөтөнләй теләмәйҙәр? Ғәйеп аттамы, әллә тәртәләме?**

Үҙемә төн йоҡолары бирмәй, эсемде бошорған проблемаларҙың сираттағыһы ла бөтәбеҙгә лә таныш: өлкән быуын ағинәйҙәренең "Милли кейемдәребеҙҙе ҡайтарайыҡ!" - тип, матур- матур күлдәктәр тегеп, ҡашмау-селтәрҙәр кейеп сығыштар яһап йөрөүенең дә һөҙөмтәһе, дөрөҫөн әйткәндә, күренмәй әлегә. Был һүҙҙәремде сәхнә түрҙәрен "биҙәгән" ярым-яланғас сығыш яһаусыларға, бигерәк тә йәштәребеҙгә йүнәлтеүем аңлашылалыр, моғайын. Үҙем яһаған һығымталарҙың береһе: үткән быуатта Көнбайыш илдәрендә сәхнә иркенлеге, ул илдәрҙә ошолай кейенәләр, бына ошолай сығыш яһайҙар, тип, уларға оҡшарға тырышыу үҙ "һөҙөмтәһен" бирҙе булыр. Сәхнә түрҙәренән күңелдәргә килеп ингән иҫ киткес матур йырҙар, сығыштар менән бергә, Көнбайыш илдәре әҙәпһеҙлеге үҙен һиҙҙермәй генә "демократия" һүҙе аҫтында талантт арыбыҙ аңын баҫып алды. **Һорау: ошондай саралар боҙҙомо микән беҙҙе? Үҙебеҙ булып, әҙәпле башҡорттар булып ҡалырға булдыра ала инекме беҙ? Һорау: ғәйеп аттамы, әллә тәртәләме?**

Шунсама водитель руль артына эскән килеш ултырған, бынса водитель хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен боҙған, теге ғаиләлә эскелек арҡаһында янғын сыҡҡан, был ғаиләлә ғауға ҡупҡан, кеүек яңылыҡтарҙы көн һайын телевизорҙан ишетергә тура килә. Хөкүмәт, әлбиттә, ошондай күңелһеҙ күренештәрҙе булдырмау маҡсатында төрлө көрәш сараларын ғәмәлгә ашырырға тырыша. Һуңғы йылдарҙа халыҡты айыҡ тормошҡа әйҙәү өсөн ниндәй генә саралар үткәрелмәне лә, ниндәй генә аңлатыу эштәре алып барылманы! Тик иҫерек водитель өсөн дә, ир менән ҡатын араһындағы ыреш- талашҡа ла, тиҙлек арттырыусы водитель йәки йәше етмәйенсә руль артына ултырған малай-шалай өсөн дә хөкүмәтте ғәйепләгән интернет биттәрендәге бысраҡлыҡҡа тап булына ла, "Халыҡ ҡасан үҙенә лә тәнҡит күҙе менән ҡарар икән?" тигән уй оялай башҡа. Ирекһеҙҙән, ҡайһы берәүҙәрҙең ғорур, таҙа, инсафлы, бөтә бысраҡлыҡтарҙан юғары тороп милләтебеҙҙең бер вәкиле була алмағанына әсенеп ҡуяһың... **Һорау: "Халҡыбыҙҙың "Күңеле таҙа кеше башҡалар күңеленән кер эҙләмәҫ" һәм "Насар йәшәгәндәр тормошҡа зарланмай, яҡшы нәмәләрҙе күрә белмәүселәр зарлана" тигән тапҡыр һүҙҙәренең мәғәнәһен дә боҙоп аңлатырға телдәре әйләнер микән ошо ҡайһы бер әҙәмдәрҙең?"**

Минә ҡалһа, һуңғы осорҙа халҡыбыҙ эмоциялар менән генә йәшәүҙе, "ура" ҡысҡырып еңеү яулауҙы бер ғәҙәткә әйләндереп, шуның менән билдәлелек яулауҙы модаға керетеү өҫтөндә эшләгәнгә оҡшап киткән кеүек тойола башланы. Тураһын әйткәндә, халыҡ ваҡланды, бигерәк тә ирҙәр халҡы...

Ғаилә тәрбиәһендә халҡыбыҙҙың тапҡыр аҡылынан ситләшеү, артабан мәктәптә ошондай уҡ тәрбиә араһындағы өҙөклөктәр, мәғариф өлкәһендәге етешһеҙлектәр - былар барыһы ла йәмғиәтебеҙ үҫешендә ҡара таптар булып тарихта ҡалмаһын ине, тип һүҙемде йомғаҡлайым һәм халҡыбыҙҙан ҡалған ошо аҡылды еткерәм: яҡшылыҡ итергә ҡулыңдан килмәһә, һис юғында, уҫаллыҡ ҡылма: был да бер яҡшылыҡ булыр. Ғәйеп атта ла, тәртәлә лә була...

**Нәзиә БИКБОВА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# КУРСК ЮҒАЛТЫУҘАРЫ

**Үткән аҙна Рәсәйҙең Украина менән сиктәш төбәктәре өсөн ауыр һынау булды. Улар дошман тарафынан көслө һөжүмгә дусар ителде. 6 августа украиндарҙың яҡшы ҡоралланған ҙур ғына диверсион-разведка төркөмө Рәсәй сиген боҙоп, Курск өлкәһенә бәреп инергә маташты.**

РФ Оборона министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, Рәсәй ғәскәренең Олешня һәм Николаево-Дарьино тораҡ пункттарындағы позицияларына һәм Суджа районына һөжүм итеү маҡсатында украиндар төркөмө 11 танк һәм 20-нән ашыу броняла хәрби машина ҡулланған. Атыштар һөҙөмтәһендә тыныс халыҡ араһында һәләк булыусылар бар. Өҫтәүенә, 9 августа Рыльсканан 8 км аралағы Октябрьское ауылында 14 "Урал" йөк машинаһы һәм пехота тейәгән КамАЗ колоннаһы Украина көстәре тарафынан "хаймарс" ракетаһы менән юҡ ителде. Әйткәндәй, Украина һалдаттары араһында айырыуса ҡанһыҙлыҡтары менән айырылып торған поляктар, шулай уҡ Канада, Франция һәм Грузиянан килеп ялланған хәрбиҙәрҙең булыуы ла асыҡлана.

Курскиҙан тыш, Украина төркөмө Белгород өлкәһен дә көслө утҡа тотто; Липецк, Воронеж һәм Волгоград өлкәләренә пилотһыҙ аппараттар ташланы. Рәсәй Генераль штабынан хәбәр итеүҙәренсә, 7 августа Рәсәй хәрби көстәренең "Төньяҡ" төркөмө подразделениелары, авиация һәм артиллерия уты менән дошмандың диверсион хәрәкәте туҡтатыла. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, дошманды баҫып ингән Рәсәй биләмәләренән тулыһынса таҙартыу буйынса хәрәкәттәр алып барыла. Бынан тыш, бәреп төшөрөлгән Украина ракетаһы һыныҡтары эләгеп, Курскиҙың торлаҡ районындағы ете йорт зарарланған, шул иҫәптән туғыҙ ҡатлы ҙур торлаҡ йорт ярым емерелгән, янғын сыҡҡан. Һөҙөмтәлә 15 кеше зыян күргән. Торлаҡһыҙ, бер ниһеҙ тороп ҡалған кешеләргә медицина ярҙамы күрһәтелә, документтары тергеҙелә, гуманитар ярҙам иҫәбенән улар палаткалар, йылы кейем һәм башҡа кәрәк-яраҡ, эсәр һыу, аҙыҡ-түлек менән тәьмин ителә. Рамзан Ҡадиров Курскиҙан эвакуацияланған кешеләрҙе Чечняла һыйындырырға вәғәҙә итте. Был хәлдәрҙән һуң Белоруссия Украина менән сик буйҙарын көсәйтергә ҡарар итте һәм унда танктар, бронетехика туплай башланы.

Украина хәрби эксперты Александр Мусиенко фекеренсә, Киев Курскиҙан башҡа йүнәлештәрҙә лә "сюрприз" әҙерләүе ихтимал, сөнки, "Известия" гәзите порталының Asia Times баҫмаһына һылтанмалары буйынса, НАТО Украина Ҡоралды көстәренең РФ территорияһында хәрби операциялар алып барыуы менән ҡыҙыҡһыныу белдерә һәм Киевтың барлыҡ стратегияһы һәм тактикаһы ошо ике "тандем" менән берлектә эшкәртелә, был күптән инде бер ниндәй ҙә сер түгел.

"Ә шулай ҙа Зеленский алдан уҡ ҡыйралыуға дусар ителәсәк был дыуамал аҙымы менән ни әйтергә теләне һуң?" тигән һорау ҡуя сәйәси күҙәтеүселәр. Британияның The Times гәзите яҙып сығыуынса, Зеленский үҙенең хәрби начальниктарын был аҙымға барырға оҙаҡ өгөтләй. The Times гәзите раҫлауынса, Вашингтон, йәнәһе, уға быңдай күрһәтмә бирмәгән. Дөрөҫөн әйткәндә, ошо дыуамаллығы менән Зеленский үҙенең сит ил бағыусылары алдында "бөтөнләй бөлгән" булыуын күрһәтергә теләмәй. Ә бына сәйәсмән, хәрби эксперт һәм милләт-ара конфликттар буйынса белгес Евгений Михайлов былай тип аңлатма бирә: "Украина Ҡоралды көстәренең ниәте был йәһәттән ҡыҫҡа ваҡытҡа Курск, Белгород йәки Брянск өлкәләренең берәй өлөшөн алып, Купянск, Торецк, Харьков йүнәлештәрендә хәрәкәт итеүсе Рәсәй ғәскәрҙәренең иғтибарын ошо төп йүнәлештәрҙән ситкә йәлеп итеү". Киевтың икенсе маҡсатын эксперт Рәсәйҙе Көнбайыш өсөн отошло шарттарҙа һөйләшергә мәжбүр итергә һәм тоҙаҡҡа ҡыуып индерергә маташыу, тип иҫәпләй. Өсөнсө маҡсат - Зеленский үҙенең көнбайыш бағыусылары алдында уларҙан килгән ҡорал һәм аҡса өсөн отчет бирергә теләй.

"Беҙҙең территорияға бәреп ингән Украина подразделениелары менән ай эсендә эште бөтөрөрбөҙ, тип уйлайым, хәҙер унда "Әхмәт" менән "Вагнер" эш итә", - ти хәрби эксперт Е.Михайлов. Ләкин һуңғы яңылыҡтарға ҡарағанда, Курскиҙа хәлдәр һаман да ҡатмарлы: дошман, беҙҙең артиллерия һәм авиация уты аҫтында ҙур юғалтыуҙарға ҡарамаҫтан, киң күләмдә ярҙамсы көстәрен йәлеп итеүҙе дауам итә. Рәсәй тарафынан тәүәккәл һәм ҡәтғи яуап ғәмәле талап ителә. Әйе, Рәсәйҙең был хәлгә ҡарата етди ҡарарға киләсәге бәхәсһеҙ, сөнки Курск янында хәрби көстәр һәм тыныс граждандарҙы ауыр юғалтыуҙар ғәфү итерлек түгел...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәйҙәге иң эре мәғариф системаларының береһе - Башҡортостанда. Беҙҙә 3,5 мендән ашыу белем биреү ойошмаһы иҫәпләнә, уларҙа 854,1 мең кеше уҡый һәм тәрбиәләнә, 119,9 мең педагогик хеҙмәткәр һәм административ персонал эшләй. "Мәғариф" милли проекты сиктәрендә Алдынғы һөнәри әҙерлек үҙәге, "Аврора" балаларҙың һәм йәштәрҙең һәләттәрен асыҡлау, үҫтереү һәм уларға ярҙам итеү төбәк үҙәге, ошо йүнәлеш буйынса уҡытыу тормошҡа ашырылған ике колледж эшләп килә.

✓Башҡортостанда "Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" акцияһы дауам итә. Республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин был аҙнала медиктар бригадалары Нуриман, Өфө, Ҡыйғы, Федоровка, Ҡариҙел, Мишкә, Миәкә, Күгәрсен һәм Йылайыр райондарына юлланыуы хаҡында һөйләне. Дөйөм алғанда, 15 апрелдән 9 августа тиклем акция барышында табиптарҙың мобиль бригадалары 250 тораҡ пунктта 134 849 тикшереү үткәргән. Белгестәр 3145 яман шеш, шәкәр диабеты һәм йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары асыҡлаған.

✓Тиҙҙән Дағстан мөфтиәте никабты тыйыу тураһында фәтүә сығара, тип хәбәр ителә республика Башлығы хакимиәтенең социаль селтәрҙәрендә. Был хаҡта республика етәксеһенең йәмәғәтселәр менән осрашыуында Дағстан мосолмандарының дини лидеры Әхмәт-Әфәнде Абдулаев белдерҙе. 23 июндә Махачкала һәм Дербент ҡалаларында сиркәүгә, синагогаға һәм полицияға һөжүм булды, шунан һуң никаб тураһында йәнә ҡыҙыу бәхәстәр башланды.

✓23 августа журналистарҙың йәйге осрашыуы - Журфест ойошторола. Фестиваль Павловка һыуһаҡлағысындағы "Йондоҙло" ял базаһында була, тип хәбәр итә сараның рәсми аккаунты. Бай йөкмәткеле белем биреү, мәҙәни һәм спорт программаһы - оҫталыҡ дәрестәре, матбуғат клубы эше, спорт ярыштары һәм башҡа саралар көтөлә. Проект - Башҡортостан Республикаһы Башлығы гранттары конкурсы еңеүсеһе.

✓Норматив хоҡуҡи акттар проекттарының федераль порталында Рәсәй хеҙмәт министрлығының 2025 йылдың 1 ғинуарынан минималь эш хаҡы күләмен айына 22 440 һумғаса еткереү тураһында закон проекты баҫылған. Әлеге ваҡытта Рәсәйҙә минималь эш хаҡы 19 242 һум тәшкил итә. Башҡортостанда иһә Урал коэффициенты менән бергә - 22 128 һум.

*ҠЫҪҠАСА*

# ЯМҒЫР ӘҘЕМТӘҺЕ

**Был аҙнала Башҡортостанда тупраҡтың артыҡ дымланыуы сәбәпле ғәҙәттән тыш хәл индереү планлаштырыла.** "Был аҙнала беҙ ғәҙәттән тыш хәл режимын индереү тураһында документтар бирәсәкбеҙ, - тип белдерҙе Башҡортостандың ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов. - Был ҡарар льготалы кредиттарҙы оҙайтыу, льготалы лизинг һәм страховка компаниялары менән эшләү өсөн кәрәк". Хәбәр ителеүенсә, районларҙа мал аҙығы әҙерләүҙә проблемалар кисергән шәхси хужалыҡтар һаны асыҡланасаҡ. Артабан компенсация сығанаҡтарын һәм күләмдәрен билдәләү өсөн исемлектәр төбәк финанс министрлығына ебәреләсәк. Бынан тыш, Ауыл хужалығы министрлығы сәсеүлектәре зыян күргән хужалыҡтар һаны тураһында мәғлүмәттәр йыя һәм зыян күргән баҫыуҙарҙың майҙанын билдәләй. Был фермерҙарға, әгәр улар субсидия алған булһа, программа маҡсаттарын үтәмәү арҡаһында штрафтарҙан ҡотолорға ярҙам итәсәк. Оператив кәңәшмәлә шулай уҡ урып-йыйыу эштәре барышын тикшерҙеләр. 12 августҡа аграрийҙар 350 мең тонна самаһы иген һәм ҡуҙаҡлы иген культураларын йыйып алған. Өс лидер иҫәбендә - Стәрлетамаҡ, Ауырғазы һәм Дәүләкән райондары. Хужалыҡтар шулай уҡ ужым культураларын йыйыу һәм мал аҙығы әҙерләү эштәрен дауам итә.

✓ **Рәсәйҙең Ауыл хужалығы министрлығы фермерҙарға ярҙам итеү буйынса барлыҡ программаларҙың 2030 йылға тиклем оҙайтылыуын раҫланы.** Йүнселдәргә артабан да федераль һәм төбәк бюджетынан ярҙам күрһәтеләсәк, аҡса мөмкин тиклем максималь кимәлдә файҙаланыласаҡ. Ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов билдәләүенсә, 2019-2023 йылдарҙа Башҡортостан хужалыҡтары дөйөм 3,312 миллиард һумлыҡ грант ярҙамы алған. 552 эш урыны булдырылған. Быйыл был маҡсатта 422 миллион һумдан ашыу аҡса бүленәсәк, 100 эш урыны булдырыу планлаштырыла. Бөгөн Башҡортостанда 8400-ҙән ашыу фермер хужалығы иҫәпләнә, улар йыл һайын тулайым ауыл хужалығы продукцияһының 15 процентын етештерә. Бөгөн фермерҙар республика сәсеүлек майҙандарының 35 процентына сәсә, шулай уҡ дөйөм һыйырҙар һанының 19 проценттан ашыуын, 35 процент йылҡы, 11 процент һарыҡ-кәзә тота.

✓ **Башҡортостан һайлауҙарға әҙер - Рәсәйҙең Үҙәк һайлау комиссияһы ағзаһы Евгений Шевченко берҙәм тауыш биреү көнөнә әҙерлекте тап шулай баһаланы.** 6, 7 һәм 8 сентябрҙә республикала бер үк ваҡытта Башҡортостан Башлығын һайлау, 54-се Өфө бер мандатлы округы буйынса Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутатын өҫтәмә һайлау һәм ҡала, район һәм ауыл советтары депутаттарын һайлау буйынса 216 кампания үтәсәк. Башҡортостан Башлығын һайлауҙарҙа 5 кандидат ҡатнаша. 4 кандидат 54-се Өфө бер мандатлы округы буйынса Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға өҫтәмә һайлауҙа депутат мандатына дәғүә итә. Ҡала, район һәм ауыл Советтары депутаттарын һайлауҙа 4 484 кандидат ҡатнаша, улар араһында 1 мең 775 мандат тултырылған - уртаса алғанда, бер мандатҡа өс кеше дәғүә итә. Һайлау кампанияһы осоронда 8-800-347-54-54 ҡыҙыу элемтә телефоны эшләй.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ИҒТИБАР - БАЛАЛАР ҺАУЛЫҒЫНА

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров уҙғарған оператив кәңәшмәлә республикала мәктәптәрҙәге медицина хеҙмәте үҫеше мәсьәләһен тикшерҙеләр.**



Төбәктең һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин хәбәр итеүенсә, Башҡортостанда 505 меңдән ашыу уҡыусы мәктәптәрҙә медицина ярҙамы ала. Был хеҙмәтте 213 табип-педиатр һәм 537 урта медицина персоналы хеҙмәткәрҙәре күрһәтә. Улар медицина тикшереүе, эпидемияға ҡаршы саралар - туберкулез диагностикаһы һәм вакцина профилактикаһы - үткәрә, шулай уҡ сәләмәт йәшәү рәүешен агитациялай. Мәғариф ойошмалары медицина хеҙмәткәрҙәре менән 93 процентҡа тәьмин ителгән. "Тикшереү һөҙөмтәләре буйынса мәктәп йәшендәге балаларҙа иң күбе нервылар системаһы ауырыуҙары асыҡланды, икенсе урында - аш һеңдереү ағзалары ауырыуҙары, артабан - күреү һәләте менән бәйле сирҙәр, - тип билдәләне Айрат Рәхмәтуллин. - Тикшерелгән балаларҙың 22,8 проценты сәләмәт уҡыусылар төркөмөнә индерелгән, икенсе төркөмдә - функциональ тайпылыштар күҙәтелгән 61,3 процент мәктәп уҡыусылары. Ә медицина тикшереүе үткәндәрҙең 11,9 процентында хроник ауырыуҙар асыҡланған".

Республиканың һаулыҡ һаҡлау министры, Башҡортостан мәктәп стоматологияһы хеҙмәте эшләгән Рәсәй төбәктәре араһында алдынғы урынды биләй, тип өҫтәне. Атап әйткәндә, төбәктең мәғариф ойошмаларында 239 стоматология кабинеты эшләй, шуларҙың 110-ы "Взлетай!" белем биреү проектының "Сәләмәт йылмайыу" модулен тормошҡа ашырыу сиктәрендә асылған. Бынан тыш, 2020 йылдың ноябренән республика муниципалитеттарында даими нигеҙҙә "Толпар" күсмә стоматология комплексы эшләй. Был ваҡыт эсендә балалар стоматологтары 78 ҡала һәм районда интернаттарҙан, приюттарҙан, балалар йорттарынан, реабилитация үҙәктәренән һәм коррекция мәктәптәренән 9 мең самаһы баланы дауалаған. Шуларҙың 2 209-ы - Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың балалары һәм сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән тәрбиәләнеүселәр.

# ИРЕКМӘНДӘРГӘ...

**Рәсәй ДОСААФ-ының Башҡортостан төбәк бүлеге "Рекрут" проекты тәҡдим итте, йәғни Рәсәй Ҡораллы Көстәренә контрактсы һалдаттарҙы йәлеп иткән ирекмәндәрҙе дәртләндереү буйынса башланғыс менән сығыш яһаны.**

Был ирекмәндәр үҙ иҫәбенә Башҡортостан буйлап йөрөй, агитация, аңлатыу эштәре алып бара. Бының өсөн ирекмәнгә һәр бер контрактсы өсөн 50 мең һум аҡса түләнә. Проектта дәүләт һәм муниципаль, хәрби һәм хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәренән башҡа, 18 йәше тулған һәр кем ҡатнаша ала. "Рекрут һәм ғариза биреүсе яҡындағы ДОСААФ бүлексәһенә килә, унда аңлатыу эштәре алып барыла, унан һуң буласаҡ һалдат йәшәгән урыны буйынса хәрби комиссариатҡа мөрәжәғәт итә. Ул медицина комиссияһы үтеп, артабан контракт төҙөү өсөн республика һайлап алыу пунктына юллана", - тип асыҡлыҡ индерҙеләр "Башинформ" агентлығына ДОСААФ-та. Һалдат хәрби часҡа килеү менән ирекмәнгә 50 мең һум түләнәсәк.

Билдәле булыуынса, Рәсәй Президенты 1 августан 31 декабргә тиклем килешеү төҙөгән хәрбиҙәргә 400 мең һум күләмендә бер тапҡыр түләү тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы. Быға тиклем Башҡортостанда республика етәксеһе Радий Хәбировтың башланғысы менән контракт буйынса хеҙмәт итеүселәргә бер тапҡыр бирелә торған түләүҙәр күләме арттырылды. Шулай итеп, федераль түләүҙәрҙе иҫәпкә алып, Башҡортостан хәрбиҙәре бер юлы 1 миллион 205 мең һум аҡса аласаҡ. "Рекрут" проектына ҡағылышлы бөтә һорауҙар буйынса Башҡортостандың Ситуация үҙәгенә 8 (347) 218-19-19 телефоны буйынса мөрәжәғәт итә алаһығыҙ.

# АУЫЛ МЕДИЦИНАҺЫНА...

**Иглин районының Түбәнге Ләмәҙ ауылында модулле фельдшер-акушерлыҡ пункты асылды, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан. Был ауыл Иглин үҙәк район дауаханаһынан 65 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан. Ул Түбәнге Ләмәҙҙән тыш, Манатау ауылы халҡын да хеҙмәтләндерәсәк. Дөйөм алғанда, биләмәлә 460-тан ашыу кеше иҫәпләнә, шуларҙың 100-ҙән ашыуы - балалар.**

2020 йылда төбәк етәксеһе Радий Хәбиров ауыл медицинаһының оҙаҡ йылдар иғтибарһыҙ булыуын билдәләне, тип белдерәләр Һаулыҡ һаҡлау министрлығында. Ул ваҡытта республиканың беренсел медицина ярҙамы үҙәктәренең 60 проценты ремонт талап итә ине. Радий Хәбиров бөтә иҫкергән һәм файҙаланыуға яраҡһыҙ ФАП-тарҙы алмаштырыу бурысын ҡуйҙы. Һуңғы дүрт йылда уның башланғысы менән 300-ҙән ашыу модулле ҡоролма төҙөлдө. Улар араһында фельдшер-акушерлыҡ пункттары, медицина амбулаториялары, дөйөм практика табиптары кабинеттары бар. Йыл аҙағына тиклем Башҡортостанда тағы ла 38 ФАП, 10 медицина амбулаторияһы, өс дөйөм практика табиптары кабинеты һәм бер дауахана асыла.

- Дүрт йыл элек беҙ ауыл ерендә беренсел медицина ярҙамы күрһәтеүгә иғтибарҙы йүнәлтә башланыҡ. Ул саҡта күп кенә ФАП-тарға ҡорамалдар етмәй ине, интернет та юҡ ине. Быларҙың барыһы менән дә яйлап шөғөлләнә башланыҡ. Хәҙер республикала йыл һайын яңы ФАП-тар асыла, эшләп килгәндәре яңыртыла. Шул уҡ ваҡытта кадрҙар йәлеп итеү буйынса мәсьәлә лә хәл ителә, - тине Радий Хәбиров.

Дөйөм алғанда, быйыл Башҡортостанда "Һаулыҡ һаҡлау" милли проектын тормошҡа ашырыу сиктәрендә ете һаулыҡ һаҡлау объектын төҙөү, туғыҙ объектты капиталь ремонтлау, 130-ҙан ашыу йыһазландырылған модулле конструкция һатып алыу һәм ҡороу, дүрт меңдән ашыу берәмек ҡорамал һәм 206 берәмек транспорт һатып алыу күҙаллана.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Курск өлкәһе балалары Башҡортостанға ял итергә килде. Төбәк Мәғариф министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, 12 августа Дүртөйлө районындағы шифаханаға һәм балалар һауыҡтырыу лагерына 34 бала һәм уларҙы оҙатыусы 8 өлкән кеше урынлаштырылған. Ҡунаҡтарҙы Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы хеҙмәткәрҙәре, медицина хеҙмәткәрҙәре, уҡытыусылар ҡаршы алды.

✓Башҡортостанда үткән аҙна башында коронавирус йоҡтороуҙың 15 осрағы асыҡланған. Һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин белдереүенсә, 99 пациент стационарҙа, 674 пациент - амбулатор дауаланыуҙа. Йоғошло ауырыуҙар госпиталдәрендә ковидты дауалау өсөн 140 койка урынлаштырылған, буш койкалар фонды 45 процент тәшкил итә. Ковид таралыу кимәле бөгөн 1,03.

✓Башҡортостан велоуҙышсыһы Айгөл Гәрәева велоспорт буйынса Рәсәй чемпионатының ҡатын-ҡыҙҙар араһындағы күп көнлөк уҙышында бронза миҙалға лайыҡ булды. Уҙыш бер көн элек Муром ҡалаһында тамамланды. Республиканың велоспорт буйынса олимпия резервы спорт мәктәбе тәрбиәләнеүсеһе Айгөл Ғәрәева 25 саҡрым дистанцияла шәхси беренселектә - икенсе, 25 саҡрымлыҡ критериумда өсөнсө урын яуланы.

✓Башҡортостанда геморрагик биҙгәк менән сирләү осраҡтарының артыуы теркәлә. Әле Өфөнөң инфекция дауаханаһында ошо диагноз ҡуйылған 10 кеше ята. Табиптар ауырыуҙың тәүге билдәләре менән медицина учреждениеһына мөрәжәғәт итергә кәрәклеген иҫкә төшөрҙө. Ғәҙәттә улар инфекция йоҡторғандың 4-6-сы көндәрендә һиҙелә башлай. Был тән температураһының 39 градусҡа тиклем күтәрелеүе, ҡалтыраныу һәм баш ауыртыуы. Дауаланмағандарҙың 80 проценты үлемгә дусар була.

✓Иң яҡшы баҡсасылыҡ ширҡәттәре 500-әр мең һум күләмендә Башҡортостан Башлығы гранты аласаҡ. Тейешле указға 7 августа төбәк Башлығы Радий Хәбиров ҡул ҡуйҙы. "Коммерцияға ҡарамаған Баҡсасылыҡ ширҡәттәре өсөн йәмәғәт инфраструктура проекттарын тормошҡа ашырыуға 500-әр мең һумлыҡ 10 грант, 2025 йылдың 1 ғинуарынан - 20 грант булдырырға", - тиелә указда, ул үҙ көсөнә инде.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# ЯРҘАМ ИТӘЙЕК!

**Өфөлә Курск өлкәһендә украин хәрбиҙәренең һөжүме һөҙөмтәһендә зыян күргән граждандарға гуманитар ярҙам йыйыу дауам итә. Был башланғыс менән Башҡортостандың Йәштәр сәйәсәте буйынса дәүләт комитеты сығыш яһағайны.**



Ведомство рәйесе Вито Сабиров БСТ телеканалына хәбәр итеүенсә, йыйылған әйберҙәрҙе берҙәм гуманитар ылауға туплап, яҡын арала Курск өлкәһенә оҙатыу планлаштырыла. Кешеләр үҙҙәре менән мәктәп кәрәк-яраҡтары һәм рюкзактар, йылы кейем һәм аяҡ кейеме, түшәк һәм балаҫтар, һаҡлау ваҡыты ярты йылдан да кәм булмаған аҙыҡ-түлек, гигиена тупланмалары, сабыйҙар һәм өлкәндәр өсөн памперстар, бер тапҡыр ҡулланыла торған памперстар һәм балалар аҙығы алып барып тапшырырға мөмкин. Гуманитар ярҙамды көн һайын 10:00 сәғәттән 20:00 сәғәткә тиклем Өфөнөң Республика ирекмәндәр үҙәгендәге #БеҙБергә проектының төбәк штабына (Пушкин урамы, 86) алып барырға мөмкин. Төбәк штабының телефон номеры: +7 927 311-23-55.

# ОҪТАЛАР ЯРҘАМЫ

**Өфөлә йәшәүсе Владимир Әминов Махсус хәрби операция яугирҙары өсөн радиоэлектрон көрәш саралары (РЭБ) һәм тактик медицина изделиелары етештереү, шулай уҡ бронежилеттарҙы йүнәтеү менән шөғөлләнә.**

Хәбәр итеүҙәренсә, Владимир Әминов 2014 йылдан алып Донбасҡа әүҙем ярҙам итә. Тәүҙә Өфө уҙаманы Донецк һәм Луганск халыҡ республикалары һалдаттарына ярҙам итә, улар уға "Монах" тигән позывной бирә. 2022 йылдан ул МХО һалдаттарына ярҙам итә. Фронт һыҙығындағы дуҫтары Әминовтан радиоэлектрон көрәш саралары эшләүҙе һорай. Бала сағында радиоэлемтә менән ҡыҙыҡһынған уҙаман барыһын да өйрәнергә тотона. Үҙе ҡоралдар уйлап таба башлай. "Юғары сифатлы моделдәр артабан бәләкәй сериялар менән етештерелергә мөмкин. Бәләкәй, сөнки хәҙерге электрон һуғыш ҡоралдары технологиялары тиҙ үҙгәрә, улар етеҙ эшләүҙе талап итә", - ти ул. Владимир шулай уҡ бронежилеттарҙы яҡшырта, уларҙы унайлыраҡ, нығыраҡ итеп эшләй. "Монах" алғы һыҙыҡтағы һалдаттың үҙ тупланмаһы булырға тейеш, уның менән бронежилетты ҡайтанан үҙгәртеп эшләп булһын, тип иҫәпләй.

# ИХАТАЛАР НУРЛАНА

**Өфөлә төҙөкләндерелгән ихаталар йылдан-йыл арта. Баш ҡаланың Дим биҫтәһендә 4 күп фатирлы йортто берләштергән ихата комплексלы төҙөкләндереүҙән һуң асылды.**

"Башҡорт ихаталары" республика программаһын тормошҡа ашырыу сиктәрендә Ухтомский, 16 һәм Мусоргский урамдарындағы, 23, 25, 25/1 йорттарҙың ихата майҙаны төҙөкләндерелде. Бында юлдарҙың һәм тротуарҙарҙың асфальт япмаһы, фасадтар һәм подъездарға инеү урындары яңыртылды, парковка урындары киңәйтелде, балалар һәм спорт майҙансыҡтары төҙөлдө, йәшел майҙандар барлыҡҡа килде. Эш халыҡ менән тығыҙ бәйләнештә, уларҙың теләктәрен иҫәпкә алып башҡарылды. Ҡала халҡы башҡарылған ремонттан ҡәнәғәт, республика, ҡала һәм район етәкселегенә рәхмәтле. "Республика программаһы ярҙамында йыл һайын Өфөлә тиҫтәләгән ихата төҙөкләндерелә. Ул үҙенең актуаллеген һәм файҙалы булыуын күптән иҫбатланы. Шуныһы ҡыуаныслы, "Башҡорт ихаталары" ҡала халҡының туранан-тура ҡатнашлығында һәм уларҙың контроле аҫтында тормошҡа ашырыла. Ә беҙ, муниципаль депутаттар, был йәһәттән уларға ярҙам итәбеҙ", - тип белдерҙе 1-се һайлау округы буйынса депутат, Өфө ҡала Советы рәйесе Марат Вәсимов.

# ТАҒЫ БЕР ТАУҘЫ ...

**Омск ҡалаһында казарма емерелеү һөҙөмтәһендә аяҡтарын юғалтҡан Өфө блогеры Рөстәм Нәбиев тағы ла бер тауҙы яуларға йыйына.**

Социаль селтәрҙә ул Араратҡа күтәрелеүе тураһында һөйләнө. Рөстәм 3200 метр бейеклектә урынлашҡан тәүге лагерға килеп еткән дә инде. Ул был ҡатмарлы бейеклек икәнен күрһәтте. Ә бөгөн уларҙың төркөмө 4200 метр бейеклектә урынлашҡан икенсе лагерға барып етергә тейеш. "Бынан 10 сәҡрым йәйәү барырға тура киләсәк. Тау түгә лагерҙан күренмәй, ҡулдарымда бөтәһе 20 сәҡрым үтәсәкмен. Мин үҙемде яҡшы тоям, һауа торошо һәйбәт. Был еңелдән булмаясаҡ", - ти ул.

Рөстәм Нәбиев Омск ҡалаһында Һауа-десант көстәренең уҡыу үҙәге казармаһы емерелгәс, аяҡһыҙ ҡала. Был уға тулы ҡанлы тормош алып барырға, спорт менән шөғөлләнергә, хатта тауҙарҙы яуларға ҡамасауламай. 2020 йылда ул үҙ ҡулдары менән Эльбрус түбәһенә күтәрелде. Ә 2021 йылда Непалдағы һигеҙ мең метр бейеклектәге Манаслу тауын яуланы. Шулай уҡ Нәбиев Килиманджаро (5895 метр) һәм Аконкагуа (6962 метр) түбәләренә менде.

**Ләйсән ЗАКИРОВА.**

ҠЫҪҠАСА

# ЭШ УРЫНЫ БАР

**Республиканың Халыҡ мәшғүллеге үҙәгенән хәбәр итеүҙәренсә, граждандар өсөн 24017 буш вакансия бар.** Иң яҡшы эш биреүселәр иҫәбендә "УМПО" асыҡ акционерҙар йәмғиәте (3074 вакансия), Өфөнөң Транспорт инфраструктураһы идаралығы (411), "Өфө агрегат производство берекмәһе" акционерҙар йәмғиәте (227) инде. Шулай уҡ иң юғары түләү тәҡдим ителгән вакансиялар рейтингы төҙөлгән. "Геофизика" фәнни-етештереү фирмаһы идара итеү системаһы булған станоктарҙы көйләүселәргә 200 мең һумға тиклем түләргә әҙер. Үҙәк дауаханалар һәм медицина үҙәктәре анестезиолог-реаниматологҡа - 68 мең һумдан алып 180 мең һумға тиклем, "Башкиравтодор" асыҡ акционерҙар йәмғиәте филиалы ер ҡаҙыу ҡоралы машинисына 50-нән 120 мең һумға тиклем вәғәҙәләй. Башҡортостан ҡала яңы пассажирҙар компанияһының IT-бүлек етәксеһенә 72 мең һумдан 115 мең һумға тиклем түләнә. "УЗПК" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтендә полимер деталдәр һәм изделиелар йәбештереүсеһенә - 30 мең һумдан алып 100 мең һумға тиклем, "Транснефть-Урал" акционерҙар йәмғиәте 60 меңдән 100 мең һумға тиклем вәғәҙә итәлә. Өфө мәшғүллек үҙәгенең ҡыҙыу элемтә телефоны: +7(347)251-51-55.

✓ **Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары мәктәптәрҙә тәмәке тартыуға ҡаршы көрәшкә йүнәлтелгән федераль закон проектын йөмғаҡлау өсөн Федераль Хөкүмәткә ебәрҙе.** БР Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев әйтеүенсә, мәктәп мөхитендә тәмәке тартыу мәсьәләһе көнүҙәк булып ҡала, Рәсәй балаларының һәм үҫмерҙәренең 35 проценты даими рәүештә тәмәке тарта. Психологтар тикшеренеүҙәренә ярашлы, тәмәке тартыусыларҙың яҡынса 56 проценты тәүге тәмәке тартыу тәжрибәһен тап мәктәптә ала. Башҡортостан парламентарийҙары РФ Административ хоҡуҡ боҙоуҙар Кодексын тулыландырырға: мәктәп һәм балалар баҡсаларының биләмәләрен һәм биналарын тәмәке тартыу тыйылған урындар итеп күрһәтергә, шулай уҡ 2000-3000 һум күләмендә административ штраф тәғәйенләргә тәҡдим итә (хәҙер балалар майҙансыҡтарында ғына тәмәке тартыу тыйыла).

✓ **Рәсәй Президенты Владимир Путин Әсәлек капиталы иҫәбен шәхси торлаҡ төҙөлөшөнә эскроу иҫәптәре механизмы аша йүнәлтергә мөмкин тигән законға ҡул ҡуйҙы.** Документҡа ярашлы, Әсәлек капиталы средстволарын эскроу иҫәбен файҙаланып төҙөлөш подряды килешеүе буйынса торлаҡ йорт төҙөүгә йүнәлтергә мөмкин. Әсәлек капиталы аҡсаһы (йәки аҡсаның бер өлөшө) йорт төҙөү менән шөғөлләнгән юридик шәхес йәки шәхси эшҡыуар бенефициары булған эскроу иҫәбенә йүнәлтелергә мөмкин. Закон шулай уҡ эскроу иҫәбе килешеүе туҡтатылған осраҡта Әсәлек капиталы аҡсаһын кире ҡайтарыу механизмын күҙ уңында тота. ТАСС агентлығына Дәүләт Думаһының Төҙөлөш һәм Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ буйынса комитет ағзаһы Сергей Колунов аңлатыуынса, был положениелар ғаиләләрҙе өҫтәмә яҡлау сиктәрендә индерелгән. Эскроу менән торлаҡ-коммуналь хужалыҡта Әсәлек капиталын файҙаланған ғаиләләр өсөн уны кире ҡайтарыу рәүешендә өҫтәмә гарантиялар ҡаралған. Яңы закон 2025 йылдың 1 мартынан көсөнә инә. Башинформ хәбәр иткәнсә, 2024 йыл башынан Башҡортостанда 430 ғаилә әсәлек капиталы аҡсаһын йорт төҙөүгә йүнәлткән.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Әнис

Әнис (анис обыкновенный) бер йыллыҡ үлән. Ваҡ ҡына аҡ сатыр сәскә ата, августа орлоҡлана. Медицинала үҙендә 1,2-3 процент эфир һәм 10-20 процент ҡуйы май булған орлоҡтарын ҡулланалар. Орлоғон сәскә сатырҙары һорғайған осорҙа йыйып әҙерләйҙәр. Ул ашҡаҙан-эсәк юлын яҡшырта, эсте йомшарта, ҡаҡырыҡты сығара. Мейегә ҡан йөрөүен яҡшырта, күңелде күтәрә. Шулай уҡ тир, һарымһаҡ, шарап еҫен баҫа. Халыҡ дауаһында әнисте бала имеҙгән ҡатындарға һөт төшһөн өсөн дә ҡулланалар.

❖ Ангинанан 1 ҡалаҡ әнис орлоғон ыуалап, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм 20 минут йылыла төнәтеп һөҙөргә. Төнәтмәне көнөнә 3-6 тапҡыр 1-2 ҡалаҡ эсергә, йәки йыш-йыш тамаҡты сайҡап торорға.

❖ Йөткөһөҙлөктән 1 балғалаҡ тартылған әнис орлоғона 1 стакан эҫе һөт ҡойорға, төнәтергә һәм һөҙөп, 1 балғалаҡ бал ҡушырға. Йылы көйө эсергә. Балаларға ярты стакан эсереү ҙә етә.

❖ Бронхиттан 100 грамм тартылған етен орлоғо, 20 грамм әнис орлоғо онтағы, 20 грамм имбир тамыры онтағы, 0,5 кг һарымһаҡ-бал ҡатышмаһын берге ҡушырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1-әр балғалаҡ ашарға.

Шулай уҡ 4 балғалаҡ әнис орлоғона 1 стакан һыу ҡойоп, 6-7 минут ҡайнатып һөҙөргә һәм һәр 2 сәғәт һайын 2 ҡалаҡ эсергә була. Әгәр ҡаты ауырымаһағыҙ, йылы төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр 2-шәр ҡалаҡ эсергә лә ярай.

❖ Үпкә елһенгәндә әнис орлоғо, ҡурай еләге, тал ҡайырыһы, йүкә сәскәһе, үгәй инә үләне япрағын бер тигеҙ өлөштә алырға. Әҙерләмәнең 1 ҡалағына 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 5-10 минут ҡайнатырға һәм марля аша һөҙөргә. Сәй кеүек эҫе көйөнә эсергә.

❖ Гастриттан 5 грамм әнискә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, термоса 2 сәғәт төнәтергә. Төнәтмәне көнөнә 3-4 тапҡыр 1/4 стакан эсергә.

❖ Баш әйләнгәндә шәкәр киҫәгенә 3 тамсы эфирлы әнис майын тамыҙырға. Әгәр баш мигрень сәбәпле әйләнһә, көнөнә 2-3 тапҡыр ашарға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ағуна**
**(Белая куропатка)**



Ҡышын ап-аҡ төҫтә булған уртаса ҙурлыҡтағы ҡош. Йәй ағуна һоро, көрән, һары төҫтәр өҫтөнлөк иткән сыбар ҡошҡа әйләнә. Ата ағунаның был миҙгелдә башы, муйыны һәм түшенең өҫкө өлөшө һоро була.

Ер өҫтөнән шәп итеп атлап йөрөй. Ҡыҫҡа аяҡлы. Осҡанда ҡанатын шәп-шәп итеп ҡаҡып ала ла, уларҙы аҫҡа ҡарай бөгөлгән көйө хәрәкәтһеҙ тотоп, көйәлеп бара. Ниммәндер ҡурҡҡан ата ағуна башта "гаф" тигән һаҡау тауыш сығара ла, уны "ав-ав-ав" тип дауам итә. Инә ҡош тауышланмай тиерлек.

Ҡоштоң йәшәү ареалы - Урал һәм Уй йылғалары сыҡҡан ерҙән башланып, Таналыҡ йылғаһы үҙәндәренә, Урал тауҙары һыртынан Һаҡмар буйлап Ҡырҡтытауҙың көньяҡ өлөшөнә тиклем.

Башҡортостандың Ҡыҙыл китабына ингән, юғалыу хәүефе янаған төр.

Көндәҙ әүҙем, айырыуса иртәнге һәм киске сәғәттәрҙә күберәк хәрәкәтләнә. Ҡышын төндә ҡар аҫтында үткәрә, ҡоштар күмәкләп, йә булмаһа, парлап йәшәй, яңғыҙаҡ ағуна тәбиғәттә һирәк осрай торған күренеш. Ҡыуаҡтан ҡыуаҡҡа йүгереп, аҫҡы ботаҡтарҙың йәшел өлөшөн, бөрөләрҙе ашай. Көндөҙ ҡарҙың өҫтөнә генә күмелеп ял итә, һыуыҡ һәм буранлы көндәрҙә төпкәрәк йәшенә. Төнгөләккә ҡары ҡатмаған урындарға күсә. Ныҡ һыуыҡтар мәлендә ағуна шул урындарынан икешәр тәүлек сыҡмайынса ята ала.

Ҡышын ҡайын, тал, һирәгерәк ерек бөрөһө менән туҡлана, ҡар ирей башлағас уларға япраҡтар, туңған емеш өҫтәлә, һуңғараҡ ағастарҙың "алҡа"ларына күсә. Артабан инде йәшел үлән сыға башлай. Ҡоштарҙың йәйге рационы үлән, еләк-емеш, мүк, бөжәктән тора. Барлыҡ ризыҡтың 2 процентын ғына бөжәктәр алып тора.

Ҡар ирегән мәлдә ата ҡоштар таң менән һәм кисен гөрөлдәй, үҙенсәлекле хәрәкәттәр яһап оса, төрлә тауыштар сығара. Ояларын ҡыуаҡтар аҫтына ергә ҡоралар. Инә ағуна 8-12 йомортҡа һала, 21-22 көн баҫа. 10 көнлөк бәпкә ҡанатын йәйеп осорға тырыша башлай, 2 аҙналыҡ ҡоштар иһә 50-80 см-ға оса ала.

Йыртҡыс йәнлектәр, хужаһыҙ эттәр, бесәйҙәр бәпкәләр өсөн ҙур хәүеф тыуҙыра. Ағуналар оя ҡорған ерҙә көтөү көтөү ҙә уларҙың һаны кәмеүгә килтерә.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

КӨН ТЕМАҺЫ

# МӘҒАРИФ: БӨГӨН ҺӘМ ИРТӘГӘ



**(Башы 1-се биттә).**

Совет осоронда тыуып үҫкән кешеләр үткән быуаттың 90-сы йылдарында кисерелгән ауыҙыҙ сәйәси буталыш, һәр төрлө нигеҙһеҙ реформалар арҡаһында донъяла тиңе булмаған мәғариф системаһының таркала-емерелә яҙыуына шаһит булды. Бынан ни барыһы 25-30 йылдар элек мәктәптәребеҙ, образлы итеп әйткәндә, "коро паекта" ултырып ҡалғайны. Ауылдарҙа ла, хатта баш ҡалабыҙҙа ла тамам туҙған, иҫкергән мәктәп биналары күп булды, уларҙың ҡайһылары хатта 3 сменала уҡыта ине. Ошондай шарттарҙа уҡытыу-тәрбиә системаһын үҙ эшенә мөккибән бирелгән уҡытыусылар һаҡлап ҡалды. Бер генә миҫал килтерәм. 1994 - 1999 йылдарҙа баш ҡалабыҙҙың яңы ғына асылған 136-сы башҡорт лицейында директорҙың фән һәм методик эш буйынса урынбаҫары һәм мәктәп психологы булып эшләп алдым. Матди яҡтан ҡытлыҡ кисерһәк тә, яңыса, заманса эшләү теләге көслө булды коллективта. Мәктәп директоры Шәмсулла Хәбибрахманов, уның урынбаҫарҙарынан Сынтимер Баязитов, Азамат Абдрафиҡовтар ҡәҙимге уҡытыу-тәрбиә процесына дидактик новациялар индереүҙе алғы планға ҡуйҙы. Башҡорт лицейы күп профилле белем биреү үҙәгенә әйләнде: һәр уҡыусы, һәләттәренә һәм теләгенә ярашлы, тәбиғи (математика йүнәлеше), гуманитар фәндәр (филология һ.б.), музыка, һынлы сәнғәт буйынса тәрәнәйтеп уҡытыла торған дисциплиналарҙы һайлай алды. Шуны ла иҫкә алып була: уҡыусылар 1 кластан башлап мотлаҡ рәүештә хореография дәрестәренә йөрөнө, мәктәбебеҙҙә бейей белмәгән бала булмағандыр ул саҡта. Инглиз телен ныҡлап өйрәтеү маҡсатында махсус кластар асылып, уҡыусылар бер юлы ике методика - Кембридж университетында сығарылған һәм ул саҡтағы Рәсәй дидактик технологиялары ярҙамында уҡытылды. Шул ваҡытта АҠШ-тың Юта университеты профессоры Маккей лицейыбыҙға практика үткәрер өсөн үҙенең студенттарын алып килде. Ул шәхсән башланғыс кластарҙа уҙғарылған тел дәрестәренә инеп, хайран ҡалды: "Мин ышана алмайым, һеҙҙең уҡыусыларығыҙ нисек итеп бер юлы өс телдә - башҡорт, рус һәм инглиз телдәрен үҙләштерә ала ул?" - тип, аптырабыраҡ һорағаны иҫтә ҡалған. Ошо лицей быйыл үҙенең 30 йыллыҡ педагогик эшмәкәрлеген билдәләй, һәм ул үҙе уҡытып-тәрбиәләп сығарған уҡыусылары менән хаҡлы рәүештә ғорурлана.

Әммә шуныһы ҡыҙғаныс, йылдар үтә бара мәғариф системаһында бер төрлөлөк, бер ҡалыпҡа һалып уҡытыу принцибы өҫкә сыҡты, новациялар онотолдо, педагог-новаторҙар эшмәкәрлеге лә һүнә барҙы. Шуға күрәлер инде, хәҙерге мәғариф системаһы В.А. Сухомлинский, В.Ф. Шаталов, С.Н. Лысенкова, И.П. Волков, Ш.А. Амонашвили, М.П. Щетинин, Борис һәм Лена Никитиндар, Геннадий Хазанкин, Л.К. Агадуллина кеүек алдынғы ҡарашлы педагогтарҙы тыуҙырмай (Аллаһҡа шөкөр, әлдә әле БДМУ-ның дөйөм химия кафедраһы доценты, 4 тапҡыр химия фәне буйынса бөтөн донъя олимпиадаларында еңеү яулаған Вадим Харисовтың ғилми етәксеһе Айнур Ғүмәров Рәсәйҙең халыҡ уҡытыусыһы Лиза Ҡыям ҡыҙының эшен дауам итә).

Йәнә хәҙерге мәғариф системаһының ахырынаса хәл ителмәй килгән тағы бер проблемаһы бар: ул мәктәптәрҙең педагогик кадрҙар менән тейешле кимәлдә тәьмин ителмәүе. Хатта баш ҡалабыҙҙа, уҡыу йылы уртаһында ошондай иғландарға тап булаһың: фәләнсә һанлы мәктәп физика, математика, биология, химия һ.б. предмет уҡытыусыларын эшкә саҡыра... Районда ла шул уҡ хәл йыш ҡүҙәтелә. Әлбиттә, уҡыу планында ҡаралған предметтар уҡытылмай ҡалмайҙыр. Нисек итеп? Бер генә юл: мәҫәлән, мәктәп математиғы бер юлы ике нагрузкаға торорлоҡ (ә был аҙнаһына 36 сәғәт!) эш башҡара. Уҡытыусы ла кеше бит, уның да мейе эшмәкәрлегенә, энергетик потенциалына, дәртенә һәм ҡайефенә ошондай ауыр эш кире йоғонто яһамай ҡалмай. Һөҙөмтәлә, уҡытыусы бары тик "дәрес биреүсе"гә әйләнә, былдай шарттарҙа уҡытыу сифаты бермә-бер түбәнәйә. Бынан тыш, ауыл мәктәптәрендә йыш ҡына бер үк уҡытыусының бер юлы бер нисә предметты уҡытыуына шаһит булаһың: уҡытыусы совет заманындағы "многостаночница" ролен үтәй былдай осраҡта. Шул уҡ ваҡытта республика педагогия уҡыу йорттары йыл һайын йөҙәрләгән белгестәр әҙерләй. Уларҙың байтағы мәктәпкә эшкә барыуҙан баш тарта. Был проблемаға күҙ йомоп ҡарап булмай. Йәнә, йыш ҡына мәктәптәребеҙҙә ир-ат уҡытыусыларыбыҙ үтә аҙ булыуына зарланабыҙ. Сәбәбе - йәш уҡытыусының эш хаҡы әлегә тиклем үтә түбән ҡала бирә, ә беҙ, кем әйтмешләй, дауахханалағы ауырыуҙарҙың "уртаса температураһын" үлсәгән кеүек, педагогтарҙың уртаса эш хаҡы юғары ул, тип маҡтанырға ла онотмайбыҙ.

Уҙған быуаттың 90-сы йылдарын иҫкә алыр өсөн бер сәбәп бар. Ул дәреслектәр, уҡыу әсбаптарына ҡағыла. Ул дыуамал замандың педагогтар өсөн бик файҙалы бер күренеше булды: дәреслектәр шул тиклем күп сығарыла башланы, йәнең (зиһенең) теләгәнен һайлап ал. Шул саҡта Башҡорт дәүләт педагогия институтының бер төркөм ғалимдары баш ҡалабыҙҙың 20-се Башҡорт гимназияһы уҡытыусылары менән берлектә "Ватан" исемле методик корпорация булдырғайны. Ошо ойошманың төп бурысы - яңы, заманса технологияларға нигеҙләнгән дәреслектәр әҙерләү һәм уларҙы педагогик практикала һынап ҡарау. Һөҙөмтәле булды был эш: инглиз теле, физика һәм география буйынса яңы дәреслектәр баҫылып сыҡты, улар Рәсәй кимәлендә танылыу тапты. Ҡыҙғаныс, әлеге мәғариф системаһында ошондай новаторлыҡ ғәмәлиәтенә урын ҡалманы.

Психолог булараҡ, шәхесте бала сағынан уҡ күп теллелек мөхитендә тәрбиәләүҙең үтә мөһим булып, бының шәхес үҫешенә ыңғай йоғонто яһауына инанғанмын. Был хатта совет академигы Павлов тәғлимәтенә лә бермә-бер тура килә: тел үҫеше барышында бала үҙләштергән һәр яңы һүҙ уның мейе эшмәкәрлеге аша физиологик һәм психологик нервы-нейрон системаларында нығынып ҡалып, уның зиһене, интеллекты өсөн үҙенә күрә "эске двигатель" ролен үтәй. Республикабыҙ күп милләтле, һәм күп теллелек өсөн ерлек бар. Әммә... Әлеге лә баяғы, бер теллелөр өҫкә сыҡҡан осорҙа йәшәйбеҙ. Нисек үкенмәйһең инде: башҡорт теле дәүләт теле булған хәлдә лә йүнләп өйрәнелмәй хәҙер. Аҙнаһына бер сәғәт уҡытылған предметҡа мәктәп етәкселәре лә, педагогик коллектив та илтифатһыҙ ҡала: ул бар ни, юҡ ни... Ни әйтәһең, совет заманын хәтерләмәй булмай. Беренсе кластан башлап, урта мәктәпте тамамлағансы барса предметтарҙы - математика, физика, ботаника, анатомия, тарих, география һ.б. предметтар тулыһынса башҡорт телендә уҡытылды, һәр дисциплина буйынса башҡорт теленә тәржемә ителгән дәреслектәр булды. Башҡорт телендә уҡытыуҙың ни зыяны булды уҡыусыларға? Был һорауға бер генә яуап бар: башҡорт балаһы башҡортса фекерләргә өйрәнә алды. Кем һанаған инде: тулыһынса башҡортса уҡып сығып, химия, физика, биология, математика һәм башҡа фән өлкәләрендә артабан русса белем алып, һөнәр алған, ҙурҙарҙан-ҙур уңыштарға өлгәшкән милләттәштәребеҙ күпме булған икән? Бер яуап: улар бихисап.

Әүәл педагогика фәнендә уҡытыу-тәрбиә эшенең шәхси йүнәлешле булыуы (индивидуалләштереү) һәм балаларҙың тәбиғи булмыш-һәләтенә ярашлы башҡарылыуы (дифференциациялы уҡытыу) хаҡында күп яҙылды, бихисап ғилми баҫмалар донъя күрҙе. Хәҙер нисек һуң? Крыловса әйтһәк, педагогик йөгөбеҙ әлегәсә урынынан әллә ни ҡуҙғала алмай ултыра. Әлеге лә баяғы, мәғариф системаһында унификацияның сәскә атыуы был төшөнсәләрҙе юҡҡа сығара. Ошо хаҡта уйланғанда, Ҡытайҙың һуңғы тарихында булып уҙған хәлдәр иҫкә төшә. Мао Цзе Дун етәкләгән "мәҙәни революция"-ның кире эҙемтәләренән нисек тә булһа тиҙерәк ҡотолоу өсөн ошо илдең яңы юлбашсыһы Дэн Сяо Пин яңы эскә сәйәсәт хаҡына барыһына аңлайышлы лозунг иғлан итә: "Әйҙә, илебеҙҙә 100 төрлө гөл күкрәп сәскә атһын!" Ысынлап та, тора-бара Ҡытай Халыҡ Республикаһы сәскә атҡан илгә әүерелде - был ошо ил иҡтисадында күп төрлөлөк идеяһының тантана итеүенә бәрәбәр. Шуға күрә, беҙгә, Рәсәй педагогтарына, мәғариф системаһының үтә тарайған, ҡыҫырыҡланған даирәһенән нисек итеп булһа ла яңылыҡ, зиһенинтеллект һәм ижад көүһә хөкөм һөргән киңлеккә сыға алыу зарур. Тап ошондай шарттарҙа Рәсәйебеҙ мәғарифы совет йылдарындағынан да күпкә өҫтөнөрәк, һөҙөмтәлерәк һәм алдынғыраҡ системаға әүерелә сәгенә шик юҡтыр.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

✓ ***Крәҫтиәндәргә Ырымбурға атта йөрөүҙе тыя, үҙе лә 40 саҡрымға йәйәү йөрөй. Әлбиттә, крәҫтиәндәр уны тыңламай, ҡалаға атта килә, ат һәм арбаларын Кеш тауы янында ҡалдырып, ҡалаға йәйәүләп инә.***



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**П.К. Эссен**

**(1817 - 1830 йылдарҙа губернатор булған).**

Кенәз Волконский урынына Ырымбур губернаторы итеп генерал-лейтенант, тиҙҙән тулы генералға үрләтелгән Петр Кириллович Эссен тәғәйенләнә. Уның генераллыҡ карьераһы осраҡлы тигәндәй килеп сыға. Ул Гатчинала Павлов лейбгвардии полкында хеҙмәт итә, ундағы барса офицерҙар ҙа Павел I батшаға шәхсән билдәле була, һәм батша, уларҙың тоғролоғона ышанып, офицерҙарын бик тиҙ, йыш ҡына оригиналь рәүештә күтәрмәләй. Гатчинаға йәйәүләпме, әллә һыбай китеп барған Эссенды осратып, батша ғали йәнәптәре уны үҙенең каретаһына ултыртып ала, әңгәмә барышында офицерының аҡыллы яуаптары өсөн уға капитан чинын бирә, ә бер сәғәттән һуң, батша каретаһынан сыҡҡан мәлендә Эссенды полковник итә. Тиҙҙән ул генерал-майор булып китә.

Ошо хаҡта Эссен ваҡытында хеҙмәт иткәндәр һөйләй, һәм быны булыуы бик мөмкин, сөнки был Павел Беренсененең холҡона тура килә. Ул өс йә иһә дүрт йыл эсендә ябай лейтенант Кушелевты граф титулына ҡуша адмирал дәрәжәһенә тиклем күтәрә, крәҫтиәндәр менән бүләкләй һәм канцлер Безбородконың һеңлекәшенә өйләндерә, һәм уларҙан Кушелев-Безбородколар нәҫеле башланып китә.

Мин был турала эске урҙа ханы Сыңғыҙ кенәз тарафынан 1855 йылда Ырымбурҙа, Урал арьяғы сауҡалығында йәш кавалергард офицеры, граф Кушелев-Безбородко өсөн уҙғарылған кисәлә ишеттем. Мин уның күп булмаған ҡунаҡтары иҫәбендә инем.

Эссен юғары ҡатламдан түгел ине. Уның нәҫеләнән ике туғаны, ваҡ чиновник булған Иван Егорович Эссен Ырымбурға килгәс, генерал ағаһы уны Ырымбурҙың сик комиссияһына хеҙмәткә тәғәйенләй, ә быныһы, ошо комиссияла хеҙмәт итмәүенә ҡарамаҫтан, эш хаҡы ала, шул уҡ ваҡытта Һырттағы казак биләмәләрендә утарҙар һалдыра, малсылыҡ менән шөғөлләнә, берме-икеме крәҫтиән ғаиләһе тота; ул иҫ китмәле һаран кеше була. Ҡиммәтселек ваҡытында, йомортҡа, май һәм һөт ҡиммәт саҡта утарҙарҙан ошо аҙыҡ-түлекте Ырымбурға һатырға килтереүҙе талап итә һәм һатып була торғандарҙан үҙе өсөн бер нәмәне лә тотонмай. Үҙенең йылҡы өйөрөнән аттарҙы бында тауар килтереүсе ямщиктарға бурысҡа һата, уларҙан мөмкин булғанса ҡиммәт хаҡ һорай, әммә ул бының өсөн акçаны һирәк алған шикелле: ат һатып алған ямщиктар Ырымбурға башҡаса килеп йөрөмәйҙәр. Үҙенең ир туғанынан кухняла тороп ҡалған икмәк киҫәктәрен һәм ҡатҡан икмәкте йыйып һаҡлап, үҙенә ебәреп тороуҙы талап итә; ул ошо аҙыҡ-түлек ҡалдыҡтарын быҙауҙарына һәм һыйырҙарына ашата. Крәҫтиәндәргә Ырымбурға атта йөрөүҙе тыя, үҙе лә 40 саҡрымға йәйәү йөрөй. Әлбиттә, крәҫтиәндәр уны тыңламай, ҡалаға атта килә, ат һәм арбаларын Кеш тауы (Соболевая гора) янында ҡалдырып, ҡалаға тиклем йәйәүләп барып, һуңынан кире килеп, артабан арбаларына ултырып ҡайталар. Был Эссен вафат булғас, ағаһы уны үҙ иҫәбенә ерләй, сөнки ул яңғыҙ йәшәгән була һәм, ул үлгәс, фатир хужалары уның аҡсаһын үҙләштерә.

Генерал Эссендың 10 йылдан ашыу идара иткән ваҡыт арауығында, төрлө проекттар тәҡдим ителһә лә, бер ниндәй ҙә реформалар булмай, улар юғары начальство тарафынан хупланмай. Уның ваҡытында 1825 йылда 80 кешегә иҫәпләнгән Неплюев хәрби училищеһы (хәҙерге Неплюев кадет корпусы) асыла, әммә ошондай уҡыу йортон булдырыу хаҡында фекер күпкә алдараҡ белдерелгән булып, был эш аҡса етмәү сәбәпле генә тотҡарланып килә.

Тағы ла бер тарихи ваҡиға булараҡ, Ырымбурға император Александр I ғали йәнәптәренең килеүен атарға кәрәк, ул бында Өфө ҡалаһынан килә һәм үҙенең килеүе хөрмәтенә ҡаланы хәрбиҙәрҙе фатирҙарҙа тотоу бурысынан азат итә. Ошо ваҡиға айҡанлы ҡала исеменән ҡала думаһы янына һәйкәл ҡуйыла, бында хәҙер һыу ебәреү будкаһы тора. Генерал Обручев уны Николаев урамы башына, Урал йылғаһы ярына, хәҙер һәйбәт күренеп торған урынға күсертә. Тәбәк менән икенсегә идара итергә килгән Перовскийға был оҡшамай, һәм ул һәйкәлде элекке урынына ҡуйырға ниәт итһә лә, уны күсереп ҡуйыу батша ғали йәнәптәре рөхсәте менән башҡарылғанды белгәс, үҙенең ниәтенән баш тарта.

Батша ғали йәнәптәре баструкты ҡарарға барғанда, бында килтерелеп, айырым бойороҡ булғанға тиклем тотҡондар иҫәбендә Ырымбур төрмәһендә тотолорға тейешле исемһеҙ бер кешене күрә; уның исеме һәм званиеһы теркәлмәгән, уны № аҫтында иҫәпкә алып, бер үҙен айырым тоторға ҡушылған була; уны бик бәләкәй һәм тығыҙ бүлмәлә тоталар: тотҡон бында үҙ буйы бейеклегендә баҫып тора алмай һәм ул аяҡтарын бөкләп кенә йоҡлай алған; ул инде бер нисә йыл ултырған була һәм батша ғали йәнәптәре бойороғо менән ирекҡә сығарыла. 80-се йылдар уртаһында ошо хаҡта "Оренбургский Листок" гәзитендә мәҡәлә баҫыла.

Генерал Эссен башҡорттарҙан ике типтәр полкы өлгөһөндә бер нисә атлы полк төҙөргә ниәт ҡора, әммә был сара сәйәси һәм иҡтисади сәбәптәр арҡаһында ғәмәлгә ашырылмай. Генерал-губернатор канцелярияһы эштәренән күренеүенсә, ошо хаҡта белеп ҡалған башҡорттар император ғали йәнәптәренә, уның подданныйҙары булараҡ, ғаризнамә яҙып, үҙҙәренең регуляр полктарҙа хеҙмәт итергә теләмәүҙәре хаҡында туранан-тура белдерә, шул уҡ ваҡытта күп йылдар дауамында урынлаштырылған тәртиптә, йәғни һәр кемдең дөйөм сират буйынса һәм милли кейемдә хеҙмәт итергә хоҡуҡлы булыуы хаҡында яҙа.

Иҡтисади сәбәптәр - ҡаҙнала аҡса булмауы, сәйәси яҡтан - халыҡҡа махсус һалым һалынған осраҡта бунт ҡубыуы мөмкин, ә башҡорттар бындай һалымдан нисек тә булһа азат булырға теләй, сөнки Мөхәммәт дине буйынса был һәр ирекле кешенең үҙенең башын һатыуына һәм ҡол халәтенә индерелеүгә тиңләнә.

Губернаның эске тормошо барса сословиеларҙа ла чиновниктарҙың ришүәтселеге менән бәйле бара ине, ул ваҡытта ошондай дөйөм хоҡуҡ боҙоу мөхитендә быны булдырмау өсөн мөмкинлек булмаған.

Төрлө берәҙәктәрҙән торған юлбаҫар шайкаларын, бигерәк тә индерелгән тәртип саралары менән риза булмаған башҡорттарҙан хасил булғандарын, иҫәптән сығарып булмай. Бындай йыртҡыстарҙың килеп сығыуына ул саҡта башҡорттарҙың бик ҙур урмандары, кеше йәшәмәгән киң арауыҡтар һәм Стәрлетамаҡ, Ырымбур һәм өләшләтә Троицк менән Өфө өйәҙҙәрендә тотош башҡа милләтле (инородецтар) мосолман халҡы йәшәүе булышлыҡ итте. Юлбаҫарҙарҙы урындағы халыҡ ҡабул итә һәм һәр саҡта ла йәшерә ине.

Троицк өйәҙендә кантон начальниғы Үтәүев тракт буйлап йәрминкәләргә юлланыусы Себер сауҙагәрҙәрен талар өсөн барлыҡҡа килгән бер шайкала үҙе ҡатнаша һәм уларҙы ҡанат аҫтына ала; бының өсөн уны хөкөмгә тарттыралар һәм ул Себергә ебәрелә, йә иһә суд бөтмәйенсә үлеп ҡала шикелле. Үтәүевте хөкөм итер өсөн Ырымбурға килтерәләр, ул инде үҙенең башҡаса өйөнә ҡайта алмаясағын һиҙенеп, үҙендә йыйылған бер нисә мең ассигнацияларҙы мамыҡ менән һырылған бишмәте эсенә йәшереп, тегеп ҡуя. Ауырып киткәс, уны госпиталгә һалалар, унда үҙенең кейемдәрен алып ҡалып, ҡаҙнаныҡын кейҙерәләр. Госпиталдән сыҡҡас, Үтәүев бишмәтенең һүтелеп, яңынан тегелеүен, аҡсалары алынғанын күрә. Быға госпиталдә аммуниция менән шөғөлләнгән хеҙмәткәр ғәйепле була, унда ҡырыйҙары ситтәренән энә менән тишелгән бер нисә ассигнация табыла; бының өсөн ул яҙа ала, тентеү ваҡытында уның ҡатынының алыштырылып өлгөргән бер нисә мең ассигнацияһын табалар, әммә граждандар суды уны ғәйепле тип тапмай, һәм Үтәүев ахырҙа үҙенең аҡсаларынан ҡолаҡ ҡаға.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Көнсығыш Померания һөжүм итеү операцияһында

Гв. подполковнигы С.Х. Хәбировтың 148-се гв. артминполкы ошо алышта хәл иткес роль уйнай. Ул, немецтарҙың танк уты аҫтында батареяларының уты менән үҙе идара итә. Каллис-Штеттин шоссе юлында, Паммин тораҡ пункты янында хәүефле хәл килеп тыуа. Ҡылыссы эскадрондар бында килеп етеү менән дошман танкылары атака башлай. Немец танкыларының ялан буйлап теҙелешеп килгәнен күргән Сәйфулла Хәбиров үҙенең орудие расчеттарына, танкылар яҡынлашыу менән, тура тоҫҡап атырға бойора. Беренсе залптарҙан дошмандың бер һиңғайы 6 танкы яна башлай, ҡалғандары кире сигенергә мәжбүр була. Кавалеристар атакаға күтәрелә һәм тәүҙә Паммин, һуңынан Гезен тораҡ пункттарын ала. Дошмандың ҡамауҙа ҡалған төркөмөнөң сигенеү юлдары киҫелә.

Подполковник Сәйфулла Хәлил улы Хәбиров дивизия формалаша башлаған беренсе көндәрҙән алып уның командалыҡ итеү составында хеҙмәт итә. Ул - кадровый офицер, Ҡыҙыл Армияла 1930 йылдан бирле хәрби хеҙмәттә була. 1935 йылда Ҡаҙанда Татар-башҡорт хәрби мәктәбенең артиллерия бүлеген тамамлай. 1936 йылда уға лейтенант, 1939 йылда - өлкән лейтенант званиеһы бирелә. 1940-1941 йылдарҙа Владивостокта команда составын камиллаштырыу буйынса артиллерия курстарында уҡый. 1935-1938 йылдарҙа Алыҫ Көнсығыш крайында еңел артиллерия полкында ут взводы командиры булып хеҙмәт итә, 1939 йылда - Хабаровск ҡалаһында 159-сы еңел артиллерия полкында батарея командиры. Бөйөк Ватан һуғышында 1941 йылдың көҙ айҙарынан артиллерия дивизионы командиры урынбаҫары вазифаһында алыштарҙа ҡатнаша.1942 йылдың декабрендә яңы ойошторола башлаған 112-се Башҡорт атлы дивизияһына ебәрелә. Тәүҙә 313-сө атлы полкҡа батарея командиры итеп тәғәйенләнә, 1942 йылдың ноябренән 1943 йылдың майына тиклем 101-се атлы артиллерия дивизионы командиры; 1943 йылдан һуғыш бөткәнсе - 148-се гвардия артиллерия-миномет полкы командиры. Хәрби званиелары: 1942 йылдан - капитан, 1943 йылдың сентябренән - гв. майоры, 1944 йылдан - гв. подполковнигы. Һуғыштан һуң армияла хеҙмәт итеүен дауам итә. 1945 йылдың октябрендә уға гвардия полковнигы званиеһы бирелә. Дивизия командиры, гв. генерал-майоры Г.А. Белов гв. подполковнигы С. Х. Хәбиров тураһында бына нисек яҙа: "Барса алыштарҙа ла тәүәккәллеге һәм ныҡышмал булыуы менән танылды. Уның командалығы аҫтында артиллеристар Красный Яр, Ворошиловград, Дебальцево, Чернигов һәм Малодуш янында танк атакаларын кире ҡаҡты. Уның полкы Днепр, Көнбайыш Буг, Варта, Одер йылғалары аша сыҡҡан саҡта уңышлы һөжүм итеүҙе тәьмин итте..." Ул һуғыштан аҙаҡ йәштәрҙе патриотик рухта тәрбиәләү буйынса күп эшләй, 112-се атлы дивизияның ветерандар советы рәйесе вазифаһын башҡара.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләнә.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Йомран-табын ерҙәре ҙур булған, иң ныҡ төйәк иткән урындары хәҙерге Дуҫлыҡ монументы урынлашҡан ер - төп ҡышлауҙарҙың береһе булған. Артабан ерҙәр ҡыҫыла барған. Икенсе ҡышлаған урындары - Шипово ауылы.*

# БЕР ОСОРҘА ЛА

## фольклор тигән

**Туған телебеҙ - иң ҙур хазинабыҙ. Диалекттарының төрлөлөгөндә лә сағыла ошо байлыҡ. Халҡыбыҙҙың оло хәтере шулай уҡ фольклорҙа үҙенсәлекле сағылыш таба. Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының Башҡорт филологияһы факультетында матур йола һаҡлана: йыл һайын студенттар төркөмдәргә бүленеп, фольклор һәм диалектология буйынса экспедицияға сығып китә. Бындай сәфәрҙәр уларҙы табыштар-асыштары менән ҡыуандыра. Кемдәрҙер тормошто онлайн күҙәтеп кенә өйрәнһә, был студенттар тормоштоң уртаһында ҡайнай. Улар ниндәйҙер кимәлдә тел һаҡсылары булып кәүҙәләнә, изге башланғыстары ошоға ишара булып тора. Халыҡ ижад ҡомарткыларына бөгөн ниндәй мөнәсәбәттә, хәтерҙе һаҡлау ниндәй йүнәлештә бара? Педуниверситеттың уҡытыусылары, экспедиция етәкселәре, филология фәндәре кандидаттары Зәки Арыҫлан улы ӘЛИБАЕВ һәм Вадим Зәйнулла улы ТОЛОМБАЕВтан ошо сәфәрҙәр, осрашыуҙар нигеҙендә тыуған фекерҙәре менән бүлешеүҙәрен һораныҡ.**

**Зәки Арыҫлан улы, фольклор һәм диалектологияға бәйле экспедициялар йыл һайын үткәрелә икән, тимәк, ҡайһы тарафҡа юл алыу, маршрут төҙөү бик үк еңел эш түгелдер? Студенттар уны нисек ҡабул итә, уларға ниндәй тормош һабағы бирелә? Быйыл һеҙ кемдәрҙе экспедицияға алып сыҡтығыҙ?**

**З. Әлибаев:** Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының Башҡорт филологияһы факультетында, уҡыу планына ярашлы, йыл һайын фольклор һәм диалектология буйынса ике аҙналыҡ таныштырыу практикаһы үтә. Йәғни, 1-се курста фольклор экспедицияһы, 2-се курста диалектология буйынса экспедиция ойоштоpола. Был күптән килгән традиция. Ул икенсе төрлө уҡыу-танышыу практикаһы тип атала. Йыл буйы әҙерлек алып барыла. Шуныһы ҡыуандыра: элек бындай сәфәрҙәргә аҡса бүленмәй торғайны, ә хәҙер матди ярҙам да ҡарала.

Быйыл беҙ Ҡырмыҫҡалы районында фольклор экспедицияһында булдыҡ. Башҡорт халҡында киң таралған легендаларҙың береһе - "Биш ул"дың бер нисә варианты Ҡырмыҫҡалыла яҙып алынған. Был яҡтарҙа уны әле лә хәтерләйҙәр. Урта быуаттарҙан күсә килгән сюжеттарҙың береһе ул. Легенданың бер варианты Бөрйән районында ла яҙып алынған. Егет урманға бара һәм унда бер һылыу ҡыҙҙы осрата. Өсөнсө тапҡыр күрешкәндә был ҡыҙ уға кейәүгә сығырға ризалыҡ бирә, тик бер генә шарт ҡуя: бер ҡасан да бергә мунсаға бармаҫҡа. Егет кәләшен алып ҡайтҡас, бөтөн кеше уның һылыулығына хайран ҡала. "Ер ҡыҙы түгел, ҡайҙан таптың?" - ти барыһы ла. Матур итеп йәшәп китәләр. Ҡатыны биш ул табып бирә. Ауыл ирҙәре был егеттең ҡатыны менән бергә мунсаға бармағанын белеп, унан көлә башлайҙар. "Биш ул" легендаһының бер версияһы буйынса егет бер саҡ ҡатыны янына мунсаға барып инә. Ә ул ен ҡыҙы була һәм башын муйынынан алып, таҙартып ултырған була. Ҡатыны шунда уҡ йән бирә. Ваҡыт үтеү менән легенданың яңы варианттары ла барлыҡҡа килә. Уларын да яҙып алғанбыҙ.

Дөйөм алғанда, Башҡортостан райондарына ғына түгел, күрше өлкәләргә лә сығырға тырышабыҙ. Былтыр беренсе курстың башҡорт-инглиз төркөмө менән Силәбе өлкәһенең Арғаяш районында булып ҡайттыҡ.

**В. Толомбаев:** Танышыу практикаһына тиклем студенттар теоретик әҙерлек үтәләр. Әҙәбиятте, беҙ барырға тейешле яҡтың һөйләшен, ауылдар тарихын өйрәнәләр. Теоретик әҙерлек үткәндән һуң, районларға сығып китәбеҙ. Ә районларҙы төрлө шарттар буйынса һайлап алабыҙ. Диалектология буйынса минең төркөм Ейәнсура районында булды, сөнки көньяҡ диалект - беҙҙең башҡорт әҙәби теленең нигеҙе. Беҙҙең факультетта төрлө районларҙан килгән студенттар уҡый, маҡсатыбыҙ - уларҙы диалекттың һөйләштәре һәм бәләкәй һөйләшсәләре менән таныштырыу, ошо һөйләшсәләрҙе йөрөтөүсе реаль кешеләр менән осраштырыу.

**Хәҙер, теләйбеҙме-теләмәйбеҙме, күберәк әҙәби телгә инеп китеп барабыҙ. Үҙ диалектында һөйләшеүселәр ҙә аҙая бара түгелме?**

**В. Толомбаев:** Ауылдан сыҡмағаныраҡ, элек-электән шунда йәшәп, шунда эшләп, хаҡлы ялға сыҡҡан апай-ағайҙар, ысынлап та, үҙ диалект телендә һөйләшә. Бына шундай теле боҙолмағаныраҡ кешеләр менән осраштырырға тырышабыҙ студенттарыбыҙҙы. "Беҙгә шундай-шундай кеше кәрәк", тиһәк, "Уй, унда барығыҙ, унда уҡытыусы йәшәй, матур һөйләй", тиҙәр. Беҙ: "Юҡ, беҙгә матур һөйләгән кеше түгел, ә ерле һөйләштә һөйләшкән кеше кәрәк",- тибеҙ. Сөнки уҡытыусы ул инде әҙәби телгә күсеп бөткән була. Районға сыҡҡас, старосталарҙы, зыялыларҙы күрергә тырышабыҙ. Улар беҙҙе өлкән быуын кешеләре менән осраштыра. "Күршегеҙ менән нисек һөйләшәһегеҙ, балаларығыҙға нисек өндәшәһегеҙ?"- тип һорашабаҙ. "Мал-тыуарҙы нисек яратаһығыҙ, нисек ҡыуалайһығыҙ, нисек әрләйһегеҙ",- тип шаяртып та әйтәбеҙ. Улар бит малды китапса, әҙәби телдә ҡыуаламай, ә элек-электән, бала саҡтан өйрәнгән һүҙҙәрҙе ҡуллана. Шуға ла бындай һүҙҙәр менән танышыу бик ҡыҙыҡ.

Маршрутты үҙебеҙ һайлайбыҙ, тигәндән бигерәк, уның бер нисә шарты бар. Һәр бер практика аныҡ предметҡа бәйле. Ә был практика университетта диалектология фәнен уҡып бөткәндән һуң ойоштоpола. Әлбиттә, студенттарға: "Информаторҙарҙы һөйләндерер өсөн һеҙ үҙегеҙҙең ырыуығыҙҙың тарихын, һөйләш үҙенсәлегегеҙҙе белергә тейешһегеҙ, шул саҡта ғына улар менән аралаша алаһығыҙ", - тип, алдан уҡ әйтеп ҡуйғанмын. Әлеге практикала Саҡмағош, Белорет, Әбйәлил районларынан килеп уҡыған студенттар булды. Улар үҙҙәренең һөйләштәре менән сағыштырып ҡарайҙар, һығымталарын яһайҙар.

**З. Әлибаев:** Диалектология, фән булараҡ, ниндәйҙер фонетик үҙенсәлектәргә генә ҡайтып ҡалмай. Онотолоп ҡалған лексик һүҙҙәр бар. Үткән йылдарҙа диалектологияға бәйле беҙҙең шәп проект булғайны. Балалар баҡсаһында диалект нигеҙендә әҙәби телде өйрәнеү. Өс төбәктә - Борай, Әбйәлил һәм Стәрлебаш районларын дәреслек яҙыр өсөн махсус рәүештә һайлап алдылар. Фольклор буйынса ла, диалектология буйынса ла күптән дәреслектәр яҙылған. Теоретик белем экспедицияла тулыһынса күренә, беленә. Практикант ниндәйҙер кимәлдә ошо байлыҡты үҙенә һеңдерә башлай, рухи яҡтан да нығына. Беҙ бит киләсәк өсөн уҡытыусылар әҙерләйбеҙ. ***Һүҙҙәрҙең онотолған, ҡулланылмаған варианттары бик күп, ә ҡалыплашмаған тел күпкә матурыраҡ та яңғырай. Мәҫәлән, "ишек алдындағы баҡса" тип оҙон итеп әйтәләр. Уның бер генә һүҙе бар - "текмә". Был һүҙҙе яҙыусылар ҙа ҡулланмай, тиерлек.***

Фольклорға килгәндә, унда күсмә сюжеттар шул тиклем күп. Әгәр ҙә сюжеттың нигеҙен алып ҡараһаҡ, уның үҙебеҙҙең халҡыбыҙҙың ерлегендә тыуған икәне асыҡлана. Жәлил Кейекбаевтың бал ҡорттарының нисек кешегә эйәләшкәнлеге тураһында әкиәте бар. Бындай әкиәттәр беҙҙә күп кенә, һәм улар халыҡтың менталитетын сағылдыра. Ә топонимик легендаларҙа сюжеттар бөтөнләй ҡабатланмай. Кешеләр араһындағы, социаль ҡатламдар араһындағы, йәки милләт араһындағы мөнәсәбәттәр нисек бар, шулай сағылдырыла.

**Топонимикаға төшөп китһәк, һәр ауыл үҙе бер тарих. Ә тарих шәхестәр менән бәйле. Был практика студенттар өсөн күп тормош һабағы бирәлер тип уйлайым. Хатта ике-өс исем менән йөрөтөлгән ауылдар ҙа байтаҡ бит беҙҙә…**

**З. Әлибаев:** Эйе, күп кенә башҡорт ауылдары ике исемле. Ҡырмыҫҡалыла ла шул уҡ хәл күҙәтелә. Бишуңғар халыҡ телендә - Бишул. Уңғар һүҙе аша венгрҙар менән бәйләнеште әйтә алабыҙ, йәғни Урта быуаттарҙағы мөнәсәбәттәр сағыла. Был табын ырыуы ерҙәре, тимәк, табындарҙың уңғарҙар менән бәйләнешен һөйләй. Мөхәмәтсәлим Өмөтбевтың музейында булдыҡ. Музейҙа ниндәй генә ҡиммәтле сығанаҡ, документтар һаҡланмай! Мөхәмәтсәлимдең бер туған ағаһы Фәрхетдин Ырымбур губернаһында губернаторҙың советнигы булып эшләгән. Шул осорҙа ер мәсьәләләре ҡырҡыулаша башлағас, әллә күпме йомран-табын ырыуы кешеләрен Ырымбурға күсереп алып киткән. Хәҙерге көндә ул яҡта бер нисә табын ырыуы ауылы бар икән, уларҙы ошо Ибраһимдан күсеп киткәндәрҙең ата-бабалары һалған. Йомран-табын ерҙәре ҙур булған, иң ныҡ төйәк иткән урындары хәҙерге Дуҫлыҡ монументы урынлашҡан ер - төп ҡышлауҙарҙың береһе булған. Артабан ерҙәр ҡыҫыла барған. Икенсе ҡышлаған урындары - Шипово ауылы. Һаман ҡыҫырыҡланғас, Ибаһим ауылына күсәләр. Ерҙәре күп булғас, тынысыраҡ холоҡло төркиҙәргә - сыуаштарға ла бүлеп бирәләр. Шулай итеп Һәүәләй-Савелий, Ҡолош ауылдары барлыҡҡа килгән. Ваҡыт үтеү менән был сыуаштар татарлаша, ә элек унда тик сыуаштар ғына йәшәгән.

Ун туғыҙынсы быуатта беҙҙең мәғрифәтселәр шул тиклем көслө булған, беҙ, ғәҙәттә, шуларҙың өсәүһен генә атап китәбеҙ - Аҡмулла, Риза Фәхретдинов һәм Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев. Уларҙың фольклорға бәйле хеҙмәттәре лә күп. Нимәне әйтергә итәм: тик ер генә үҙенең тарихын һаҡлай ала. Ибраһим ауылы үҙенең ерҙәрен дә, тарихын да һаҡлап ҡалған. Бына шундай үҙенсәлекле ауыл ул. Ғөмүмән, йомран-табын ырыуында уҡыу элек-электән алда торған. Ҡәбер таштарындағы яҙыуҙар ҙа әлегә тикем һаҡланған, ауыл халҡы ҡомартҡыларын күҙ ҡараһылай һаҡлай белә. Ошоларҙы күреү генә лә йәш кешелә әллә ниндәй хистәр уята.

Бүтән ауылдарҙа ла - үҙ йәшәйеш үҙенсәлеге. Ҡырмыҫҡалы районы биләмәһендә йорт һала торған ағастар үҫмәй. Улар хатта һәр бүрәнәнең тарихын бәйән итә ала һәм һөйләп бөтөрөрлөк булмаған кеше тарихтары күҙ алдына килеп баҫа. Иҫке Бәпес ауылынан, мәҫәлән, бер уҡытыусы ҡыҙ Баймаҡ районына кейәүгә сыға, аҙаҡ улы менән тыуған яғына ҡайта. Хәҙер улы йылҡысылыҡ менән шөғөлләнә. Бына ҡан хәтере өлгөһө: кеше үҙ асылына ҡайта.

Кешенең үҙ асылына ҡайтыуы шәжәрә менән дә башланды. Хәҙер һәр ғаиләнең үҙ шәжәрәһе бар. Районның Шәрипҡол ауылында Ғирфановтарҙың шундай шәжәрәһе менән таныштыҡ. Теге йәки был ара ниндәй һөнәрҙе үҙ итә, уларға ниндәй эшмәкәрлек хас, нимә нығыраҡ үҫешкән - шуларҙы асыҡларға була. Ата-бабаһы тимерселек менән шөғөлләнде икән, улы иртәгә игенселек менән шөғөлләнә башланы тигән һүҙ түгел. Кәсепселек - нәҫелдән килгән күсәгилешлелек. Экспедицияла йөрөгәндә бына шулар бик асыҡ күренә. 90-сы йылдарҙағы шәжәрә төҙөүгә ҡыҙыҡһыныу уяныу ҙа бик ыңғай йоғонто яһаған, башҡорттоң үҙаңын уятҡан. Мәктәптәрҙә лә эш яҡшы алып барылған. Шәжәрә төҙөү - халыҡтың үҙенән сыҡҡан идея һәм ул ғаиләнең, дәүләттең рухи ҡиблалары нигеҙендә торған әйбер. Ошо үҙгәрмәй торған ҡиммәттәр, ниндәй генә осор тура килһә лә, рухи ҡибла булып ҡала.

**Диалектология фәне өсөн бындай практиканың әһәмиәте нимәлә асыҡ сағыла? Халыҡ менән бәйләнеш урынлаштырыуҙа ауырлыҡтар юҡмы?**

**В. Толомбаев:** Беренсенән, бындай практикаға сығыу мөмкинлеге тик беҙҙең Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында ғына, башҡа вуздарҙың ундай мөмкинлеге юҡ. Йылына хатта ике тапҡыр сығабыҙ беҙ экспедицияға. Был йәһәттән етәкселеккә ҙур рәхмәт. Икенсенән, Башҡортостандың бөтөн районларын да алырға тырышабыҙ. Диалектология практикаһына быйыл дүрт төркөм сыҡты. Ғафури, Хәйбулла, Ауырғазы, Ейәнсура районларында булдыҡ. Өсөнсөнән, был практика уҡыу программаһы менән ҡаралған һәм аныҡ фәндәр менән бәйле, ул диалектология фәненең йомғаҡлау этабы тип ҡарала. Районларҙа беҙҙе ҡаршы алған, ойоштороуҙа ярҙам иткән кешеләргә рәхмәт. Ейәнсура районының Юлдаш ауылында бик шәп Ағинәйҙәр клубы бар, уларға, китапхана хеҙмәткәрҙәренә рәхмәт. Бер генә өндәшеү етте, улар шундай ихлас ярҙамлаштылар, беҙгә нимә кәрәк икәнен шундуҡ аңланылар. Хәтирәләре менән уртаҡлаштылар, ниндәй таҡмаҡ әйтешкәндәр, ниндәй йырҙар йырлағандар, бала саҡта уйнаған уйындарын күрһәттеләр. Үҙҙәренә лә ҡыҙыҡтыр инде, оҙаҡ итеп һөйләшеп ултырҙыҡ.

Элекке тормош-көнкүреште, йоланы тергеҙеүсе шәхестәребеҙ бар. Мәҫәлән, Үрге Муйнаҡ

**Башҡорт теле бик бай. Был байлыҡ - халыҡ телендә. Бары уларҙы йыйырға ғына кәрәк. Тел үҫергә тейеш, әҙәби тел нормаһы менән беҙ уны ҡыҫырыҡларға, сикләргә тейеш түгелбеҙ.**



ауылында Ирәндек Ғәбделғужин "Уғатар" түңәрәген алып бара. Ул шул яҡтың тарихын һөйләне, уҡтан сәпкә атып ҡаранылар - студенттарға бик оҡшаны. Маҡсатҡа ярашлы, диалекттар күп төрләнгән, хатта ауыл менән ауыл араһындағы тел айырымлыҡтарын ишетеп белеп ҡайттылар. Мәҫәлән, һауыт-һабаны "аяҡ" тип атағандарын ишетеп аптыранылар. Шул уҡ ваҡытта үҙҙәре "сынаяҡ" тигән һүҙҙе бик ихлас ҡулланалар бит. Йәғни, ҡытай фарфорынан яһалған һауыт беҙҙә шундай атама менән һаҡланған.

Инәйҙәрҙән: "Бәпәйегеҙҙе нисек яратаһығыҙ?" - тип һорайбыҙ. "Айналайым" тигәнде бәләкәйҙән ишетеп үҫкәнмен. Бында "мампаси" тип яратҡанды ишеттек. Һәр барған һайын яңы материал тупларға мөмкинлек була. Экспедицияның әһәмиәте шунда. *Тағы ла глобаль әһәмиәте: әҙәби телгә генә йәбешеп ятырға түгел, ана шул диалект һүҙҙәрен дә киң ҡулланырға кәрәк икәнде аңлау. Башҡорт теле бик бай. Был байлыҡ - халыҡ телендә. Бары уларҙы йыйырға ғына кәрәк. Тел үҫергә тейеш, әҙәби тел нормаһы менән беҙ уны ҡыҫырыҡларға, сикләргә тейеш түгелбеҙ. Әллә ҡасан барлыҡҡа килгән тел нормаһы менән беҙ уны ҡыҫырыҡлап тота алмай-*

ҡулланалар. Ейәнсура районы тиһәк тә, ул айырым-айырым ауылдарҙа ғына ҡулланыла. "Ҫ" был осраҡта эмоционаллек бирысын үтәй. Хис-тойғо, кисереш сараһы булараҡ, был күренеш шулай уҡ әҙәбиәттә сағылыш алмаған.

Фәнни яҡтан да, педагогик яҡтан да, һөнәри квалификацияны үҫтереү яғынан да практиканың бер нисә мөһим моменты бар. Текстарҙы йыйып алып ҡайтҡандан һуң, уларҙы эшкәртәләр. Транскрипция яһағас, уларҙың фонетик, морфологик, синтаксис үҙенсәлектәрен тикшереп, анализлап, беҙгә отчет тапшырырға тейештәр, йәғни уларҙың фәнни-тикшеренеү һәләтенә баҫым яһала. Актуаль тикшеренеүҙәрегеҙ юғалып ҡалмаһын, тип, студенттарҙан артабан уларҙы мәҡәлә итеп баҫтырыуҙарын да талап итәбеҙ.

**З. Әлибаев:** Аудиторияла беҙ студенттарҙың кем икәнен белмәйбеҙ, ә практикала йөрөгәндә студенттар тулыһынса асыла. Фәнни яҡтан да, ойоштороу яғынан да яуаплылыҡ тойоп эшләйҙәр. Минең төркөмдә дүрт егет булды. Бигерәк тә староста Ансар Сәйгәфәровтың ярҙамы ҙур булды. Беренсе курсты бөткәс, үҙ теләге менән ар-

тә ултырмайҙар. Ә йыйған материалдарҙы беҙ һанлаштырып, архивҡа тапшырабыҙ, улар ҡайҙалыр ҡулланыла. Варианттар яҙып алабыҙ икән, томдарға һылтанма эшләйбеҙ. Мәҫәлән, был вариантын Ф. Нәҙершина яҙып алған һ.б. Йәки, туй йолаһының был элементтары юҡ, йә, киреһенсә, өҫтәп бирелә.

Башҡорттарҙа ҙур бер туй элементы һаҡланып ҡалған - киленде төшөргән ваҡытта аҡ мендәргә баҫтыралар. Беҙҙә аҡ төҫ - изгелек төшөнсәһе. Шул тиклем ҙур мәғәнәгә эйә. 1554-1557 йылда беҙҙең бейҙәр Иван Грозныйға барған саҡта уны аҡ кейеҙгә баҫтырғандар. Ике яҡлы килешеү төҙәлә, унда беҙгә иң кәрәкле талаптар - диндең,

**З. Әлибаев:** Беҙҙең халыҡ бик боронғо бит ул, шундай архаик элементтар һаҡланған, тип, үҙ исеме менән атарға кәрәк. Улар хатта художестволы образға әйләнеп киткәндәр.

**Студенттар бындай экспедицияларҙан ҡайтҡас, үҙҙәренең тәьҫораттары менән уртаҡлашалыр. Беҙ бында фекер алышыр өсөн етәкселәрен генә саҡырҙыҡ, әлбиттә...**

**В. Толомбаев:** Студенттар ғүмер буйы иҫкә алырлыҡ хәтирәләр менән ҡайта. Беҙ институтта уҡыған саҡта диалектология практикаһында колхозға картуф йыйырға бара торғайныҡ. Ямғыр аҫтында картуф йыйыу рәхәт булмағандыр, шу-

сәй ҡайнатып ултыра ала инегеҙ бит!"

Бына шулай, ишек асыҡ, кемдер инеп, әйберҙе рөхсәтһеҙ алыр, йә урлашыр тигән ҡурҡыу юҡ. Был, бер яҡтан, бик яҡшы, икенсе яҡтан, кемдәрҙер килеп ҡиммәтле тәңкәләрҙе өҙөп-өҙөп, йә ҡомартҡы миҙалдарҙы алып сығып китә ала бит. Ә ундай ҡәҙерле нәмәләр бар халыҡбыҙҙа. Шәрипҡолда 1812 йылғы миҙал һаҡлана. Улар Башҡортостанда егерме һигеҙ генә дана ҡалған. Әбей сығарып һалып ҡуйҙы ла, үҙ эше менән булып йөрөй, иғтибар ҙа итмәй. Ә бит ихласлыҡ ҡайсаҡ зыян да килтереп ҡуя. Күп кенә әйберҙәр шулай юғалған да.

Ә экспедицияларға сығыу традицияһы бөгөн генә барлыҡҡа килмәгән, ул электән бар, беҙ шул эштәрҙе дауам ғына итәбеҙ. Мәрхүм Рәшит ағай Шәкүр өсөн экспедицияларға сығыу төп эштәренең береһе булған. Әхмәт Сөләймәнов Дим буйы башҡорттарының фольклорын йыйып, айырым китап итеп сығарҙы. 1961 йылда Мейәс ҡалаһында Аҡмулланың ҡәберен һаҡлап тотҡан кешеләрҙе тапҡан Кирәй Мәргән етәкселегендәге экспедицияға бурыслыбыҙ. Бер әбей менән бабай



# ҮҘГӘРМӘЙ ТОРҒАН...

## ҡиммәттәребеҙ бар

*быҙ. Тел тере йән эйәһе һымаҡ, ул үҫергә, байырға тейеш. Ә нисек байый? Ошо ерле халыҡ теленән, ерле һөйләштән. Халыҡта ҡулланыла икән, ниңә беҙ уны әҙәби телгә индереп ебәрмәҫкә тейешбеҙ?*

Студенттар өсөн бындай практиканың әһәмиәте баһалап бөткөһеҙ, артабан да дауам итһен ине, тигән теләктә ҡалам. Студенттар диалектология фәнен уҡығандан һуң, халыҡ менән аралашып, информаторҙар менән осрашып, интервью алырға өйрәнәләр. Нимәгә иғтибар итергә, нимәгә баҫым яһарға тейеш - шуларын беҙ өйрәтәбеҙ. Информаторҙы һөйләндерер өсөн йәш кеше был темаға, мәғлүмәткә үҙе ҡыҙыҡһыныу белдерергә тейеш, микрофонды һуҙып, тота килеп кенә кешенең телен сисеп булмай. Киләсәктә кеше менән эшләргә тейешле белгестәр булараҡ, беҙҙең студенттар өсөн был бик мөһим. Бер олатай бүре һуға торған суҡмар килтереп сығарҙы. "Был нимә, белмәйһегеҙме ни?" - тип һорай. Студенттар эҙмә-эҙлекле фекерләү юлы менән суҡмар икәнлеген билдәләй алдылар.

Шул рәүешле студенттар диалектология, лингвистика өлкәһендәге белемдәрен реаль эксперимент рәүешендә тикшерәләр. Мәҫәлән, Өҫкәлек йылғаһы буйында урынлашҡан ауылдарҙа Дим һөйләшенә хас "ҫ" өнөн

мияға китеп, хеҙмәт итеп ҡайтты. "Мин староста булам", тип килде. Экспедиция мәлендә ойоштороуҙа бөтөн яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алды, тәүге этапта материалдарҙы йыйып алып, үҙе тикшерҙе. Бына шулай студенттар асылып китә. Беҙҙең факультетты тамамлаған бик күптәр ил, республика кимәлендә етәкселәр булып эшләйҙәр. "Һин етәксе булһаң, нимә эшләр инең?" тигән яуаплылыҡ һалабыҙ. Тәрбиәүи йәһәттән ҡарағанда, егеттәребеҙ поезд алдында барған паравоз һымаҡтар. Беҙҙең менән осрашыуҙарҙан һуң, педагогия университетына уҡырға килергә тип, йәштәр ҙә ҡыҙыҡһынып ҡалалар. Мәҫәлән, "Һандуғас" йырын осҡа башҡарыусы Полина Пурахина: "Мин мотлаҡ башҡорт телен белергә тейешмен!"- тип, былтыр Октябрьский ҡалаһынан беҙгә килде.

Беҙгә уҡырға ингәндәр араһында телде төрлө кимәлдә белгәндәр бар. Телмәрҙәре ныҡ үҫешкән тип әйтеп булмай, ә экспедицияға сыҡҡас, башҡортса нисек дөрөҫ һөйләшергә кәрәклеген дә асыҡлайҙар, сөнки үҙҙәре информаторҙарға һорау бирәләр. Хәҙерге замандың ауырлыҡтары ла, ҡырҡ мәшәҡәте лә бар, бөтәһе лә ал да гөл тип әйтеп булмай: барған урында уңайлы йәшәү шарттары булдырыу, транспорт хаҡы, юл сығымдары һәм һәр ерҙә лә һине генә көтөп

ерҙең һаҡланыуы. Бөтөн Рәсәй халыҡтары өсөн батша Иван Грозный булһа, башҡорттар өсөн ул - Аҡ батша. Был төшөнсә туранан-тура беҙҙең боронғо йолаға бәйле, аҡ кейеҙгә баҫтырҙың икән, ул беҙҙеке. Аҡ кейеҙгә баҫҡан батша - беҙҙеке. Ул яуызлыҡ ҡылмай.

Бына шулай бик ҡыҙыҡ йолалар булған, башлыса, бындай элементтар туй йолаларында яҡшы һаҡланған. Киленгә һыу башлау йолаһында ла сағыла. Ауылда шишмәләр күп, тик ни өсөндөр бер генә шишмәгә алып баралар. Ни өсөн мотлаҡ ошо шишмәгә алып барырға? Уны нигеҙләйҙәр, изге урындар тигән төшөнсә бар. Ни өсөн изге? Ул нимә менән бәйле? Халыҡтың тәрән хәтере менән бәйле. Фольклорҙа айырым изге урындар, изгеләр зыяраты тураһында хәтирәләр ныҡ һаҡланған. *Ислам дине ҡабул ителгәнгә тиклемге мәжүси осорҙо хәтер һаҡлап ҡалған икән, тимәк, юҡҡа түгел. Боронғо осорҙоң был элементтары Исламға ҡаршы килмәгән, шуның өсөн ҡапма-ҡаршы ҡуйыу булмаған. Шуға күрә, туй йолаларында, хатта ерләгәндә лә мәжүси элементтар килеп сыға. Тормош-көнкүрешебеҙгә зыян килтермәнәләр, Ислам дине ҡәтғи рәүештә тыймай. Икеһе лә изгелеккә, ошо башланғысҡа хеҙмәт итә. Һабантуй, ҡарға бутҡаһы, кәкүк сәйе - улар мәжүсилектән килә.*

**Тау эйәһе, һыу эйәһе тигән төшөнсәләр ҙә йәшәп килә...**

лай ҙа иң яҡты хәтирә булып иҫтә ҡалған. Хәҙер осрашһаҡ, шул мәлдәргә төшә лә китәбеҙ. Бөгөнгө заманда иһә ауылдарҙа төрлө йәмәғәт ойошмаларының барлыҡҡа килеүе беҙҙең дә эште ныҡ еңеләйтте. Ун өсөнсө йылда тәүге экспедицияға сыҡҡанда ауырға тура килгәйне. *Хәҙер хәлдәр бөтөнләй икенсе, информаторҙарҙы урам буйлап эҙләп йөрөмәйһең: "Ағинәйҙәр" клубы, "Уғатарҙар" түңәрәге бар, уларға ла аралашыу кәрәк. Китапханасыларҙың эштәре күренә, улар ҙа ихлас ҡушылалар.* Йома намаҙына мәсеткә барһаң да, ихлас һөйләшеп ултырырға була, сөнки аңлы, һөйләшергә әүәҫ халыҡ йыйыла, старосталар ярҙам итә.

**З. Әлибаев:** Башҡорт ауылдарында бындай экспедицияларҙың мөһимлеген аңлайҙар. Тәрбиәүи йәһәттән дә күп нәмә бирәләр. Бер нисә йыл элек Әбйәлил районында Күсейҙә экспедицияла булғайныҡ. Инәйҙәр: "Һеҙ беҙгә килегеҙ", - тип саҡырып ҡына торалар. "Балаларҙың әсәләре эргәләрендә юҡ, ас йөрөтөп ҡуймағыҙ инде", - иң төп хәстәрҙәре шул булды. Күп мәғлүмәт белгәне өсөн түгел, шул балаларҙы индереп ашатып сығарып, сауап алайым, тип тырышыуҙары. Беҙ, тәбиғи, бөтәһенә лә барып өлгөрмәйбеҙ. Бер инәй: "Саҡырғайным, килмәнегеҙ", - ти. "Беҙ барғайныҡ, ишегегеҙ бикле ине", - тип яуап бирҙек. "Нисек бикле? Мин унда ҡанат ҡына ҡуйып киткәйнем. Һеҙ инеп,

Аҡмулла сәсәндең ҡәберен һаҡлап, артабан шул урынды һаҡлауҙы икенсе кешегә тапшырған булғандар икән. Был ике хөрмәтле кешенең үҙҙәрен дә Аҡмулла ҡәберенең ике яғына ерләгәндәр. Халыҡ ҡәҙерле әйберҙе бер ваҡытта ла юғалтмай. Аҡмулла - башҡорттоң ғорурлығы. Ерләнгән урынын быуындан-быуынға тапшырып, бына нисек һаҡлап ҡалғандар.

Республикала иң тәүгеләрҙән булып фольклор үҙәге беҙҙә барлыҡҡа килде. Башҡа бер ерҙә лә ул юҡ. Фольклор үҙәге дәрес үткәреү генә түгел, фольклорҙы популярлаштырыу, уның төрлө йүнәлештәрен үҫтереү менән шөғөлләнә, үҙенең программаһы бар. Ректорыбыҙ Сәғитов Салауат Тәлғәт улына рәхмәт. Айырым үҙәк булдырыу - ҙур эш. Халыҡ ижадының 36 томы сыҡты ла, фольклор бөттө, тигән һүҙ түгел. Булғанын да халыҡҡа ниндәй формала, ниндәй йөкмәткелә алып барып еткереү ҙур эш талап итә. Розалия Солтангәрәева, Шәүрә Шәкүрова, Нәркәс Хөббөтдиноваларҙың эшмәкәреге беҙҙең менән туранан-тура бәйле алып барыла. Беҙҙең студенттар йыйған материалдарынан бер нисә мәҡәлә яҙҙы икән, юғары стипендияға дәғүә итә алалар һәм фәнгә тәүге аҙымдарын яһайҙар. Факультетта һалынған матур традициялар йәшәй, үҫтерелә.

Әңгәмәне
**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
алып барҙы.

✔ ***Башҡорт тоҡомло ат тотҡан кешеләр көтөү көтөп йөрөмәй. Өйөрҙө айғыр үҙе көтә, уны ҡайһы ергә өйрәтһәң, шул тирәнән аттарын ебәрмәй тота. Беҙҙең аттар йөккә лә талымһыҙ.***



ҠЫҘЫҠЛЫ ӘҢГӘМӘ



**Баймаҡ районының Әбделкәрим ауылы ир-уҙаманы, дуҫым Ислам Булатов Өфө урман хужалығы техникумын тамамлаһы, һөнәре буйынса урмансы. Бөгөн эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнә. Аттарҙы Ислам ниндәйҙер табыш алыр өсөн түгел, ә атһыҙ йәшәй алмағаны өсөн тота. Уға бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттем.**

# АТТАРЫМДЫ...

## борғо ҡысҡыртып саҡырам

➔ **Ислам дуҫ, һин бер мәртәбә пионер борғоһо эҙләгәйнең. Уның яңғырамында ҡырҙа йөрөгән аттарымды өйгә саҡырып ҡайтарам тигәйнең. Борғо таптыңмы, ғөмүмән, нисек уның яңғырамында эш итеүең хаҡында ентекләберәк һөйлә әле?**

- Таптым пионерҙар ҡоралын. Борғо ҡысҡыртып аттарҙы саҡырыу әле генә барлыҡҡа килгән ысул түгел. Элек беҙ мәктәптә уҡыған саҡта ла уны файҙалана инек. Ағас араһында, тау артында йөрөгән аттарҙы ҡысҡырып ҡына саҡырыу мөмкин булмаған эш. Беренсенән, нисек кенә ҡысҡырһаң да, борғоға еткереп булмай, тауышың уларға барып етмәй, икенсенән, күренмәгән ерҙә йөрөгән аттарға нимә тип ҡысҡырһаң да, ат һине ишеткән хәлдә лә, саҡырғаныңды аңламаясаҡ. Шуға күрә лә мин өй янында саҡта аттарыма бесән, һоло, ем бирер алдынан борғо ҡысҡыртам. Быны бер нисә тапҡыр ҡабатлаһаң, малҡайҙарың борғо тауышын ашарға саҡырыу тип ҡабул итеп өйрәнә. Әле ҡыш булһынмы, йәйме, көҙмө, яҙмы, өйөмдән сығып борғо ҡысҡыртыуым була - аттарым бәйгелә сапҡандай осоп-елпенеп елдереп ҡайтып инәләр. Ҡайтып инәләр ҙә, линейкаға теҙелгән пионерҙар шикелле тураға ҡатып күҙемә ҡарайҙар. Мин уларға "Смирно!" тигән команда бирәм дә, рапорттарын ҡабул итеп, үҙҙәрен һыйларға тотонам.

➔ **Тәүге тапҡыр ҡасан атҡа менеп йөрөнөң, шул хаҡта һөйлә әле? Ҡурҡмаһыңмы?**

- Тәүге тапҡыр атҡа ултырғанда әле мәктәпкә бармағайным. Беҙ, ғөмүмән, ул заман малайҙары әле велосипедта ла йөрөргә өйрәнмәйенсә, атҡа атлана инек. Бер мәл ағайым мине атҡа мендереп, Һаҡмарға һуғарып килергә ебәрҙе. Атым башын түбән эйҙе лә, миңә баш бирмәйенсә, йылғаның уртаһына китеп тик бара. Мин иларға тотондом. Шунда еңгәй тейешле кеше йылғала кер сайҡап тора ине. Ул минең хәлде аңланы ла, атымды етәкләп сығарып ҡайтарып ебәрҙе. Бәхетһәң, аттар йылғаның тәрән еренән, һыуҙың таҙаһын эсәләр икән. Ул еңгәй әле Һынташта йәшәй, күрешкән һайын бала сағымдың атты һуғарыуға бәйле ошо мажараһын иҫкә төшөрөп, һөйләшеп алабыҙ.

➔ **Башҡорт тоҡомло аттарға мөнәсәбәтең нисек? Улар башҡа аттарҙан ни яғы менән айырыла, күҙәткәнең бармы?**

- Беҙҙең аттар айырыуса тоҡомло. Мәҫәлән, башҡорт тоҡомло ат тотҡан кешеләр көтөү көтөп йөрөмәй. Өйөрҙө айғыр үҙе көтә, уны ҡайһы ергә өйрәтһәң, шул тирәнән аттарын ебәрмәй тота. Беҙҙең аттар йөккә лә талымһыҙ. Мин әле урманда эшләгәндә Ҡаҙағстандан еҙнәйем килгәйне. Милләте - ҡаҙаҡ. Ул минең менән ҡышҡыһын санаға ултырып, урманға барҙы. Еҙнәй юлда беҙҙең аттарға һоҡланып: "Аттарығыҙ ҡандай арыу, беҙҙең аттар булһа, әллә ҡасан ҡоларҙар ине", - тине. Беҙҙең аттарға ҡышҡылыҡҡа бесән әҙерләргә лә кәрәкмәй, улар тибендә йөрөп, үҙҙәрен үҙҙәре ҡарай. Мин аттарымды ҡыш ҡар ҡалын ятҡанда йә яҙға ҡарай ғына өйөмә алып ҡайтып ҡарайым. Ҡыш уларға хатта һыу эсерергә лә кәрәкмәй, ҡар ашайҙар. Көҙгә ҡарай көрәйгән башҡорт аты ябыҡмайынса ҡыш сығырға һәләтле. Башҡорт тоҡомло аттың ите лә етеҙ, ҡаҙыһы татлы була. Күрше ауылдағы өйөргә ҡарасәй тоҡомло айғырҙы алып килеп ҡушҡайнылар, хәҙер унан тыуған аттар иткә эшкинмәй, ҡоро һөлдә генәләр.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

Ә ҺЕҘ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?



# ҺАҠЛАНЫУ ТӨҪӨНДӘ УЛАР

**Һис һүҙһеҙ, ат ҡырағай тәбиғәт тыуҙырған иң матур заттарҙың береһе булып тора, ул көсҡеүәт, һомғоллоҡ, иркһеҙ-сикһеҙ азатлыҡ һәм нәфислекте кәүҙәләндерә.**

Яныңдан меңдәрсә тояҡтарҙың тыпырлауы аҫтында башҡорт аттары өйөрә уҙыуын ҡарап, битараф ҡалып булмай. Буяуҙар һәм тауыштар солғанышында ҡырағай тәбиғәттең кеше ҡулы теймәгән матурлығына ҡарағы, ишетке, тойғо һәм һоҡланғы килә. Шулай ҙа ул ни бары бер нисә минуттан һуң, бер нәмә лә булмағандай, далала йәки урманда иреп юҡҡа сыға. Күрәҙәлек итәһе генә ҡала: йөҙҙәрсә аттар, һауала ирегәндәй, нисек юҡҡа сыға һуң?

Эш шунда: беҙҙең башҡорт аты урындағы тоҡомға ҡарай. Аттарҙа боронғо ата-бабаларының бик күп һыҙаттары һаҡланып ҡалған. Улар Волга буйы һәм Урал киңлектәрендә йәшәүгә ҡулайлашҡан. Яраҡлашыу барышында күп кенә биологик үҙенсәлектәр барлыҡҡа килгән, уларҙың береһе - һаҡланыу төҫө, кеше аланда йәки урманда бер нисә метрҙан атты күрмәй.

Төҫ нимә ул, ат тормошонда ул ниндәй роль уйнай? Фәнни күҙлектән ҡарағанда, аттың төҫө тире һәм ҡыл ҡатламы, шулай уҡ күҙҙәрҙең төҫө. Төҫ нәҫелдән тапшырыла, атты таныу билдәһе булып хеҙмәт итә. Беҙ төҫөнә ҡарап, бер атты икенсеһенән бик еңел айыра алабыҙ, сөнки бер төрлө аттар булмай. Тап бына шуға күрә аттар өйөрөнә ҡарап, сәскәләр һәм төҫтәрҙе күргәндәй булабыҙ. Төҫ кеше өсөн маҡсатҡа ярашлы алып барылған селекция билдәһе булып хеҙмәт итә. Кемдендер ҡара йәки аҡ булып тыуған атлы булғыһы килә, икенсе кешегә туры йәки алмасыбар ат оҡшай. Бынан тыш, аттың төҫө хужалыҡҡа файҙалы башҡа билдәләр менән тығыҙ бәйләнгән. Мәҫәлән, ҡара аттарҙың ныҡ дәртле, ә ерәндәрҙе сыҙамлыраҡ булыуы билдәле, алмасыбарҙар башҡаларға ҡарағанда нәҫелдән килгән сирҙәр менән йыш ауырый.

Шулай ҙа өйөр аттарына йәнә әйләнеп ҡайтайыҡ әле: беҙҙең башҡорт аттарына ниндәй төҫтәр хас, уның һөйкөмлөлөгө нимәлә? Бонитировка инструкцияһына ярашлы, башҡорт тоҡомло аттарға туры, ҡола, һоро, ерән, көрән, алмасыбар, саптар ҡола, туры-ҡола, ерән-ҡола төҫ хас.

Ерән аттың башы, торооҡо, аяҡтары ерән төҫтә; шул уҡ төҫтәге ялы һәм ҡойроғо бер аҙ асығыраҡ йәки ҡарараҡ булыуы ихтимал.

Көрән аттарҙың башы, торооҡо һәм аяҡтары көрән төҫтә, ялы һәм ҡойроғо ҡара ҡылдар ҡатыш ҡара-көрән. Көрән төҫтөң түбәндәге төрҙәрен айырып йөрөтәләр: ҡара-көрән, һары-көрән, алтын һымаҡ көрән.

Ҡола аттарҙың башы, торооҡо һәм аяҡтары асыҡ һоро йәки ҡыҙғылт аҡ, ялы, ҡойроғо шундай уҡ төҫтә йәки торооғонан асығыраҡ.

Туры аттар төрлө төҫтәге ҡуңыр, башы, торооҡо, ялы һәм аяҡтары ҡушҡар һөйәктәренә тиклем һәм юғарыраҡ ҡара йәки ҡара тип әйтерлек.

Ҡола аттың башы һәм торооҡо һары һоро (ҡайһы берҙә ҡара һоро) төҫтә, ялы һәм ҡойроғо ҡара, аяҡтары ҡушҡар һөйәктәренән һәм сираҡтан башлап ҡара; арҡаһында ҡара һыҙат - ҡайыш, аяҡтарында ҡара-аҡ юлаҡтар булыуы ихтимал. Ҡола төҫтөң түбәндәге төҫтәрен айыралар: һары ҡола, ҡара ҡола, алтын һымаҡ ҡола.

Саптар - был төҫтә ныҡ айырылған ике төҫ бар: ҡара-саптар, торооҡо көрән (шоколад төҫөндә), ялы һәм ҡойроғо торооғонан һиҙелерлек аҡһыл; аҡһыл-саптар, торооҡо көрән (шоколад төҫөндә), ялы һәм ҡойроғо торооғонан һиҙелерлек аҡһыл; ҡуңыр (ҡара-ерән) төҫ; ялы һәм ҡойроғо торооғонан һиҙелерлек аҡһыл - аҡ, һорғолт тип әйтерлек.

Туры саптарҙың башы, торооҡо туры аттыҡы кеүек, ләкин аҡ, ялы һәм ҡойроғо ҡара, аҡһыл-көрән ҡатнаш ҡыллы. Арҡаһында ҡара ҡайыш: ҡалаҡ һөйәктәрендә ҡара таптар (күбәләк) булыуы ихтимал; йыш ҡына яурын аҫтында һәм ҡушҡар һөйәктәрендә арҡыры ҡара ҡылдар күҙәтелә.

Ерән саптарҙың торооҡо аҡһыл-ерән, тоноҡ. Ялы һәм ҡойроғо төрлөсә буялған ерән һәм көрән ҡылдарҙан тора. Арҡаһында ҡара ҡайыш; ҡалаҡ һөйәктәрендә ҡара таптар һәм яурын аҫтында, ҡушҡар һөйәктәрендә ҡара-аҡ юлаҡтар булыуы бар.

Һоро (ҡара саптар) аттарҙың торооҡо һоро йәки зональ төҫтә, башы, ялы, ҡойроғо һәм аяҡтары ҡушҡар һөйәктәренән түбәндә ҡара, арҡаһында ҡайыш, ҡалаҡ һөйәктәрендә ҡара таптар, яурын аҫтында ҡара-аҡ юлаҡтар булыуы ихтимал.

Алмасыбар аттарҙың башы, торооҡо һәм аяҡтары буялған һәм аҡһыл ҡылдар ҡатнашмаһы менән ҡапланған; ялы, ҡойроғо һәм аяҡтары ҡара йәки торооғонан аҡһылыраҡ. Ҡолондар күк, туры һәм ерән төҫтәр менән тыуа, үҫә килә төрлө төҫтәге алмасыбарға йәки бүртәгә әйләнә, шунан аҡһыл йәки аҡ тиерлек, ҡайһы берҙә нөктәле ҡара ҡылдар ҡушылып "карабойҙайға" әүерелә.

Бындай күп төрлөлөк башҡорт атын сағыу һәм һөйкөмлө итеп, күҙгә салынмаған тәбиғәт ландшафтына ҡушып, кешене мотлаҡ хайран ҡалдыра һәм йәлеп итә. Ихтимал, башҡорт атының матурлыҡ сере бер уҡ ваҡытта баҙыҡ һәм серле булып ҡалыуындалыр.

**Камил ФӘРХЕТДИНОВ,**
**ауыл хужалығы фәндәре кандидаты,**
**Башҡортостан дәүләт аграр университеты доценты.**

**Әйткәндәй, йылҡы малының йәшен белдерә торған һүҙҙәрҙе беләһегеҙме? Белмәһәгеҙ, хәтерегеҙгә теркәп ҡуйығыҙ:**

**ҡолон, ҡолонсаҡ, ҡолоҡай (тыуғандан алып алты-ете айға тиклем);**
**ябаҡ, ябаға (ете айҙан бер йәшкә тиклем);**
**тай (бер йәштән йәш ярымға тиклем);**
**ҡырҡмыш тай (ике йәшлек айғыр);**
**байтал (ике йәшлек бейә);**
**ҡонан (өс йәшлек айғыр);**
**ҡонажын (өс йәшлек бейә);**
**дүнән (дүрт йәшлек айғыр);**
**дүнәжен (дүрт йәшлек бейә);**
**тулаҡ (биш йәшлек айғыр, тай-тулаҡ һүҙендә һаҡланған);**
**тыуар (алты йәшлек айғыр, мал-тыуар һүҙендә һаҡланған).**

✓ *Стресты тирә-яҡтағы, мәсәлән, бер өйҙә йәшәгән, бергә эшләгән кешеләрҙән йоҡторорға ла мөмкин. Бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙар бындай "инфекцияға" бирешеп бара, сөнки улар күпкә тәьҫирләрәк.*



ИНТЕРНЕТТАН



# АҠЫЛЛЫ БУЛЫУ ҘА ҠЫЙЫН...

■ Ғалимдар билдәләүенсә, аҡыл йәһәтенән тиҙерәк үсешкән балаларға, үҫкәс,тыйылған матдәләрҙе татып ҡарау хәүефе лә янай. Белгестәр фекеренсә, аҡыллыраҡ кешеләрҙе бар әйберҙәр ҙә тиҙерәк ялҡыта, шуға ла уларҙа яңы тойғолар кисереп ҡарау теләге көслөрәк була. Шулай уҡ интеллект кимәле юғарыраҡ булған һайын, кеше эргә-тирәһендәге кешеләрҙең тәҡдимен кире ҡаға алмай, былар барыһы ла наркотиктар ҡуллана башлауға килтереүе ихтимал.

■ Тикшеренеүсе ғалимдар билдәләүенсә, иммунитетты һәм сәләмәтлекте нығытыу өсөн көн һайын витаминдар ҡулланғансы, алма ашау ҙа етә. С витаминынан тыш, алма флавоноидтар һәм полифенолдар антиоксиданттары бар. Бер бәләкәй генә алмала С витаминының күләме 1500 миллиграмм тирәһе. Шулай уҡ был емештең аллергияға, ялҡынһыныуға, яман шешкә, вирустарға ҡаршы сифаттары асыҡланған.

■ Ябай тоҙға ҡарағанда, таш һәм диңгеҙ тоҙо файҙалыраҡ һанала. Әммә Salt and Health компанияһы тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, тоҙҙоң был төрҙәренең химик составында айырма бөтөнләй юҡ. Волфсан превентив медицина институты табиптары фекеренсә, кулинарҙарҙың таш йәки диңгеҙ тоҙонда мөһим минераль матдәләр күберәк тигәне дөрөҫләккә тап килмәй. Табиптар шулай уҡ бөгөн кешеләрҙең тоҙҙо кәрәгенән артыҡ ҡулланыуы тураһында ла белдерә. Тоҙҙоң көндәлек нормаһы - 1 балғалаҡ, әгәр ул ошо билдәнән ашып китһә, ҡан баҫымы күтәрелеү, инсульт ҡурҡынысы янай.

■ Күптәр йүткергәндә һәм һыуыҡ тейгәндә антибиотиктар ярҙам итә тип уйлап, ныҡ хаталана. Ысынбарлыҡта, антибиотиктар респиратор тракты инфекцияларын тыуҙырыусы вирустарҙы дауаламай. Бынан тыш, күптәрҙең өйөндә ҡасандыр табип тәғәйенләгән антибиотиктар һаҡланыуы һәм был дарыуҙар менән улар аҙаҡтан үҙ аллы дауаланыуы ла асыҡланған. Антибиотиктарҙы дөрөҫ ҡулланмауҙан дауалап булмай торған инфекцияларҙың барлыҡҡа килеүе бар, тип иҫкәртә иммунологтар һәм инфекционистар.

■ Гавайа университеты ғалимдары асыҡлауынса, стресты тирә-яҡтағы, мәсәлән, бер өйҙә йәшәгән, бергә эшләгән кешеләрҙән йоҡторорға ла мөмкин. Бында һүҙ "пассив стресс" тураһында бара, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙар бындай "инфекцияға" бирешеп бара, сөнки улар күпкә тәьҫирләрәк. Табиптар фекеренсә, иң төп хәүефе яһыған еткәсе һәм ҡыҙып барған ир тыуҙыра. Уларҙың асыуланғанын күргән ҡатын-ҡыҙҙа шунда уҡ хәүеф һәм ҡурҡыу тойғоһо барлыҡҡа килә. Ошоно пассив стресс тип йөрөтәләр ҙә инде. Стресс булмаһын өсөн ваҡытында саралар күрергә тәҡдим итә белгестәр. Мәсәлән, был осраҡта йога ныҡ ярҙам итә. Шулай уҡ Ҡытай халҡынан бер кәңәш: әгәр ҙә нервыларығыҙҙы тынысландырам, тиһәгеҙ, сәй ҡайнатығыҙ, сөнки бер үк ваҡытта сәй эсергә һәм борсолорға мөмкин түгел.

■ Изге Лаврентий университеты ғалимдары тикшеренеүҙәренә ярашлы, биш минут дауамында һағыҙ сәйнәү иғтибарҙы туплауға ярҙам итә. Тик һағыҙҙы ваҡытында сүп һауытына ташларға ла өйрәнергә кәрәклеген белдерә табиптар. Тәжрибәләр күрһәтеүенсә, мәсәлән, имтихан мәлендә һағыҙ сәйнәү, киреһенсә, һөҙөмтәле эшләргә ҡамасаулай.

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

**Халҡыбыҙҙа борон-борондан ямғыр саҡырыу йолаһы ла, ямғыр туҡтатыу (ҡайтарыу) йолаһы ла йәшәп килә. Аллаһы Тәғәләнең ризалығына өмөт итеп, ҡорбан салып, Раббыбыҙға ялбарып, ямғыры, йәшеллеге, муллығы өсөн рәхмәтебеҙҙе белдереп, артабан уңыш йыйыуға ҡоро көндәр биреүен һорауҙан ғибәрәт булған боронғо ямғыр ҡайтарыу йолаһын да башҡарырға ваҡыт еткәндер. Ошо урында күренекле этнограф Зәкирйән Әминевтең ошо темаға яҙылған һәм 2018 йылда гәзитебеҙҙә баҫылып сыҡҡан мәҡәләһен яңынан уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итергә булдыҡ.**

# ЯМҒЫР ҺӘМ ЙӘЙ ТАШЫ



Сығышы менән ялан-ҡатай башҡорто, ләкин Рәсәйҙәге Октябрь революцияһынан һуң Төркиәгә сығып китеп, унда Төркиәнең билдәле тарихсы-этнографы булып киткән Абдулҡадир Инан донъялағы төрки телле халыҡтарҙың этнографияһы буйынса ғәйәт ҙур ижади мираҫ ҡалдыра. Төрки телле халыҡтарҙың рухи донъяһына ҡараған материалдарҙы йәштән туплаусы, тикшереүсе булараҡ, ул был өлкәлә иң ҙур абруйға әйләнә. Уның төрки телле халыҡтарҙың рухиәтенә ҡағылышлы бихисап күп хеҙмәттәре араһында ямғыр саҡырыу йолаһына ҡағылышлы Йәй (Яҙа) ташы тураһындағы материалдары бик ҡыҙыҡ.

Төрөк теленән башҡортсаға тәржемә ителеп, 1998 йылда Өфөлә Башҡортостан "Китап" нәшриәте тарафынан баҫып сығарылған "Шаманизм тарихта һәм бөгөн" тигән китабының XIV бүлеге ошо йолаға бағышланып, "Яҙа ташы һәм ямғыр тылсымдары" тип атала. Был хеҙмәтендә А. Инан ямғыр яуҙырыу йолаһы ныҡ таралған халыҡтар араһында башҡорттарҙы ла телгә ала һәм был йолаға ҡыҫҡаса һүрәтләмә бирә.

Башҡорттарҙың ул яҙып ҡалдырған ямғыр яуҙырыу йолаһы бер ниндәй тип әйтерлек үҙгәрешһеҙ беҙҙең көндәргә килеп еткән һәм этнографтар тарафынан XXI быуатта ла телгә алына. Мәсәлән, башҡорт этнографтары Юлиә Әбсәләмова менән Ләйсән Алламоратова Бөрйән районында этнографик экспедицияла йөрөгәндә башҡорттар Байназар менән Мораҙым ауылдары араһында ятҡан йәй ташын күрһәтеп, ямғыр саҡырыу йолаһын башҡарғанда был ташты нисек файҙаланыуҙары хаҡында һөйләгән.

Минең үҙемә ямғыр саҡырыу йолаһын тәү тапҡыр 1975 йылда күрергә, уны үткәреүселәр араһында булып, йола үтәүҙә ҡатнашып, ваҡиғаларҙы ҡыҙыҡ күреп яҙып алырға тура килде. Ул йәйге каникулда, ғәҙәттәгесә, атайыма бесән сабышырға ҡайтҡайным. Өлкән йәштәгеләр, моғайын да, хәтерләйҙер - 1975 йылдың йәйе Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш төбәгендә ҡоролоҡ булды һәм Баймаҡ районының бөрйән ырыуына ҡараған элекке Иҙелбай ауылы кешеләре (был ауыл хәҙер күптән инде Баймаҡ ҡалаһы эсендә, һәм ҡаланың Кәкреауыл тип аталған бер биҫтәһеләр) ямғыр саҡырыу йолаһын башҡарыуға сыҡты. Башҡорттоң иң боронғо дәүерҙәрҙәге үткәне, Исламға тиклемге рухи донъяһы менән ныҡлап ҡыҙыҡһына ғына башлаған сағым ине. Шуға күрә, өлкәндәр, бөтәгеҙгә лә барырға кәрәк, тип әйткәс, ҡыҙыҡһынып, мин дә киттем йола үткәрә торған ергә. Әлбиттә, ул ваҡытта Абдулҡадир Инандың донъяла барлығын да, уның хеҙмәттәрен дә белмәй инем әле. Юл ыңғайы булһа ла әйтеп китергә кәрәктер - был оло ғалимдың хеҙмәттәре үҙенең тыуған халҡына, Башҡорт иленә билдәле философ Д.Ж. Вәлиев һәм Р.Ә. Ғиләжетдиновтарҙың тырышлығы менән совет иле картанан да, донъянан да юҡ булғас ҡына тәржемәләнеп әйләнеп ҡайта алды.

Баймаҡ яҡтарында, Ирәндек итәгендә мин ул саҡта күргән ямғыр саҡырыу йолаһы А. Инан яҙып ҡалдырған Оло Ҡатай, Һәлйот, Барын Табын ырыуы башҡорттары XX быуат башында үткәргән йоланан бер нәмәһе менән дә айырылмай ине, тип әйтергә була. Айырма тик шунда ғына булды: совет йылдарында йола үтәүгә йыйылған халыҡ ҡорбан салып, аят уҡып, күмәкләшеп Хоҙайҙан ялбарып ямғыр һорағандан һуң, дин әһеле (мулла) булмағанлыҡтан, һыуға минең балалыҡ дуҫымды ташланылар. Аҙаҡ һыу һибешеп, шаярышып-көлөшөп, бик ҡәнәғәт өйҙәренә таралыштылар.

Яҙыусы һәм журналист Әхмәр Үтәбай (Баймаҡ районы Буранбай ауылы башҡорто) һөйләүенсә, ошо ауылда йәшәүсе бөрйән ырыуы башҡорттары кәрәк осраҡтарҙа урындағы Һәрешкужа тауына сығып, ямғыр саҡырып, теләк теләү йолаһын башҡарыр булғандар. Был йоланы үтәгән саҡта тәүҙә Ҡөрьән уҡығандан һуң күмәкләп Хоҙайға ялбарып, унан ямғыр яуҙырыуҙы һорағандан һуң, ҡорбан салынған. Аҙаҡ ит бешереп, бер-береһен һыйлағас, һыу һибешеп, аранан берәүҙе тотоп, Һаҡмарға ташлағандар. Аҙаҡ ит бешергән ҡаҙанды түңкәреп, яра һуҡҡандар.

Ейәнсуранан тыуған яҡты өйрәнеүсе Марат Түләбаев үҙ районының ерһыу атамалары хаҡында ҡыҙыҡлы китап баҫтырып сығарҙы. Унда автор урындағы топонимикаға ҡағылышлы легенда һәм риүәйәттәрҙе килтергән. "Теләкташ" тигән бер урында үҫәргән ырыуы башҡорттары ямғыр яуҙырыу йолаһы башҡарған.

Оло йәштәгеләр араһында әлегә тиклем теләк теләү йолаһына ғына түгел, шул йолаға бәйле йәй ташының көсөнә ышаныу ҙа йәшәп килә. Сибайҙа нәшер ителгән "Атайсал" гәзитендә шул ҡала йәшәүсе А. Моталовтың Иҫке Сибай ауылынан алыҫ түгел ерҙәге яңғыҙ таш, боронғолар әйтеүенсә, "сәнскән таш"тың фотоһы менән уның хаҡында мәҡәләһе баҫылып сыҡҡайны. Автор унда үткән быуаттың 50-се йылдарында Сибай ҡалаһының элекке урынында әлеге "сәнскән таш"тарҙың бик күп булыуы, хатта уларҙың аллея рәүешендә теҙелеп киткән мәлен бәйән итә. Үкенескә күрә, был ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған таш ҡомартҡыларҙы таусылар ҡалаһы Сибайҙы төҙегән саҡта ҡеүәтле техника менән ыраҡайҙарҙа аҡтарып алып, емереп бөткәндәр. Аллеяларҙың береһе тау битләүендә, әлеге Горный урамындағы магазин ултырған урында булған. Әлеге мәҡәлә эҙе буйлап Иҫке Сибай ауылында йәшәгән ҡарттарҙан һорашып сыҡҡас, шул асыҡланды: элек башҡорттар баяғы "сәнскән таш" янында теләк теләү йолаһы үткәрер булғандар. Ҡөрьән уҡып, Хоҙайҙан ямғыр һорап, шул ташҡа һыу һибеп, үҙҙәре лә бер-береһен һыу менән ҡойондорошҡандан һуң, ҡорбан салып, ит бешереп, бер-береһен һыйлағандар.

Яҙыусы Лира Яҡшыбаеваның билдәле дин әһеле, күрәҙәсе һәм халыҡ табибы Мөжәүир хәҙрәт хаҡындағы яҙмаларында ла йәй ташына ҡағылышлы эпизод бар. Бер йылы шулай Сибай ҡалаһында ғына түгел, тотош ошо төбәктә ай буйы туктамай ямғыр яуа. Быйың сәбәбен Сибай ҡалаһындағы ниндәйҙер объекттың төҙөгәндә йәй таштарының береһе урынынан ҡуҙғатылған, тип фаразлай халыҡ. Мөжәүир хәҙрәт һәм Сибайҙың өлкән кешеләре кәңәше буйынса, ҙур ғына бер таш кире урынына ҡайтарып ҡуйыла һәм шул гәмәлдә ҡылғандан һуң ямғыр яуыуҙан туктай, тиелгән.

"Киске Өфө" гәзитендә сығышы менән Баймаҡ районынан булған философия фәндәре докторы, профессор Самат Мөхәмәтйәнов Баҡмал исемле өләсәһенең 1919 йылда йәй ташын табып алыуы һәм уға бәйле артабанғы ваҡиғалар тураһында бик матур һәм мауыҡһын уҡырлыҡ иҫтәлектәрен баҫтырып сығарғайны. Баҡмал өләсәй һөйләүенсә, һыуға барғанында ул Саҡмағош тип аталған йылғала төрлө төҫтәр менән емелдәп ағып килгән йәшкелт-аҡ бер ташты тотоп ала. Шул саҡ ҡапыл гәрәсәт сығып, көслө итеп ямғыр ҡоя башлай һәм туктамай ай буйы яуа ла яуа. Йәй ташын тотоп алыуын ишетеп ҡалған оло ауылдаштары Баҡмал инәйгә (ул ваҡытта йәш кенә киленгә) уны кире урынына илтеп һалырға ҡушалар. Ташты кире

✓ *Карьера йәки ҡаҙаныштарҙы маҡсат иткән кеше, дөйөм алғанда, шатлыҡ-ҡыуаныстарға ҡарағанда көйөнөстәрҙе күберәк кисерә һәм уға барыһын да юғалтыу ҡурҡынысы янай.*

илтеп, йылға һыуына төшөрөү менән ямғыр ҙа туҡтай.

Әлегерәк Ейәнсура районына ҡараған, 1960 йылдарҙа Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районына күсерелгән Баҡатар тигән башҡорт ауылы кешеһе Ф. Илбулдиндың йәй ташына бәйле башҡорттарҙың ырым-йолалары хаҡында иҫтәлектәре "Башҡортостан" гәзитендә донъя күргәйне. Ошонда уҡ авторҙың Баҡатар ауылы янындағы тау башында табылған йәй ташының фотоһүрәте лә баҫылды. Ф. Илбулдиндың һөйләүе буйынса, элек үҫәргән ырыуы башҡорттары ошо таш ярҙамында ямғыр яуҙырып йәки оҙаҡҡа һуҙылған яуынды туҡтатыр булған. Бының өсөн улар ҙур ҡаҙанға һыу тултырып, унда йәй ташын төшөргән һәм эргәһенә усаҡ яғып, Хоҙайҙан ямғыр теләгән йәиһә уны туҡтатыуҙы һораған. Бер ваҡыт "Киске Өфө"лә Күгәрсен районынан Миңнулла Әлимғолов Шәмиғол хәлфә тураһындағы яҙмаларын баҫтырғайны һәм шунда бер ваҡиғаны тасуирлап, ғәҙәти булмағанлыҡ рәүештәге йәй ташының фотоһүрәтен дә баҫтырғайны. М. Әлимғоловҡа ул таш ҡыҙыҡ ҡына килеп эләгә: көслө ел һәм ҡойма ямғыр аҫтында тороп ҡалған егет арҡаһына ниҙер килеп бәрелеүҙән әйләнеп ҡараһа, ҙур булмаған сәйер формалағы бер ташты күрә. Эргәһендә килгән изге әүлиә Шәмиғол хәлфә был таштың ябай ғына түгеллеген, бөтөн эштәрҙә лә уңыш килтерер тылсымы барлығын һәм уның Аллаһ тарафынан ебәрелгәнен, Миңнулланың ташты үҙендә ҡәҙерләп һаҡларға тейешлеген аңлата. Был осраҡта ла таштың ямғыр, һыу менән бәйле булыуын күрәбеҙ.

Үҙемә иһә этнографик экспедицияла йөрөгәндә табын ырыуы башҡорттары йәшәгән Ғафури районының Ерек ауылынан алыҫ түгел Арҡа тип йөрөтөлгән бер урында ошонда йәшәгән башҡорттарҙың ҡурһәтеүе буйынса ике йәй ташын фотоға төшөрөп алырға тура килде. Бындағы халыҡтың һөйләүе буйынса, йәй ҡоро килгән йылдарҙа өлкән йәштәгеләр йыйылып, ошо таштар янына барып, уларҙы таҙартып, йыуып, өҫтөнә һыу ҡойоп, һары май һылап, Хоҙайҙан ямғыр һорар булғандар. Был таштарға сәбәпһеҙҙән тейергә, уларҙы урынынан ҡуҙғатырға ярамай, киреһенсә, уларҙы һаҡлап, ҡараштырып торорға кәрәк, тип һөйләне боронғоно белгән, ихтирам иткән Ғафури районының табын башҡорттары.

Йәй ташы хаҡында башҡорттарҙың ырым-ышаныуҙары Абдулҡадир Инан теркәп ҡалдырған башҡа төрки телле халыҡтарҙың шундай уҡ йолаларынан бигүк айырылмай, тиергә була. Төркиҙәрҙең ямғыр яуҙырыу көсөнә эйә булған йәй ташы тураһында X-XI быуаттар арауығында Урта Азияла йәшәгән билдәле ғалим әл Бируни (973-1048): "Бер төрки миңә ямғыр яуҙыра торған таш килтереп бирҙе. Мин уны ҡабул итеп алырмын һәм ҡыуанырмын, тип уйлағандыр, күрәһең..." - тип яҙып ҡалдырған. Боронғо төркиҙәрҙәге ямғыр яуҙырыу көсөнә эйә булған йәй ташы хаҡындағы мәғлүмәттәр Урта быуатта йәшәгән Көнсығыш авторы Ибн әл-Факиһ-әл-Хәмәҙәни хеҙмәттәрендә лә урын алған. Был автор: "Төрки илдәренең бер мөғжизәһе - ямғыр, ҡар, боҙ йәки үҙҙәре ни теләй, шуны яуҙыра ала торған таштары. Был таштар уларҙа ҙур әһәмиәткә эйә һәм киң таралған", - тип яҙып ҡалдырған.

Төрки телле халыҡтарҙың барыһында ла йәй ташы, бер аҙ фонетик айырмалыҡтарын иҫәпкә алмағанда, бер үк атама менән "дьада - яда - сата - джайташ - йәй таш" тип атала.

С.Е. Малов, В.Н. Басилов кеүек билдәле совет ғалимдары, "йәй таш" һүҙенең "йәй", "дьята", "яҙа" өлөшө төрки телдәренә иран телдәре төркөмөнә ҡараған Авеста телендәге "даьда" ("тылсым" "күрәҙәлек") һүҙенә барып тоташа, тигән ҡараштa. Бының менән килешергә лә булыр ине, әммә төрки телле халыҡтарҙа "йәй таш" тураһында әлегәсә һаҡланған мәғлүмәттәр, уларҙың оҡшашлығы был һүҙҙе төрки телдәренең үҙенән аңлатырға кәрәктәр, тигән фекер тыуҙыра. Мәҫәлән, башҡорт телендә, "яҙа", "яҙылыу" һүҙҙәре "асылыу, йәйелеү" мәғәнәһен бирә. Башҡорт телендәге миҙгелде аңлатҡан "йәй" һүҙе үҙе лә ошо "йәйелеү", "киңәйеү", "асылыу" менән бәйлелер. Башҡорттар әле булһа көндөң аяҙайтып китеүен "көн яҙылып китте", тиҙәр, йәғни был һүҙбәйләнеште "көн асылып китте" тигән мәғәнәлә ҡулланалар. Ошо йәһәттән төрлө төрки телдәрендә таралған "дьата, яда, сата, йәй" терминдарының көн торошо менән бәйле булыуын, уның менән идара итергә тырышып ҡулланылыуын күрергә булалыр.

Шулай итеп, был ямғыр яуҙырыу менән бәйле башҡарылған йоланың һәм уны үтәгәндә ҡулланылған "йәй" ("яҙа") ташына бәйле инаныуҙары бөтөн төрки халыҡтары араһында ла әлегәсә тороҡло йәшәп килеүе был йоланың, инаныуҙарҙың дөйөм төрки тамырҙан булыуына бер ишаралыр кеүек.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**этнограф.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# КӨНДӘЛЕК ДОҒАЛАР ҺӘМ ЗЕКЕРҘӘР



## ҺАҠЛАНЫУ ДОҒАҺЫ

**Аллааһүммә әнтә Раббии ләә иләәһә илләә әнт. Ғәләйкә тәүәккәлтү үә әнтә Раббул-ғәршил-ғәҙыым. Ләә хәүлә үә ләә ҡуввәтә илләә билләәһил-ғәлиййил-ғәҙыым. Мәә шәә' Аллааһу кәәнә үә мәә ләм йәшә' ләм йәкун. Ағләму әннәллааһә ғәләә күлли шәй'ин ҡадиир. Үә әннәллааһә ҡад әхәәтә бикүлли шәй'ин ғилмән үә әхсаа күлләә шәй'ин ғәдәдәә. Аллааһүммә инниии әғүүҙү бикә мин шәрри нәфсии үә мин шәрри күлли дәәббәһ. Әнтә әәхыҙун бинәәсыәтиһәә. Иннә Рабии ғәләә сыраатын мустәҡыым.**

"Эй Аллам! Һин минең Раббым һәм Һинән башҡа илаһ юҡ. Тик Һин генә бар. Һиңә һыйынам. Һин Бөйөк Әл-Ғәрштең хужаһы. Бөтә көс-ҡеүәт Аллаһта, Ул әл-Ғәлий һәм әл-Ғәҙыым. Аллаһ насип иткән нәмә - булыр, Аллаһ насип итмәһә - булмаҫ. Беләм, Аллаһ бөтөн нәмәнән дә көслөрәк һәм Аллаһ үҙенең ғилеме менән бөтөн нәмәне солғап алған. Аллаһ бөтә нәмәнең иҫәбен Белеүсе. Эй Аллам! Үҙемдең һәм башҡаларҙың яуызлығынан Һиңә һыйынам. Һин уларҙың барыһының маңлайынан тотоп тораһың (барыһының да тәҡдире Һинең ихтиярында). Шуныһы хаҡ - Раббым хаҡ юлдан алып бара".

## ЙОҠОНАН УЯНҒАНДАН ҺУҢ УҠЫЛА ТОРҒАН ДОҒА

Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (салләллааһу ғәләйһи үә сәлләм), йоҡонан торғас, былай тиер булған:

**Әлхәмдү лилләәһил-ләҙии әхйәәнәә бәғдә мәә әмәәтәнәә үә иләйһин-нушуур.**

"Беҙҙе үлгәндән һуң терелтеүсе Аллаһ Тәғәләгә маҡтауҙарыбыҙ булһын. Һәм терелеү ҙә, Ҡиәмәт көнөндә бер урынға йыйылыу ҙа Уға буласаҡ". (Әбү Дауыт, Тирмизи һәм Ибн Мәджәнән "Төхфәтүҙҙәкирин", 72-се хәҙис).

Киң күңелле Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (салләллааһу ғәләйһи үә сәлләм) тағы бер васыятын ҡалдырған:

**Әлхәмдү лилләәһил-ләҙии раддә ғәләййә руухии үә ғәәфәәнии фии джәсәдии үә әҙинә лии биҙикрих.**

"Миңә йәнемде ҡайтарыусы, тәнемә һаулыҡ биреүсе һәм Уны маҡтарға ирек биреүсе Аллаһ Тәғәләгә маҡтауҙарыбыҙ булһын" ("Әл-Әҙкәр", 21-се хәҙис).

Уянғас та Аллаһ ҡоло тарафынан әйтелеүсе иң яҡшы һүҙҙәр:

**Субхәәнәл-ләҙии юхйил-мәутәә үә һүүә ғәләә күлли шәй'ин ҡадиир.**

"Үлгәндәрҙе терелтеүсе Аллаһ Тәғәләгә маҡтауҙарыбыҙ булһын. Һәм Ул бөтөнөһөнән дә ҡөҙрәтлерәк" (Әбү Дауыт. "Витр", 32-се хәҙис).

## ӨЙҘӘН СЫҠҠАНДА УҠЫЛА ТОРҒАН ДОҒА

Һәр кис һәм иртә һайын (3 йәки 7 тапҡыр):

**Бисмилләәһи хәсбийәллааһу тәүәккәлтү ғәләллааһи ләә хәүлә үә ләә ҡуввәтә илләә билләәһ.**

"Аллаһ исеме менән! Аллаһ булыуы миңә етә һәм Уға тапшырҙым. Көс һәм ҡеүәт бары тик Аллалалыр" (Әбү Дауыт, Тир-мизи, Нәсә'и. "Әл-Әҙкәр", 24-се хәҙис).

**Хәсбийәллааһу ләә иләәһә илләә һүүә ғәләйһи тәүәккәлтү үә һүүә Раббул-ғаршил-ғаҙыым.**

"Аллаһ булыуы миңә етә. Унан башҡа иләһ юҡ. Тик Ул ғына бар. Уға тапшырҙым. Ул Бөйөк Әл-Ғәрштең Хакимы".

**Бисмилләәһил-ләҙии ләә йәдурру мәғәсмиһи шәй'ун фил-арды үә ләә фиссәмәә'и үә һүүәс-сәмииғүл-ғәлиим.**

"Аллаһ исеме менән! Ерҙә лә, күктә лә бер нәмә лә Уның исеме менән зыян килтерә алмаҫ. Ул Ишетеүсе һәм Белеүсе".

**Рамаҙан уғлы Мәхмүт САМИ китабынан.**
**Рус теленән Сәлмән ЯРМУЛЛИН тәржемәһе.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Алтынсы хат: "Маҡсат һәм үҙ баһаңды белеү"

Кеше аңлы рәүештә йәки интуицияға нигеҙләнеп-мә, үҙенә ниндәйҙер тормош маҡсаты, тормошта хәл итә торған мәсьәлә һайлағанда ирекһеҙҙән үҙенә баһа бирә. Кеше нимә өсөн йәшәгәненә ҡарап, уның үҙбаһаһы - түбәнме йәки юғарымы - тураһында ла фекер йөрөтөргә мөмкин.

Әгәр кеше барлыҡ ябай ғына матди байлыҡтарға эйә булыу маҡсатын алдына ҡуйһа, тимәк, ул үҙен дә тап ошо матди байлыҡтар кимәленән сығып баһалай: иң яңы маркалы машина хужаһы, матур дача хужаһы, мебель гарнитурының бер өлөшө булараҡ...

Әгәр кеше башҡаларға яҡшылыҡ ҡылыу, ауырыуҙарҙың хәлен яҡшыртыу, башҡаларға бәхет өләшеү өсөн йәшәһә, ул үҙен дә ошо кешелеклек сифаттарынан сығып баһалай. Ул үҙенә кеше лайыҡ булырлыҡ маҡсат ҡуя.

Бары тик йәшәү өсөн зарур маҡсат ҡына кешегә тормошон лайыҡлы үтеү һәм ысын шатлыҡ кисереү мөмкинлеген бирә. Эйе, шатлыҡ! Уйлап ҡарағыҙ әле: әгәр кеше тормошта яҡшыны арттырыуҙы, кешеләргә бәхет килтереүҙе маҡсат итһә, уны ниндәй бәхетһеҙлек һағалаһын? Ысынлап та мохтаж булмағанға ярҙам итеүме? Ләкин ярҙамға мохтаждар аҙмы ни? Табип икәнһең ти, бәлки, ауырыуҙың сирен дөрөҫ билдәләмәгәнһеңдер? Иң шәп табиптар ҙа бындай хәлгә тарый. Әммә дөйөм алғанда, ярҙам итмәгәнгә ҡарағанда ҡүберәк яҡшылыҡ эшләгәнһең. Хаталарҙан береһе лә һаҡланмаған. Шулай ҙа иң ҙур хата, ҡотолғоһоҙо - ул дөрөҫ һайланмаған төп тормош бурысы. Вазифала үрләтмәнеләр икән - көйөнөс. Кемдәндер мебеле йәки машинаһы һинекенә ҡарағанда шәберәк икән - тағы ла бер көйөнөс, һәм ниндәйе әле!

Карьера йәки ҡаҙаныштарҙы маҡсат иткән кеше, дөйөм алғанда, шатлыҡ-ҡыуаныстарға ҡарағанда көйөнөстәрҙе күберәк кисерә һәм уға барыһын да юғалтыу ҡурҡынысы янай. Ә үҙенең һәр ҡылған изгелегенә ҡыуанып йәшәгән кеше ниндәй юғалтыу кисерә ала? Тик кешенең барлыҡ изгелектәре күңел ынтылышынан булыуы, аҡыллы йөрәктән килеүе мөһим, ә баш менән генә уйланып эшләнмәнен, "принцип"тарының береһенән сыҡмаһын.

Шунлыҡтан төп тормош маҡсаты мотлаҡ шәхсиҙән киңерәк булырға, үҙеңдең уңышың һәм уңышһыҙлыҡтарың менән генә сикләнмәскә тейеш. Ул кешеләргә ҡарата изгелектән, ғаиләгә, ҡалаңа, халҡыңа, илеңә, бар ғаләмгә һөйөүҙән килергә тейеш.

Был кеше дәрүиштәрсә йәшәргә, үҙе хаҡында хәстәрлек күрмәскә, бер нәмәгә лә иреşмәскә һәм вазифаһында үрләтелгәнгә лә ҡыуанмаҫҡа тейешлекте аңлатамы? Һис юҡ! Үҙе хаҡында уйламаған кеше ғәҙәти күренеш түгел һәм шәхсән минең өсөн хатта насар: бында ниндәйҙер төшөнкөлөк, үҙеңдең изгелеклекте, эскерһеҙлекте, әһәмиәтлелекте нисектер ҡабартып күрһәтеү, башҡаларға ҡарата ниндәйҙер бер төрлө кәмһетеп ҡарау, айырылып торорға тырышыу бар.

Шуға мин төп тормош маҡсаты тураһында ғына телгә алам. Ә был төп маҡсатты башҡаларға белдереү, айырып әйтеү кәрәкмәй. Яҡшы кейенергә лә кәрәк (был яҡын-тирәләгеләргә ҡарата ихтирамды аңлата), әммә мотлаҡ "башҡаларҙан яҡшыраҡ" түгел. Үҙ китапханаңды туплау ҙа яҡшы, ләкин күршеңдекенән байыраҡ булыуы мөһим түгел. Үҙең һәм ғаиләң өсөн машина һатып алыу ҙа яҡшы - уңайлы. Әммә икенсе дәрәжәләге нәмәләрҙе беренсе урынға ҡуйыу, тормошондағы төп маҡсатың кәрәкмәгән урында хәлеңдә алып тороуы кәрәк түгел. Кәрәк булды икән - икенсе мәсьәлә. Шул саҡта кем һәм нимәгә һәләтле булыуын ҡарарбыҙ.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**

# Илшат Тимерйәнов: "РЕСПУБЛИКАБЫҘҒА ФАЙҘА КИЛТЕРЕРГӘ ТӘЖРИБӘМ ҺӘМ ТЕЛӘГЕМ БАР"



Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһына кандидат Илшат Тимерйәнов Дүртөйлө ҡалаһында тыуған. Уға 44 йәш. Белеме буйынса юрист, 20 йылдан ашыу ошо өлкәлә уңышлы эшләй, һуңынан үҙен алдынғы эшҡыуар булараҡ күрһәтә, ҙур компанияға нигеҙ һала.

**- Башҡортостан Башлығын һайлауҙа ҡатнашыуға һеҙҙе нимә этәрҙе?**

- Республикабыҙ бөгөн яңы идеялар менән янған яңы кешеләрҙә мохтажлыҡ кисерә. Шул уҡ ваҡытта, мин тәртип һәм тотороҡлолоҡ яҡлы. Ауыл депутаттарынан алып республика башлығына тиклем - һәр вазифалы кешенең үҙен халыҡ менән идара итеүсе тип түгел, ә халыҡҡа хеҙмәт итеүсе булараҡ таныуын теләйем. Шул осраҡта ғына бөтә Башҡортостан халҡына уңайлы көнкүреш шарттары тыуҙыра аласаҡбыҙ.

Мин үҙемде юрист, эшҡыуар, ғаилә башлығы булараҡ таптым. Беҙҙең төбәктә йыйылған ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн тәжрибәм һәм көсөм етерлек.

**- Нисек уйлайһығыҙ, республикалағы ниндәй мәсьәләләргә беренсе сиратта иғтибар бүлергә кәрәк?**

- Беҙҙең республика тәбиғәт байлыҡтары, иң мөһиме, талантлы һәм эшһөйәр кешеләре менән дан тота. Фармацевтика, нефть һәм газ сәнәғәтен үҫтереү өсөн дә шарттар бар. Әммә әүәлгесә был мөмкинлектәрҙән тулыһынса файҙаланмайбыҙ.

> **Кешеләр түбән эш хаҡына, бәләкәй генә пенсияға йәшәй, үҙҙәренең йәшәү кимәлен күтәрә алмай. Сәбәбе ябай - республикабыҙ килеменең күп өлөшө үҙебеҙҙә ҡалмай.**

Минең төп бурыстарымдың береһе - ошо ғәҙелһеҙлекте бөтөрөү. Беҙ яҡшы йәшәргә лайыҡлы.

Төбәктә ҡала мөхитендә, торлаҡ-коммуналь хужалыҡта тәртип урынлаштырыу зарур. Эшҡыуарҙар өсөн уңайлы шарттар тыуҙырырға, эске туризмды йәйға һалырға кәрәк. Программамда йәш быуын өсөн сифатлы башланғыс, өлкән быуын өсөн яңы мөмкинлектәр тәҡдим итәм. Башҡортостан хәҙерге заман үҙгәрештәренән артта ҡалмаҫҡа тейеш, киләсәк - һанлы кинлектә. Шулай уҡ үҙ мөмкинлектәренде тормошҡа ашырыуҙа тиң хоҡуҡтар, ижад азатлығы өсөн сығыш яһайым.

**- Тәжрибәле эшҡыуар булараҡ, был өлкәлә нимәне яҡшыртырға теләр инегеҙ?**

- Эшҡыуарлыҡ - баҙар иҡтисадының нигеҙе. Әгәр ҙә республика эшҡыуарҙары тулыһынса үҙ-үҙен тәьмин итә алһа, иҡтисадыбыҙ Рәсәйҙә иң алдынғы булыр ине. Ул ваҡытта ҡалғандарға - табиптарға, уҡытыусыларға, дәүләт хеҙмәткәрҙәренә һәм башҡаларға аҡса етер ине. Шуның өсөн эшҡыуарҙарҙы артабан да ярҙамһыҙ ҡалдырмаҫҡа кәрәк - уларға арзан кредиттар биреү, һалымдарҙы кәметеү, дәүләт органдары тарафынан контролде сикләү яғындамын.

**- Ни өсөн юрист һөнәрен һайланығыҙ?**

- Бала саҡта китап уҡырға яраттым, тарих менән ҡыҙыҡһындым. Үҫә төшкәс, был ҡыҙыҡһыныуҙарым юриспруденция өлкәһенә килтерҙе. Санкт-Петербург университетының юридик факультетын ҡыҙыл дипломға тамамланым, артабан Мәскәү халыҡ-ара хоҡуҡ һәм иҡтисад институтында иҡтисадты өйрәндем. Шулай уҡ менеджмент буйынса магистрмын.

Сәйәсмән булараҡ, төп бурыстарымдың береһен барлыҡ кешеләрҙең ҡанун алдында тигеҙ булыу шарттарын тыуҙырыуҙа күрәм. Власҡа яҡынлыҡтан бер кем дә үҙ мәнфәғәтендә файҙаланырға тейеш түгел. Бының өсөн тәжрибәм һәм белемем етерлек.

**- Һеҙ сит илдәрҙә лә эшләгәнһегеҙ, был һеҙгә нимә бирҙе?**

- Ысынлап та, күпмелер ваҡыт Европала, Африкала, Ғәрәп Әмирлектәрендә, хатта Ираҡта ла халыҡ-ара проекттар менән шөғөлләндем. Шул уҡ ваҡытта донъяның төрлөсә булыуын аңланым - төрлө ҡанундар, йолалар, йәшәү рәүеше. Әммә, нигеҙҙә, кешеләр бер үк ғәмәлдәр - етеш тормош, яҡшы һаулыҡ, тотороҡлолоҡ һәм киләсәккә ышаныс булыуын теләй.

Уңышлы карьераға өлгәшеүемә ҡарамаҫтан, һәр ваҡыт тыуған еремдә файҙалы булырға теләнем. Сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул, тип юҡҡа әйтмәйҙәр бит. Шунлыҡтан 2017 йылда илемә ҡайтып, үҙемдең юридик фирмамды астым. Юристар командаһы менән компанияларҙы юридик яҡтан оҙатыу, кешеләргә төрлө һорауҙар буйынса консультация биреү менән шөғөлләндек. Был файҙалы тәжрибә булды. Бөгөн дә ошо юҫыҡта эшемде дауам итәм.

**- Тормош иптәшегеҙ менән ҙур һәм матур ғаиләгә нигеҙ һалғанһығыҙ. Балаларығыҙҙа ниндәй ҡиммәттәргә иғтибар тәрбиәләйһегеҙ?**

- Әлеге ваҡытта тормош иптәшем менән ике бала үҫтерәбеҙ. Ғаиләмде ҙур тип иҫәпләмәйем, ҙурыраҡ та мөмкин. Үҙем өс балалы ғаиләлә үҫтем, апайым менән ағайым бар. Бала саҡтан ата-әсәйебеҙ беҙҙе намыҫлы, яуаплы итеп тәрбиәләргә тырышты, беҙ шундай булып үҫтек. Ғүмерем буйы намыҫлы эшләргә тырышам, һәр һорауҙы үҙемә хас аныҡлыҡ, йыйнаҡлыҡ менән өйрәнәм. Тап ошо сифаттарҙы - намыҫлылыҡ, яуаплылыҡты үҙ балаларымда ла күрергә теләйем. Башҡа кешеләрҙә лә ошо сифаттарҙы яҡын күрәм. Бындай кешеләр менән эш алып барыуы еңел, беҙ - бер тулҡында. Ябайлыҡты яратам.

> **Ҙур бейеклектәргә күтәрелеп тә, иң яҡшы кешелек сифаттарын - ябайлығын һәм ихласлығын һаҡлап ҡалған кешеләр бик оҡшай.**

**- Буш ваҡытығыҙҙа нимә менән шөғөлләнәһегеҙ?**

- Бала саҡта футбол менән шөғөлләндем, ҡапҡасы булдым. Әле лә һәүәҫкәр футболда ҡатнашам. Оло улым менән шахмат уйнайбыҙ. Уға алты йәш, ул мине ҡайһы саҡ еңеп тә ҡуя. Барлыҡ буш ваҡытымды ғаиләм менән үткәрәм: сәйәхәт итәбеҙ, олатай-өләсәйҙәрҙә ҡунаҡта булабыҙ, спорт менән шөғөлләнәбеҙ - сәләмәт тормош алып барабыҙ.

**- Белеүебеҙсә, һеҙ хәйриә проекттарында әүҙем ҡатнашаһығыҙ. Ул нисек башланды?**

- Мин даими рәүештә балалар һаулығына бәйле хәйриә фондтарына ярҙам күрһәтәм. Ҡайһы бер ата-әсәләр төрлө сәбәп арҡаһында һирәк осраған сиргә дусар балаһына ярҙам итә алмай. Ҡағиҙә булараҡ, бындай балаларҙы һауыҡтырыу өсөн күп аҡса кәрәк. Үҙем дә, ике бала атаһы булараҡ, бындай хәлгә тарыған балаларҙың ата-әсәһен бик яҡшы аңлайым һәм бөтә көсөм менән ярҙам итергә тырышам.

"Яңы кешеләр" партияһы шулай уҡ хайуандарҙы яҡлау буйынса әүҙем сығыш яһай. Быйыл яҙ беҙ эттәр приютында булдыҡ. Вольерҙарҙы таҙарттыҡ һәм йүнәттек, кәртә эсен бысраҡтан таҙаланыҡ, хайуандарҙы ашаттыҡ. Минеңсә, ошолай, үҙеңдең миҫалың менән киләсәк быуынға мөһим ҡиммәтте - үҙеңдән көсһөҙөрәктәр тураһында хәстәрлек күреү кәрәклеген еткерергә мөмкин.

Бынан тыш, тәжрибәле юрист булараҡ, мин Рәсәй һәм сит ил уҡыу йорттарында лекциялар уҡыйым. Мәҫәлән, бер нисә йыл элек Танзания һәм Нигерия студенттарын юриспруденция нигеҙҙәренә өйрәттем.

**- Республика киләсәген ниндәй итеп күрәһегеҙ?**

- Башҡортостандың бай, алдынғы һәм үҙ-үҙен ҡарарлыҡ хәлдә булыуын бик ныҡ теләйем. Кешеләр беҙгә йәшәргә, эшләргә, балалар үҫтерергә, белем алырға, бизнес алып барырға килһен. Спорт өсөн донъя кимәлендәге шарттар тыуҙырылһын. Беҙҙең сәнғәттә, әҙәбиәттә, музыкала генийҙар тәрбиәләнһен. Ә оло йәштәгеләр үҙҙәрен кәрәкле һәм яҡлаулы тойһон. Йәштәр киләсәккә ышаныс менән баҡһын. Ғаиләләр еңеллек менән күмәк бала үҫтерһен. Республикабыҙ ҙур илебеҙҙә башҡа төбәктәр өсөн иң сағыу, ыңғай миҫал булып торһон, тип хыялланам һәм ошо хыялға ынтылам.

Илшат Тимерйәнов социаль селтәрҙәрҙә:

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# МИҢЛЕҒӘЛИ ШАЙМОРАТОВТЫҢ ТЫУЫУЫНА - 125 ЙЫЛ

**Шайморатов Миңлеғәли Минһажетдин улы 1899 йылдың 15 (яңыса 27) августа элекке Өфө губернаһының Өфө өйәҙе Биштәкә ауылында батрак ғаиләһендә бишенсе бала булып донъяға килгән. Был ауыл хәҙер Шайморатов тип атала.**



М. Шайморатов 1918 йылда Белореттан сығып Архангелгә килеп еткән В.К. Блюхерҙың Көньяҡ Урал партизандар армияһына барып ҡушыла. Аҙаҡ Төркөстан фронтының 1-се армияһы составындағы 1-се Айырым башҡорт-татар кавалерия бригадаһы сафында һуғыша, 1920 йылдың июнь баштарында Көньяҡ-Көнбайыш фронттың 12-се армияһында Польшаға ҡаршы, Ростов өлкәһен Врангель армияһынан азат итеүҙә С.М. Буденныйҙың 1-се атлы армияһы составында ҡатнаша, Ҡырым һәм Кавказ фронттарында һуғыша.

1924-1931 йылдарҙа Мәскәүҙә ВЦИК ҡарамағындағы Юғары дөйөм хәрби училищела уҡый, 1934 йылда М.В. Фрунзе исемендәге Хәрби академияны алтын миҙал менән тамамлай. Ә 1934-1935 йылдарҙа Төркиәлә, 1936-1940 йылдарҙа Ҡытайҙа хәрби атташе була.

Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, 1941 йылдың августа үҙенең полкы менән фронтҡа китә һәм генерал-майор Л.М. Доваторҙың кавалерия төркөмөнә (артабан - кавалерия корпусы) барып ҡушыла.

1941 йылда Башҡортостан хеҙмәтсәндәре иҫәбенә 112-се Башҡорт атлы дивизияһы ойошторола. Декабрь урталарында фронттан полковник Миңләғәли Шайморатов ҡайтып төшә һәм ойошторолоп яткан дивизияны ҡабул итеп ала.

1943 йылдың 23 февралендә, дошман тылындағы оҙайлы рейдтан һуң фронт һыҙығы аша сыҡҡан ваҡыттағы тиңһеҙ һуғыштарҙа гвардия генерал-майоры М.М. Шайморатов Ворошиловград өлкәһе Ивановка районының Штеровка утары янында батырҙарса һәләк була. М.М. Шайморатов ике Ҡыҙыл Байраҡ ордены, Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары менән наградланған, 2020 йылда милли батырыбыҙға Рәсәй Федерацияһы Геройы исеме бирелде. Башваҡыста Шайморатовҡа арналған әҫәрҙәрҙең авторҙарын табырға тәҡдим итәбеҙ.




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**31-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Вертикаль буйынса:** Йоҡо. Оят. Байымбаҡ. Лайла. Фа. Хужа. Сыҫҡан. Ҡашҡа. Айран. Йөрәк. Регата. Тараҡан. Уба. Ант. Ҡатыҡ. Шәл. Һаҡ. Ҡалаҡ. Оҫта. Ҡуян. Уҡа. Айсыҡ.

**Горизонталь буйынса:** Ат. Уҡ. Хөрәфәт. Нотоҡ. Башаҡ. Һорау. Америка. Йыйылыш. Ҡойҡа. Ҡалҡан. Омбол. Йөн. Ҡаҙна. Ата. Сер. Лотос. Ял. Өф. Бала. Ас. Кран. Ҡыуаҡ. Ҡаҙаныш. Нота. Ул.

*КЕМ АЛЫҠ!*




# ИҢ ШӘП БҮЛӘК - КИТАП!

**Былтырғы йылдың икенсе яртыһында "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан түбәндәге уҡыусыларыбыҙ ошо матур китаптарға лайыҡ булды.**

- **Баймаҡ** районы Оло Басай ауылынан Камил Ҡасимов, **Йылайыр** районы Мәҡсүт ауылынан Ф. Мостафина **- "Аҡмулла. Хикмәтле һүҙ";**
- **Ишембай** районы Көҙән ауылынан Айһылыу Ҡадирова, **Баймаҡ** районы Ишмырҙа ауылынан Радик Солтанғолов **- "Салауат Юлаев";**
- **Баймаҡ** районы Ишмөхәмәт ауылынан Ғәзиз Янышев, **Стәрлетамаҡ** ҡалаһынан Радик Узбәков, **Ауырғазы** районы Мораҙым ауылынан Филарит Ҡусҡаров, **Хәйбулла** районы Уфимский ауылынан Фәриҙә Шәрипова, **Учалы** районы Рысай ауылынан Зөлфирә Ғарипова, **Әбйәлил** районы Ҡужан ауылынан Г. Хәйруллин **- "Башҡорт халыҡ ижады";**
- **Баймаҡ** районы Икенсе Әтҡол ауылынан Әкрәм Ҡәйепҡолов, **Йылайыр** районы Япарһаҙ ауылынан Рауил Вахитов, **Учалы** районы Иҫке Байрамғол ауылынан Әлфизә Сәйфетдинова **- "Ризаитдин нәсихәттәре";**
- **Көйөргәҙе** районы Кинйәбай ауылынан Мәймүнә Сәғитова, Көйөргәҙе ауылынан Йәмил Чурин, **Миәкә** районы Ҡырғыҙ-Миәкә ауылынан Фаил Шәймәрҙәнов, Әбйәлил районы Аслай ауылынан Фәниә Мансурова, **Йылайыр** районы Йылайыр ауылынан Шәмсинур Нәҙерғолова, **Баймаҡ** районы Ишмырҙа ауылынан Нурия Тләүсина, Ишмөхәмәт ауылынан Сәфәр Ярмуллин, Мерәҫ ауылынан Әхәт Әсмәндийәров, Мәмбәт ауылынан Әлфирә Мөрсәлимова, **Әлшәй** районы Ҡармыш ауылынан Миңһылыу Ғәбделмәнова, **Хәйбулла** районы Уфимский ауылынан Х. Мөхәмәтйәров, **Мәләүез** районы Смаҡ ауылынан Сания Смакова, **Дыуан** районы Иҫке Хәлил ауылынан З. Низамова, Арый ауылынан Зәйнәб Вәлиева, **Ишембай** районы Һайран ауылынан Риф Хәсәнов, Ейәнсура районы Бикбау ауылынан Ләлә Түләгәнова **- 2025 йылға "Башҡортса дини календарь";**
- Шулай итеп, был акциябыҙ киләһе 2025 йыл миҙгеле өсөн гәзитебеҙгә яҙылыу барышында ла үҙ көсөндә икәнен белеп ҡуйығыҙ. Квитанцияға ҡушып, гәзитебеҙ тураһындағы фекерегеҙ теркәлгән ҡош телендәй генә хатығыҙҙы ла һалһағыҙ, бик шат булырбыҙ. Шулай уҡ квитанцияларығыҙҙа адрестар тулы, аңлайышлы итеп тултырылһын ине, тигән теләк тә бар.

**Иҫкәрмә.** Бүләкләнеүселәр китаптарҙы үҙҙәренең почтальондары аша алыр. Кемдәргә китаптар барып етмәгән, улар Өфөләге балалары, туғандары, таныштары аша Революцион урамы, 167/1 адресы буйынса урынлашҡан редакциябыҙҙан алдыра ала.

- Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru. Беҙҙең электрон почта: kiskeufa@mail.ru.

МӨХӘРРИРИӘТ.

ЗАМАНСА

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ - ИНТЕРНЕТТА




**Йәш быуында тыуған телебеҙгә ҡыҙыҡһыныу уятыу, мәртәбәһен күтәреү өсөн уны интернет киңлектәрендә үҫтереү - заман талабы. Был йәһәттән йәмғиәтебеҙҙә һиҙелерлек уңыштар күҙәтелә.**

## Фондтың өлөшө

2019 йылдан эшләп килгән Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фондының да заман талабын ғәмәлгә ашырыуға индергән өлөшө ҙур. Фонд директоры Гөлназ Йосопова был маҡсаттың төрлө гранттар ярҙамында тормошҡа ашырылыуын белдерҙе.

- Башҡорт телен һаҡлайбыҙ, үҫтерәбеҙ тиһәк, уны интернетта һанлаштырыу мөһим. Был эштәрҙе төрлө проекттар ярҙамында тормошҡа ашырабыҙ. Тәүге проекттарыбыҙҙың береһе 2020-2021 йылдарҙа эшләнгән Башҡортсофт тәржемәсеһе булды. Ул бик яҡшы тәржемә итә, шуға уның менән күптәр ҡуллана. Ундағы мәғлүмәттәрҙе Яндекс, Google эҙләү системаларына бирҙек.

Мобиль ҡушымталар форматында ла бик күп проекттар бар. Әлеге көндә уларҙың һаны 10-дан артып китте. Һуңғыларының береһе - федераль кимәлдәге "Родной язык" мобиль ҡушымтаһы. Унда 10-дан ашыу тел бар ине. Авторҙары менән бөйләнешкә сығып, мобиль ҡушымтаға башҡорт телен дә индерҙек. Башҡорт телен белмәгәндәр, өйрәнергә теләгәндәр уны ла файҙалана ала. Әлегә унда 20 дәрес индерелгән. Аҡрынлап уны күбәйтергә тигән маҡсатыбыҙ бар.

Шулай уҡ социаль селтәрҙәрҙә балалар менән видеоҙмалар, клиптар төшөрөү, ярыштар үткәреү ҙә үҙ һөҙөмтәһен бирә. Улар барыһы ла телгә, мәҙәниәткә ҡағыла. Тағы бер яңылыҡ: YouTube, Rutube каналдарында беҙҙең программа барлыҡҡа киләсәк. Ул рус , инглиз телдәренән башҡортсаға синхрон тәржемә итәсәк. Балалар башҡорт телен белеп үҫһен өсөн был бик һөйбәт эш тип уйлайым.

## Һүҙлектәрҙе һанлаштырып...

Башҡорт телен интернетта үҫтереүгә тырышлыҡ һалған тағы ла бер замандашыбыҙ - ул Өфөнөң Фән һәм технологиялар университетында философия һәм культурология кафедраһында уҡытыусы философия фәндәре кандидаты, доцент Искәндәр Шакиров. Ул яҡынса 50-ләп һүҙлекте һанлаштырып туплауға өлгәшкән.

- Бынан ете йылдар элек килеп тыуҙы был уй. Ҡалала үҫкәс, башҡорт телен бик белмәүем күңелемә тынғы бирмәне. Шуға йыш ҡына машинала барған саҡта башҡортса аудиокитаптар тыңлауҙы ғәҙәткә индерҙем. Ҡайһы бер һүҙҙәрен аңламағас, интернеттан эҙләй торғайным. Ләкин ул һүҙҙәрҙең күбеһе унда ла булмай сыҡты. Шунан башланып китте минең һүҙлектәр туплау, һанлаштырыу эшем.

Әйтергә кәрәк, 1950-1960 йылдарҙа, 1990 йылдарҙа һүҙлектәр күп сыҡҡан, 2000 йылдарҙа ауыл хужалығы, медицина һымаҡ төрлө тармаҡҡа ҡағылышлылар баҫтырылған. Төрлө ерҙән табып алып, уларҙы тупланым.

Иң һуңғылары Фирҙәүес Хисаметдинова мөхәррирләүендәге 10 томлыҡ аңлатмалы һүҙлек ине. Бик тулы һанлаштырылған һүҙлек килеп сыҡты. Шуларҙы бер базаға йыйып, әҙер лингвистик платформаға индерҙек. Был эште башҡарып сығыуҙа күптәр ярҙам итте, уларға рәхмәт, - тип һөйләне башҡорт теленең һанлы кодификацияһының баш мөхәррире Искәндәр Алик улы.

## "Аҡыллы колонка"

Арабыҙҙа "Һомай" аҡыллы колонкаһы тураһында ишетмәгәндәр юҡтыр. Ул да танылыу яулай бара. Уның авторы Бөрйән егете Айгиз Ҡунафин менән әңгәмәләшеү форсаты тейҙе. Бишенсе кластан ул Белорет ҡалаһындағы лицей-интернатта белем ала, 10-11-се кластарҙы ошо ҡалала компьютер мәктәбендә тамамлай. Һөнәр һайларға ваҡыт еткәс, Өфө дәүләт авиация техник университетының информатика һәм робототехника факультетында белем алып, программист булып китә.

"Һомай" колонкаһын булдырыуы ла осраҡлы түгел. 2018 йылдан уҡ ул киләһе быуынға башҡорт телен еткереү буйынса эштәр алып бара. Программист булғас, башҡорт телен интернет киңлектәрендә үҫтереү уйы тынғы бирмәй. Тәүҙә ирекмәндәр менән тәржемәләү, аудиояҙманы текстҡа әйләндереү, йәки, киреһенсә, тексты аудиояҙмаға күсереү кеүек эштәр менән шөғөлләнһә, аҙаҡ ҙурыраҡ маҡсаттар тыуа. Бәләкәй балаларға тәғәйенләнгән "Һомай" проекты ла ошо рәүешле барлыҡҡа килгән. Башҡортса бик белмәгән балалар күп булыуын күҙ уңында тотоп, был колонка башҡортса ла, русса ла аңларға тейеш тигән бурыс ҡуйыла. "Һомай" уларға башҡорт телен белергә йәлап юл аса.

- Тәүге колонкаларҙы быйыл ғинуарҙа балалар баҡсаларына бирҙек. Бер нисә айҙан мәктәптәргә лә тараттыҡ. Төп ҡулланыусыларыбыҙ - балалар. Таратып ҡына ҡалманыҡ, ҡулланыусыларҙың фекерен дә, теләктәрен дә өйрәнәбеҙ. Нимәне үҙгәртергә, камиллаштырырға кәрәклеген белешәбеҙ. Телде генә түгел, тарихты, ғөрөф-ғәҙәтте өйрәтеү ҙә күҙ уңында. Үҙебеҙҙең төбәктәге ер-һыу атамалары тураһында ла балаларға белеү ҡыҙыҡ булыр ине. Балалар өсөн әкиәттәр, йырҙар бар.

"Һомай"ҙың төп маҡсаты - йәш быуын башҡортса аралашып, һөйләп өйрәнһен өсөн уларға ярҙам итеү. Балалар YouTube каналынан йәнһүрәттәрҙе башҡорт телендә лә ҡарай алһын тигән ҙур маҡсатыбыҙ бар. Был - 2024-2025 йылға ҡуйылған бурыс, быны тормошҡа ашырыу өсөн дә грант алдыҡ.

Шуныһы ҡыуаныслы, ололар араһында ла башҡорт телен өйрәнергә теләүселәр бар. Улар ҙа ҡыҙыҡһыныу белдерҙе. Был йүнәлештә лә эш алып барабыҙ. Быларҙы башҡарғанда дәүләт тарафынан финанс ярҙам ныҡ тойола. Башҡортостанда был йәһәттән ҙур иғтибар бирелә, - тине ул.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Телде үҫтереү бер нисә кеше генә башҡара торған эш түгел. Бары тик ҙур команда булып туплаңыу ғына һөҙөмтә бирә. Быны башҡарыуҙа битараф булмаған замандаштарыбыҙ тағы ла күберәк булған һайын интернет киңлектәрендә телебеҙҙең мәртәбәһе артыр.**

ТЕЛҺӨЙӘР

# СЕРКӘШТӘР - БЕҘ ҮҘЕБЕҘ

**Ҡул-аяҡ ярылып, ҡыҙарып тороуҙы халыҡта "себешке" тигән һүҙ менән атау киң таралған. Мәҫәлән, аяҡҡа себешке сығыу. Ә себешкегә әйбер һалып буламы? Әлбиттә, тик был юлы "себешке"гә бөтөнләй бүтән мәғәнә йөкмәтелә.**

**Себешке.** Шулай итеп, "себешке"нең тағы бер мәғәнәһе - ул "Ҡайын ороһо" тигән һүҙ. Ҡайында бер нисә себешке бар. Себешкенең сир-сырхауҙы дауалауҙа файҙаһы ҙур. Ҡайын оронан эшләнгән һауыт та "себешке" тип атала. *Сөм себешке. Себешкегә гөл ултырттыҡ.*

**Серкәш.** Был һүҙ беҙҙең өсөн үтә лә ҡыҙыҡлы, унан боронғолоҡ аңҡый. "Серкәш" этнонимға, йәғни, халыҡ исеменә ҡарай. Ә ҡайһы ҡәүем була икән ул, тигән һорауға яуапты әлә ҡайҙан эҙләү ҙә урынһыҙ: сөнки серкәш ул беҙ үҙебеҙ, башҡорттар. Беҙҙең халыҡты фарсыларҙың "серкәш" тип атағанын белеп ҡуйыйыҡ. *Серкәштәр тураһында тарихи мәғлүмәт туплау. Серкәш батырҙарының даны киң таралған.*

**Сатра.** Ул - юл тармағы, юл айырсаһы. *Сатраға етеү. Сатрала боролош һау.*

**Сауыл** - ҙур яңғыҙ ҡайындың икенсе атамаһы. *Алыҫта сауыл күренә. Сауыл күләгәһендә ялға туҡтау.*

**Сауыллыҡ.** "Карт ҡайынлыҡ" йә "ҡайын урманы" тиер урынға, "Сауыллыҡ" һүҙен ҡулланыу ҙа урынлы. *Сауыллыҡта ҡайын еләге ишелеп уңған. Ҡоштар тауышы сауыллыҡты моңға күмә.*

**Шулай итеп, серкәш-ҡәрҙәштәр үҙ телен белһә, сатраларҙа аҙашмабыҙ.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БҮРЕ ҠАРТАЙҺА ЛА...

## бер ҡуйлыҡ көйәтә ҡала

Ереӊ һатһаң, ауылыңа һат: бер ситенә үҙең барып ултырырһың.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Был донъяла башҡарылған бар эштәр өмөт ярҙамында тормошҡа атҡарылған.

**(Мартин Лютер).**

Көсһөҙ кешеләр һәр саҡ уңайлы мәл көтә, ә көслөләр ул мәлде үҙҙәре тыуҙыра.

**(Максим Горький).**

Әсә һөйөүенә сорналып үҫкән кешене енеүсе тойғоһо һәм уңышҡа ышаныу ғүмер буйы оҙата бара.

**(Зигмунд Фрейд).**

Алыҫ киләсәктә буласаҡ ауырлыҡтар тураһында уйламаған кешене... яҡындағы күңелһеҙлектәр һағалап тороусан.

**(Конфуций).**

Маҡсатҡа барып етмәйенсә, эшеңде ташлап ҡуйһың икән, тимәк, һин - ялҡау. Ялҡау кеше бер ваҡытта ла еңеү яуламай, ә еңеүсе кеше бер ваҡытта ла ялҡау булмай.

**(Наполеон Хилл).**

Ҙур булмаған өлөштәргә бүлеп эшләнһә, бер эш тә ауыр тойолмай.

**(Генри Форд).**

Үҙеңде бәхетле тояһың икән, ни өсөн бәхетле булыуыңды берәмтекләп тикшермә. Был күбәләктең матурлығын тикшереү өсөн уны өлөштәргә бүлеүгә тиң булыр ине.

**(Паоло Мантегацца).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бик ҙур аҡыл туплаған бер кеше һәр ерҙә "Мин үҙ яҙмышыма үҙем тәьҫир итә алам", - тип ҡабатлай торған булған. Быны бер саҡ Яҙмыш ишетеп ҡалған һәм был аҡыл эйәһенең арт һабағын уҡытырға ҡарар иткән. Ул ауырыу ҡарсыҡ һынында әлеге аҡыл эйәһе янына килгән.**

**- Һаумы, аҡыллы кеше, - тигән ҡарсыҡ.- Мин һинең яҙмышың, ә ҡулымдағы ҡапсыҡта һинең йөнең. Хәҙер әйт инде: йөнең минең ҡулда була тороп, һин нисек миңә, яҙмышыңа, тәьҫир итә алаһың?**

**Аҡыл эйәһе оҙаҡ уйлап тормаған, бер таяҡ элэктереп алған да, ҡарсыҡтың башына һеңгәҙәтә һуҡҡан һәм ҡулынан йөнө һалынған ҡапсыҡты тартып алған. Һәм шулай тигән:**

**- Һәр ваҡыт өсөнсө юл табып була...**

**Шунан аҡыл эйәһе ҡапсыҡты яурыны аша һалып, үҙе һайлаған юлдан киткән. Ул бына шулай үҙ яҙмышына үҙе хужа булалыуын иҫбат иткән..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррирәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
15 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тираж - 2750
Заказ - 1379